*Аҡыл - ул тар булғанды киңәйтеү, киң булғанды бәләкәйләтеү, бер-береһенә оҡшағанды күбәйтеү һәм кәҙимге генә нәмәләргә ҡыҙыҡһыныу уятыу.*

*(Квинтилиан).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5 - 11 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№6 (424)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Уңыш теләһәң...**

уңыш яулайһың



5

**Олоно оло итегеҙ, -**

Кәңәш алып йөрөгөҙ



6-7

**Беҙҙе яҡлар, һаҡлар ул**

мәҙәниәт ҡалҡаны...



8-9

**Солоҡсолоҡ шөғөлө тарихта һәм...**

Бөрйәндә генә торол ҡалған



12-13

14 ТВ-программа


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## 10 февралдә Өфөлә Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Советы ултырышы уҙғарылып, унда милләт-ара, конфессия-ара мәсьәләләр ҡараласаҡ. Һөйләшеүҙәрҙә был мәсьәләнең ҡайһы яғына ныҡыраҡ иғтибар итергә тейеш, тип уйлайһығыҙ?

***Марат КОЛШӘРИПОВ, тарих фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университетының тарих факультеты деканы:*** Милли мәсьәлә бик сетерекле, киң мәсьәлә. Рәсәй етәкселеге был мәсьәләгә иғтибар итмәгән һайын, милләт-ара, конфессия-ара мөнәсәбәттәр ҡырҡыулаша ғына бара. Совет дәүерен нисек кенә тәнҡитләһәк тә, ул саҡта СССР, РСФСР составындағы милләттәргә иғтибар, аҙ булһа ла, бар ине. Үҙәк телевидение, радио аша илебеҙ халыҡтарының йыр-бейеүҙәре яңғыратыла ине. Яңыраҡ Мәскәүҙә Манеж майҙанында үткән күңелһеҙ ваҡиғалар нигеҙендә лә милли мәсьәлә, дөрөҫөрәге, Рәсәй властарының милли мәсьәләләр менән шөғөлләнергә теләмәүенең һөҙөмтәһе ята. Хәҙер Үҙәк телеканалдар аша төрлө бәхәс-шоуҙарҙа туранан-тура Рәсәй Федерацияһы составындағы урыҫ булмаған халыҡтарға ҡаршы һүҙҙәр ҡуйыртыла. Ниндәйҙер дошман эҙләйҙәр һәм ул дошманды Ислам динле халыҡтар йөҙөндә күрергә тырышалар. Былар барыһы ла ситтәр тарафынан уйлап сығарыла һәм ул бәхәс-шоуҙарҙа рус милләте вәкилдәре бөтөнләй юҡ.

Әле килеп, "Рәсәй милләте" терминын уйлап сығарҙылар. Рәсәй бер нисек тә Америка була алмай, сөнки беҙҙең илдә бик күп милләттәр үҙҙәренең тарихи тыуған ерендә, үҙ республикаларында йәшәй. Берҙәм "Рәсәй милләте" идеяһы Рәсәйҙе көрсөккә килтереп еткерәсәген аңлаған рус интеллигенцияһы вәкилдәре лә бар, улар был тәңгәлдә үҙ фекерҙәрен әйтә лә башланы. Минеңсә, Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Советы милли мәсьәләләрҙе ысынбарлығында объектив ҡарап, ниндәйҙер етди ҡарарҙар ҡабул итә алырға тейеш.

***Хәлил БАРЛЫБАЕВ, иҡтисад фәндәре докторы, Рәсәй Федерацияһы Президенты эргәһендәге Дәүләт хеҙмәте академияһы профессоры:*** Хәҙерге көндә институционализм исемле бик популяр ижтимағи теория бар. Уның буйынса, мөһим йәмғиәт күренештәре тейешле кимәлдә тормошҡа ашырылһын өсөн улар закон, ойошма, орган йә ҡағыҙҙа былдырыу аша рәсмиләштерелергә тейеш. Шулай булмаһа, йәмғиәт тормошонда анархия барлыҡҡа килә. Беҙҙең илдә милләт-ара, конфессия-ара, дини мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса дәүләт органдары юҡ, тейешле закондар, рәсми ҡағыҙҙәләр етешмәй. Рәсәй күп милләтлелек коэффициенты күрһәткесе буйынса тик Һиндостан һәм Швейцария менән бер рәттә донъяла иң юғары урынды алып тора. Рәсәй субъекттары араһында тик Дағстан һәм ниндәйҙер кимәлдә Башҡортостан ғына шундай уҡ кимәлгә эйә. Унда ҡайҙандыр ситтән килеп ултырмаған, ә тарихтың билдәле була башлаған осоронан алып йәшәүсе урындағы халыҡтар донъя күрә. Шуға күрә Рәсәй Федерацияһында милләт-ара, конфессия-ара мәсьәләләр менән шөғөлләнеүсе юғары парламент органдары, министрлыҡ йә дәүләт комитеты булырға тейеш. Беҙҙең илдә ундай министрлыҡ бар ине, тик уны 2000 йылда бөтөрөп ҡуйҙылар. Мәскәүҙә һәм башҡа урындарҙа үткән террористик акттарҙың килеп сығыуында Рәсәйҙә милли мәсьәләләр менән шөғөлләнеүсе юғары органдың булмауы ла сәбәпсе булып тора. Беҙҙә иһә, берәй сетерекле милләт-ара проблема килеп сыҡҡан осраҡта тик хоҡуҡ органдарын, именлек хеҙмәтен, милицияны (артабан полицияны) йәлеп итәләр, көс ҡулланыу хеҙмәттәрен үҙ вазифаларына һалҡын ҡарауҙа ғәйепләй башлайҙар, йәғни, аңһыҙ рәүештә ижтимағи, социаль, хоҡуҡ мәсьәләләре менән ныҡ үҙенсәлеккә эйә булған милли мәсьәләләрҙе бутарға тотоналар. Шуға күрә Өфөлә үтәсәк Дәүләт Советы дежур сара булып ҡалырға тейеш түгел. Унда ҡаралған мәсьәләләр, ҡабул ителгән ҡарарҙар, ғәҙәттәгесә, тиҙ арала онотолмаһын өсөн, тормошҡа ашырылыҡ, эҙмә-эҙлекле, систематик рәүештә башҡарырлыҡ итеп эшләнергә тейеш. Шундай ҡарарҙар араһында юғары дәүләт органдары - Рәсәй Парламентында милләттәр палатаһы, Хөкүмәт структураһында министрлыҡ йә комитет ойоштороу кәрәк икәне көн кеүек асыҡ.

***Рим ВӘЛИӘХМӘТОВ, Социаль-сәйәси һәм хоҡуҡ тикшеренеүҙәре институты директоры, социология фәндәре кандидаты, доцент:*** Өфөлә үтәсәк Дәүләт Советы ултырышында ҡаралаcаҡ мәсьәләләргә түбәндәгеләрҙе тәҡдим итер инем:

- Рәсәй Федерацияһы Конституцияһында төп урынды биләгән федерализм принцибын артабан нығытыу һәм үҫтереү, милли республикаларҙы һаҡлап ҡалыу мәсьәләһенә төп иғтибар бирелергә тейеш. Рәсәйҙе унитаристик дәүләткә әйләндереүгә маташыуҙы экстремистик ҡараш тип баһалау мөһим. Экстремизм урамдарҙа, майҙандарҙа үткән митингыларҙа ғына түгел, кабинеттарҙа ла тыуа.
- Яңы шарттарҙағы Рәсәй Федерацияһының милли сәйәсәт концепцияһы мәсьәләһен ҡарау, ул әле раҫланмаған.
- Рәсәй Федерацияһында Милләттәр советын төҙөү мәсьәләһен ҡарау - шулай уҡ мөһим.
- Рәсәй Федерацияһында йәшәүсе милләттәр проблемалары, уларҙың мәҙәниәте, сәнғәте, тарихы хаҡында федераль телеканал асыу тураһында һүҙ күтәреү - көнүҙәк мәсьәлә.

***Румиль АҘНАБАЕВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары:*** Дәүләт Советына килгәндәргә мин, мөмкинлек булһа, өс һорау ғына бирер инем. Беренсенән, Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда милли мәсьәләләр менән шөғөлләнгән бер орган да юҡ, ҡасан буласаҡ ундай орган? Икенсенән, беҙҙә һуңғы ваҡытта экстремизм күренешен табырға тырышыусылар күбәйеп китте. Генерал-майор Трушин да ниндәйҙер деструктив йәшерен көстәр барлығын "асыҡлаған". Юҡ беҙҙә ундай күренештәр һәм бындай яла яғыуҙар ҡасан туҡтатыласаҡ? Өсөнсөнән, беҙҙә башҡорттарҙы республикала йәшәгән башҡа халыҡ вәкилдәренә ҡаршы ҡуйырға тырышыусы "Уфагубъ" сайты бар. Милли хәрәкәттә ҡатнашҡан күп кенә йәштәребеҙ күҙәтеү аҫтында тора. Быларға ҡасан сик ҡуйылыр икән?

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**



Башҡорт күңеле һәр кемгә асыҡ!

## КЕМ АЛЫҠ!

**"Квитанциямды ебәрәм, тик бүләк алыу өсөн түгел, ә тыуған көнөмдө хәбәр итеү өсөн. Бүләккә килгәндә, "Киске Өфө" үҙе беҙҙең өсөн иң ҙур бүләк", тигән һүҙҙәр өҫтөнлөк итә быйылғы тәүге ярты йыллыҡ өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһында.**

# КЕМГӘ - БҮЛӘК,
## кемгә - "Дини календарь"...

Эйе, матур йолабыҙ - гәзит аша уҡыусыларыбыҙҙы тыуған көндәре менән ҡотлау дауам итә. Ә шулай ҙа биргән вәғәҙәбеҙгә тоғро ҡалып, квитанцияларын беренселәрҙән булып редакцияға ебәргән 300 уҡыусыға 2011 йыл өсөн "Дини календарь" һәм бер нисә уҡыусыға махсус бүләктәребеҙҙе юллайбыҙ. Бүләктәребеҙгә лайыҡ булыусылар ошолар:

Бөрйән районы Миндеғол ауылынан Мөхәрләм Вахитов - **сепаратор**, Баймаҡ ҡалаһынан Әхиәр Исхаҡов - **микротулҡынлы мейес**, Әбйәлил районы Яңы Балапан ауылынан Нәфисә Мәғәсүмова - **кеҫә телефоны**, Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылынан Зилара Низамова, Йылайыр районы Ҡашҡар ауылынан Флүрә Сәлимова, Өфө районы Чесноковка ҡасабаһынан Әлфиә Ғөбәйҙуллина, Баймаҡ районы Билал ауылынан Гөлдәр Әлибаева, Хәйбулла районы Оло Әбеш ауылынан З. Ишморатова, Мәсетле районы Юныс ауылынан Сәғиҙә Мөхәрәмова - **электр сәйнүге**, Ғафури районы Һабай ауылынан Рәсилә Ғафарова, Күгәрсен районы Сәйетҡол ауылынан Миникамал Ғәйнуллина, Учалы районы Истамғол ауылынан А. Ғәйетколова, Миәкә районы Илсеғол ауылынан Гүзәл Ниғмәтуллина, Өфө ҡалаһынан Нәфис Аҡҡолов, Мәләүез районы Әбет ауылынан Йомағол Исәнов **электр үтеге** кеүек бүләктәребеҙгә лайыҡ булды.

Гәзитебеҙҙе таратыуҙа почтальондарҙың хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ икәнен беләбеҙ. Фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн рәхмәт йөҙөнән иң күп "Киске Өфө"гә яҙҙырыусы бер нисә почта хеҙмәткәрен дә бүләкләп китмәксебеҙ. Былар улар - беҙҙең бүләккә лайыҡ булыусылар: Ишембай районы Әхмәр ауылынан **Рәмзиә Кәримова**, Күгәрсен районы Бикбулат ауылынан **Рәмил Хәлитов**, Тәләүембәттән **Сәйфулла Кинйәбулатов**, Ейәнсура районы Ибрай ауылынан **Миңлебикә Мырҙабаева**, Башҡорт Үргененән **Рәйсә Зарипова**, Сибайҙан **Рәйлә Юнысбаева**, **Ғәлиә Муллағәлиева**, Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан **Гөлгөнә Мөстәхетдинова**, **Гөлнара Әхмәҙиева**, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан **Сания Фәттәхова**, Бурлынан **Римма Зәйнуллина**, Баймаҡ районы Ярат ауылынан **Әнисә Юлғотлина**, 1-се Этҡолдан **Рәсимә Абҙаҡова**, Әбйәлил районы Рысҡужа ауылынан **Мәғмүрә Хәсәнова**, Буранғол ауылынан **Әлфиә Булатова**, Учалы районы Мулдаҡай ауылынан **Лидия Исрафилова**, Наурыз ауылынан **Самат Әхтәмов**.

**Әйткәндәй...**

**Таныштарығыҙ, хеҙмәттәштәрегеҙ араһында "Киске Өфө"гә яҙыла алмай ҡалғандар булһа, иҫтәренә төшөрөгөҙ: улар гәзитебеҙгә әле лә яҙыла ала, тик уны марттан ғына алдыра башлаясаҡ. Шулай уҡ февраль-мартта 2011 йылдың тәүгә ярты йыллығы хаҡтары менән 2011 йылдың икенсе яртыһына ла яҙыла башларға мөмкин. Беҙҙең индекстар: 50665 (алты айға - 330 һум 24 тин), 50673 - (предприятие һәм ойошмалар өсөн 360 һум 24 тин).**

## ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# БАШҠОРТ БУЛЫУЫҢДАН НИ МӘҒӘНӘ,
## балаларың башҡорт булмағас...

**Беҙҙең ҡалаға сауҙа эштәре менән Кавказ яҡтарынан килгән бер мосолман ғаиләһен беләм. Бөтә дини ҡануындарҙы башҡармаһалар ҙа Ҡөрьән сүрәләрен белеп, хәрәм эштәрҙән һәм аштарҙан тыйылып көн итәләр.**

Мине иң аптыратҡаны - уларҙың балалары. Улы һәм ҡыҙы буй еткергән инде, бәлиғ булғандар. Уларҙың кем менәндер дуҫлашып, ғаилә ҡороу тураһында һүҙ ҡуҙғатҡанын ишеткән булмағас, аптырап, ҡыҙыҡһыныуымды еңә алмай, бер көн үҙҙәренән үк һорай ҡуйҙым. Кейәүгә сығырға, кәләш алырға йыйынмайҙармы әле, йәнәһе. Сәс толомо теҙенә тиклем төшөп торған һомғол буйлы сибәркәйҙең яуабы ошо булды: "Бында мин әсәй-атайыма сауҙа эшендә ярҙам итергә һәм һөнәри белем алырға тип килдем. Уҡыуымды тамамлайым да, тыуған илемә ҡайтып, үҙ милләтемдән булған егеткә кейәүгә сығасаҡмын. Бында минең милләт егеттәре юҡ бит..." 27 йәшен тултырған улдары менән әңгәмә мине тағы ла ныҡыраҡ аптыратты ла, һоҡландырҙы ла: "Әгәр бында минең ниндәйҙер ҡатын-ҡыҙ менән сыуалғанымды яҡташтарым белеп ҡалһа, мин үҙ илемә ҡайтып кәләш ала алмаясаҡмын. Туғандарым һәм иң тәүҙә атайым минән баш тартасаҡ". Артабан егет милләте менән ғорурланыуы, үҙ еренә, тәбиғәтенә, туған теленә, моңона һәм лезгинка бейеүенә үлеп ғашиҡ булыуы тураһында һөйләне.

Ете ят илгә килеп байтаҡ ғүмер итһәләр ҙә үҙ асылына тоғро ҡалған ғаилә менән ошо аралашыуҙан һуң үҙебеҙҙең милләттең бәләһенә әүерелгән ҡатнаш никахтар мәсьәләһе тағы йөрәктә әрнетте. Сит ил егетенә кейәүгә сығып, дингеҙ арьяғына китергә ынтылған ҡыҙҙарыбыҙ, киноэкрандарҙа ғына осрай торған һомғол буйлы блондинкалар тураһында хыялланып, ябай башҡорт ҡыҙҙарын шәйләмәгән егеттәребеҙ өсөн көйөнмәйенсә буламы ни! Башҡа милләт кешеһе менән донъя ҡороуҙы ғәҙәти хәлгә әйләндерҙе бит йәштәребеҙ. Сөнки ата-әсә быға юл ҡуя, бала сҡтан балаһының аңына "Һин үҙ милләтеңә балалар үҫтерергә тейешһең", тигән тәрбиәне һендермәй. "Мөхәббәткә ҡаршы барып булмай инде", тигән һылтау табалар эш үткәс. Шунан ейән-ейәнсәрҙәр менән сит-ят телдә аралашырға мәжбүр булалар. Ошонан да аянысыраҡ хәлдең булыуы мөмкинме?!

Ҡатнаш никахтар беҙҙең өсөн ике яҡлап та ҡурҡыныс. Әгәр ғаиләлә әсәй - башҡорт, атай башҡа милләттән икән, уларҙың балаһы әсә телен һәм халҡыбыҙҙың ҡайһы бер йолаларын белеүе мөмкин, тик документтары буйынса ул башҡорт түгел. Әгәр атай кеше - башҡорт, ә әсәй башҡа милләттән икән, был ғаиләлә иһә бала башҡорт булып яҙыла ла, унда милли тойғо булмаясаҡ, ә телде инде ул күп осраҡта бөтөнләй белмәйәсәк. Был ике осраҡта ла һин милләт өсөн юғалғаныһың, милләтте дауам итмәйһең, тигән һүҙ. Был - әсе хәҡиҡәт. Тик атаһы ла, әсәһе лә бер милләттән булған ғаиләләрҙә генә милләткә тоғро, рухи ҡиммәттәрҙең ҡәҙерен белгән һәм халҡының киләсәгенә битараф булмаған балалар тәрбиәләп була.

Халҡым, телем, ерем, тип янып-көйөп йөрөгән зыялыларыбыҙҙың да байтағының балалары сит милләт кешеһенә кейәүгә сыға һәм кәләш ала. Һинең милләт тип янып йөрөүеңдән ни мәғәнә инде шулай булғас? Яңып-көйөүҙәрҙең төп объекты - балаларыңды башҡорт итеп тәрбиәләү һәм уның да артабан милләткә балалар үҫтереүен хәстәрләү булырға тейеш, тип уйлайым. Шул сағында ғына милләтебеҙҙең киләсәге яҡты, уның мәңге йәшәренә өмөт бар. Ошо ҡағиҙәне башҡа бик күп милләттәр йәшәү ҡағиҙәһе итеп һаҡлап, быуындан-быуынға балаларына тапшыра килә. Ә ниңә беҙ уны һанламайбыҙ?

Беләм, беләм, был юлдарҙы төрлөсә ҡабул итәсәкһегеҙ. Икенсе милләт ҡыҙына ғашиҡ булған икән, баланың юлына арҡыры төшөп, уны фажиғәгә этәрәйекме, үҙебеҙҙән ситләштерәйекме, тигән яуап булыр күптәрҙә. Әлбиттә, шулай. Әммә һин бит был хәлдә алдан уҡ иҫкәртергә тейеш инең. Был тәрбиәгә нигеҙ бишектән алып үҫеп еткәнсегә тиклемге тәрбиәүи процеста һалынырға тейеш. Беренсенән, бала тик үҙ телендә һөйләшеп үҫһен. Әгәр ҙә ул бала сҡтан тик русса ғына һөйләшә икән, киләсәктә Иван йәки Маринаға өләсәй-олатай булып ултырыуыбыҙ ихтималлығы бермә-бер арта. Икенсенән, тарихыбыҙға, мәҙәниәтебеҙгә, милли йолаларыбыҙға ихтирам тәрбиәлә. Был бурысты мәктәпкә һәм башҡорт теле уҡытыусыларына ғына ауҙарып ҡуймай, ғаиләлә лә милли рух төшөнсәһен тәрбиәнең төп өләшө итеп ҡабул итеү кәрәк. Өсөнсөнән, баланы күберәк олатай-өләсәһе менән аралаштырыу, милли рух орлоҡтарын ейәндәренә лә тапшырырға мөмкинлек биреү кәрәк. Һәм, әлбиттә, бала менән аралашҡанда, үҫеп еткәс, үҙ телеңдә һөйләшкән, үҙ милләтеңдән булған егет һәм ҡыҙ менән ғаилә ҡороу кәрәклеген әленән-әле ҡабатлап тороу мотлаҡ.

Ҡатнаш никахтарҙың милләтебеҙ киләсәге өсөн ҙур ҡурҡыныс тыуҙырыуына иманым камил. Шулай булғас, бөгөнгө йәштәргә өндәшәм: мин башҡорт, тип ғорурланып, башҡортса һөйләшеп, башҡорт телендә йырҙар тыңлап йөрөү генә аҙ. Башҡортлоғоңдо ғаилә ҡорғанда, буласаҡ балаларыңдың атаһын йәки әсәһен һайлағанда ла онотма!

**Рима ҠОТЛОҒӘЛЛӘМОВА.**
**Салауат ҡалаһы.**

**РЕДАКЦИЯНАН: "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡатнаш никахтар мәсьәләһен йыш күтәрәбеҙ. Был тыйылған тема түгел. Был теманы күтәргәндә беҙ башҡа милләттәрҙе кәмһетмәйбеҙ, милләттәрҙе бер-береһенә ҡаршы ҡуймайбыҙ. Ҡатнаш никахтар бер милләт өсөн дә файҙа килтермәй икәнен үҙ милләтебеҙ миҫалында раҫларға тырышыуыбыҙ ғына. Хоҙай беҙҙе был ергә милләт итеп яратҡан икән, беҙ артабан ошо милләтте дауам итер балалар үҫтерергә тейешбеҙ. Кирәһенсә булғанда, беҙ Хоҙай әмеренә ҡаршы барабыҙ булып сыға. Тыуасаҡ балаларҙың күңелен болғатмайбеҙ - бына шуныһы ҡурҡыныс уның, ҡатнаш никахтарҙың. Ҡылынған хаталарҙы төҙәтеү мөмкин түгел, ә ҡылыныу ихтималлығы булған хаталарҙы иҫкәртеп була. Әйҙәгеҙ, ошо тема буйынса бер аҙ фекерләшеп алайыҡ. Уның кемгәләр файҙалы булыуы бик тә мөмкин.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Президенты Киров ҡалаһында Рәсәй төбәктәрендә торлаҡ төҙөлөшө үҫеше мәсьәләләре буйынса ултырышта ҡатнашты. Унда вице-премьер Александр Жуков, Рәсәй төбәк үҫеше министры Виктор Басаргин, иҡтисад министры Эльвира Нәбиуллина, РФ Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Григорий Рапота, төбәк етәкселәре, йәмәғәт ойошмалары, профилле министрлыҡтар һәм ведомстволар вәкилдәре ҡатнашты.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Указы менән Марат Мәһәҙиев Башҡортостан Республикаһының Йәмәғәт именлеге ведомство-ара советы секретары итеп тәғәйенләнде. Марат Шәриф улы быға тиклем РФ Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса министрлыҡтың Баш идарағы начальнигы вазифаһын башҡара ине.

✓ БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев Баймаҡ, Әбйәлил, Хәйбулла районларында һәм Сибай ҡалаһында булып, депутаттар, ауыл биләмәләре башлыҡтары, предприятие һәм ойошмалар етәкселәре, йәмәғәтселек вәкилдәре һәм башҡалар менән осрашты, граждандарҙы шәхси мәсьәләләр буйынса ҡабул итте.

✓ Башҡортостанда саф башҡорт тоҡомло аттарҙың дәүләт нәҫел китабының беренсе томы донъя күрҙе. Беренсе томды әҙерләгәндә Башҡорт ауыл хужалығы фәнни-тикшеренеү институты һәм "Өфө" дәүләт ат аҙбары хеҙмәткәрҙәре республикалағы башҡорт тоҡомло аттарҙы тикшергән. Экспедицион тикшеренеүҙәр ваҡытында 1200 ат баһаланған.

✓ Февралдән республикала "Айыҡ ауыл" конкурсы старт ала. Был конкурс "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт ойошмаһы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, БР Һаулыҡ һаҡлау һәм Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлыҡтары тарафынан ойоштоР ола. Конкурс сиктәрендә айыҡ ғаилә, айыҡ мәктәп, айыҡ ойошма кеүек бәләкәй конкурстар ҙа старт аласаҡ. "Айыҡ Башҡортостан" йәмәғәт ойошмаһы был көндәрҙә республикаға РФ Дәүләт Йыйылышының эксперт советы ағзаһы Владимир Ждановты саҡырҙы һәм уның халыҡ менән осрашыуҙарын үткәрҙе (был турала гәзитебеҙҙең киләһе һанында тулыраҡ яҡтыртасаҡбыҙ).

✓ *Яңы Рәсәйҙә яңы тормошҡа өмөтләнгән кешеләр ҙә, бөгөн беҙ арыныҡ, беҙ китәбеҙ, тип әйтер ине. Тик уларҙың Юрий Лужков, Роман Абрамович, Олег Дерипаска һымаҡ туплаған миллиардтары юҡ.*



*АҘНА ШАНДАУЫ*

# АРЫНЫМ. КИТӘМ.

## Йәки Борис Ельциндың был һүҙҙәрен бөгөн бөтә йәмғиәт ҡабатлай түгелме?

**Үткән аҙнала ике ваҡиға иғтибарҙы айырыуса йәлеп итте. Береһе - Борис Ельциндың тыуыуына 80 йыл тыуыу уңайы менән үткәрелгән саралар һәм, ғөмүмән, ваҡытлы матбуғат сараларында был шәхестең Рәсәй Президенты посындағы эшмәкәрлегегенә, шәхси һәм эшлекле сифаттарына бирелгән баһа. Икенсеһе иһә Юрий Михайлович Лужковтың сит илгә сығырға йыйыныуы хаҡындағы хәбәрҙәр. Эйе, эйе, Мәскәүҙең элекке мэры Рәсәйҙе ташлап китергә йыйына, имеш. Юҡ, юҡ, ялға, йәғни Рәсәй халҡының яратҡан "пляждары"на әүерелгән Төркиәгә йәки Египетҡа түгел. Сит илгә даими рәүештә йәшәүгә урынлашырға самалай Юрий Михайлович. Бөйөк Британияны һайлаған тиҙәр, томанлы Альбионға юл тотмаҡсы икән. Хәләл ефете һәм ҡыҙҙары күптән инде Лондонда йәшәй, имеш. Юрий Михайлович бары тик ғаиләһе менән ҡушылырға, бергә йәшәргә теләй.**

Мәскәү Юрий Михайловичҡа ҡайһы ере менән оҡшамайҙыр инде? Үҙе егерме йыл буйына тәҙөгән баш ҡалала рәхәтләнеп йәшәргә ине лә бит... Нимәләр ҡамасаулай. Әллә бөтмәҫ-төкәнмәҫ авто "тығындар"ҙа торғоһо килмәй инде? Әллә Мәскәү климаты оҡшамаймы уға? Ҡышын өҫтән яуып торған ҡар, йәйен короләк ыҙалатамы? Мәскәү эргәһендәге торф яткылыҡтарынан килгән көйөк еҫе танауын сирылттырамы? Ҡапыл ғына аңлап та булмай. Юрий Михайловичты мин ихтирам итәм. Һуңғы егерме йыл эсендә ул үҙен Рәсәйҙең ысын патриоты итеп күрһәтте, урыҫ халҡының хоҡуҡтары өсөн тәнен-йәнен аямай көрәште. Айырыуса сит илдәрҙә йәшәгән урыҫ телләләрҙең мәнфәғәттәрен ҡайғыртты. Ҡырымдағы Севастополь ҡалаһын Рәсәйгә ҡушырға тәҡдим итте, Балтик буйы дәүләттәрендә йәшәгән урыҫ телле "граждан булмағандар"ҙы яҡлап тауыш күтәрҙе, "шпрот һуғышы"н иғлан итте. Мәскәүҙең ысын патриоты булды ул. Йыл һайын сентябрь баштарында Мәскәүҙә үткәрелгән Баш ҡала көндәрендә бар халыҡ менән бергәләшеп "Дорогая моя столица, золотая моя Москва!" тип йыр һуҙҙы. Әле бына ҡапыл ғына Мәскәүҙе һәм, ғөмүмән, Рәсәйҙе ташлап китергә булып китте. Патриотизм тойғоларына көйә төшкәнме әллә? Бәлки, эшенән "ышанмаусанлыҡ" белдереп алып ташлауҙары оҡшамағандыр? Әллә тикшереү органдарының Мәскәү мэрияһының эшмәкәрлеге менән ҡыҙыҡһыныуы йөрәген өйкәйме? Әллә Рәсәйҙә йәшәп арығанмы?

Ҡапыл ғына шуға иғтибар иттем әле. Ғүмер буйына (көмендә, һуңғы егерме йыл эсендә) бер туҡтауһыҙ сепаратизмда, милләтселектә, феодализмда, Рәсәйҙе тарҡатырға маташыуҙа ғәйепләнгән ике оло етәксе - Минтимер Шәймиев менән Мортаза Рәхимов - үҙ постарынан киткәс, бер ҡайҙа ла ынтылмай, бер ҡайҙа ла ҡабаланмай, Латвияға йәки Англияға виза йүнләп сәбәләнмәй, үҙ илдәрендә - Рәсәйҙә, тыуған төбәктәрендә - Татарстанда һәм Башҡортостанда тыныс ҡына йәшәй, тыуған республикаларына хәлдәренән килгәнсә ярҙам итергә, булышырға тырыша. Ә ауыҙ тултырып Рәсәй, урыҫ халҡы, патриотизм тураһында лаф орган кеше бөгөн тыуған илен ташлап китергә йыйына.

Ә һеҙ беләһегеҙме, йәмәғәт, Лондонды, Бөйөк Британияның баш ҡалаһын, ҡайһы берәүҙәр уйынлы-ысынлы Лондоград тип атап йөрөтә икән. Унда яҡынса 300 мең урыҫ телле йәшәй, шул иҫәптән, Роман Абрамович, Олег Дерипаска, Владимир Гусинский, Борис Березовский кеүек байҙар. Тиҙҙән был исемлеккә ысын патриот һәм үҙ иленең лайыҡлы гражданы булған Юрий Лужковтың фамилияһы ла индереләсәк. Күрәһең, хатта егерме йыл буйына дәүләтебеҙҙең баш ҡалаһы менән идара итһән дә, тыуған илгә мөхәббәт тигән нәмәкәй, йәғни патриотик тойғолар уянмаһа, уянмай ҙа ҡуя икән. Ә бәлки, эш унда ғына түгелдер, йәмәғәт? Бер Лужков ҡына түгел бит. Рәсәйҙән кеше сит илдәргә күпләп китә лә баһа. Тәүҙә "мейеләр" китә тип ҡысҡырыштылар. Тимәк, ғалимдар, йәштәр һәм бигүк йәш булмаған фән эшмәкәрҙәре ситкә ағылды. Улар Америка Ҡушма Штаттарында, Израилдә, Көнбайыш Европа дәүләттәрендә нығынды. Үткән йыл һөҙөмтәләре буйынса физиканан Нобель премияһы лауреаттары Константин Новоселов һәм Андрей Гейм быға асыҡ миҫал. Артабан сират эшҡыуарҙарға етте. Улар тәүҙә аҡсаларын ситкә сығарҙы. Һәм әле булһа ла сығарыуҙарын дауам итә. Шунан инде ситтә күсемһеҙ милеккә эйә булып үҙҙәре лә күсеп китте. Бер үк ваҡытта сит илдәргә ябай кешеләр ынтылды. Ҡатын-ҡыҙҙар бигерәк. Италия, Испания, Португалия, Германия арзан эш ҡулдарына мохтажлыҡ кисерә ине. Илебеҙҙәге эш хаҡынан һуң Көнбайыш Европала йорт йыйыштырыусыларға, ашнаҡсыларға, оло йәштәгеләрҙе ҡараусыларға түләнгән евролар күктән яуған бәхет кеүек булды. Әлбиттә, бөтәһе лә унманы. Ҡайтыусылар ҙа байтаҡ булды. Әммә аҙмы-күпме инглиз, итальян, испан телдәрен үҙләштереп, кейәүгә сығып ерегеп китеүселәр ҙә әҙ түгел. Рәсәйҙән ситтә егерме миллионлап урыҫ телле кеше йәшәй тигән фекер бар. Уларҙың бөтәһен дә тиерлек сит илдәргә яҡшыраҡ шарттарҙа йәшәү теләге ҡыуып сығара. Улар Рәсәйҙә иртәгә ни булырын белмәй, ҡайҙа нимә шартлаясағын, емереләсәген, убыласағын, ишеләсәген, армияға алынған балаларының цинк табутта ҡайтыуҙарын, дауаханаларҙа тейешле мөнәсәбәт көтөп ултырыуҙан, эш хаҡынан эш хаҡына тиклем йәшәүҙән арыған. Күбеһе донъя буйлап үткән быуаттың 90-сы йылдарынан һуң, йәғни, Советтар Союзы тарҡалып, Рәсәй менән идара итеүгә Борис Николаевич Ельцин килгәс, таралыша.

Үткән аҙнала Рәсәйҙең тәүге Президенты Борис Николаевич Ельциндың тыуыуына 80 йыл тулыу айҡанлы саралар булып үтте. Был дата айҡанлы Екатеринбургта уға һәйкәл асылды. Президент сығыш яһаны. Премьер-министр үҙ фекерен белдерҙе. Ваҡытлы матбуғат саралары Ельцин осорона арналған материалдар баҫтырҙы. Ғөмүмән, уны онотмағандары күренеп тора ине. Берәүҙәр уны яңы Рәсәйгә нигеҙ һалыусы, яңы Рәсәй Конституцияһын булдырыусы һәм раҫлаусы, илгә һәм йәмғиәткә азатлыҡ килтереүсе тип баһалаһа, икенселәре иһә Кавказ һуғышын ойоштороусы, милли республикаларҙың үҙ аллылыҡҡа ынтылышын ҡеүәтләүсе, илдең иҡтисадын емереп юҡҡа сығарыусы, тәбиғи байлыҡтарҙы хосусилаштырыуға юл ҡуйыусы, халыҡты бөлгөнлөккә төшөрөүсе, йәмғиәттең ҡатламдарға бүленеүенә булышлыҡ итеүсе тип баһалай.

Кем хаҡлы? Ельцин Башҡортостанда һәм Татарстанда булғанда "Суверенитетты күпме йота алаһығыҙ, шул хәтлем алығыҙ!" тип белдермәһә, милли хәрәкәт ниндәй йүнәлештә китер ине икән? Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле, Борис Николаевич асылда төбәктәрҙә барған милли яңырыу процестарына рөхсәт кенә бирҙе, икенсерәк әйткәндә, шлюздарҙы асырға мәжбүр булды түгелме? Югиһә, иҫке "плотина"ны милли уҙаң "тулҡыны" тулыһынса емерер ине. Ул саҡта инде Рәсәйҙән СССР хәленә ҡалыу ихтималлығы бермә-бер артыуын көт тә тор. 1968 йылдан бирле партия эшендә булған Борис Ельцин бер көн, ай, йәки йыл эсендә генә ҡараштарын ҡапма-ҡаршыға үҙгәртеп демократ булып китә алмағанлығы аңлашыла. Ул оҫта, тәжрибәле функционер булараҡ тиҙ генә төшөндө - замана дауылы уның үҙен ситкә алып ташламаҫ борон, ышығыраҡ урынға баҫып, елгә иҫергә "рөхсәт" биреп кенә торорға кәрәк. Конституцияла теркәлгән кеше һәм гражданиндың хоҡуҡтарын һәм азатлыҡтарын рөхсәт итмәҫ ине, үҙгәртеп ҡороу йылдарында һүҙ, демонстрация һәм митингылар, ваҡытлы матбуғат сараларының азатлығына бер ни тиклем өйрәнгән саф һауа һулап башы әйләнгән йәмғиәттең реакцияһынан шөрләне. Борис Ельциндың милли күтәрелеште баҫтырыуы айырыуса ҡурҡыныс тоҫ алды. Чечня республикаһының ул саҡтағы етәкселеге менән уртаҡ тел таба алмағас, ул үҙ иленең территорияһында Рәсәй гражданларына ҡаршы һуғыш асты. Ул сәйәсәттең эҙемтәләре әле һаман булһа ла күренә. "Домодедово"лағы ҡорбандарҙа, Дағстандағы, Ингушетиялағы, Төньяҡ Кавказдағы шартлауҙарҙа. Бөгөн илебеҙҙең "Көнбайыштың сеймал ҡушымтыһы" тип аталыуы ла Ельцин осоронда иҡтисадты үҫтереү урынына тарҡатыу, хосусилаштырыу сәйәсәте алып барылыуы менән бәйле. Бәҡтиһән, ситтән индерелгән тауарҙар менән генә сәнәғәтте үҫтереп булмай икән дә баһа.

Иң аяныслы - йәмғиәттең бөгөнгө торошо. Дәрәсҫөн генә әйткәндә, йәмғиәт, йәғни бер маҡсатта булған, бер йүнәлештә хәрәкәт иткән совет йәмғиәте тарҡалды. Яңыһы, халыҡты берләштерә, туплай алырлығы булдырылманы. Ил идеяһыҙ, маҡсатһыҙ ҡайҙалыр тәгәрәй. Беренсе урынға һәр бер кешегә етеш тормош булдырыу фекере ҡалҡып сыҡты. Әммә уның параметрҙарын һәр кем үҙенсә билдәләй. Йәмғиәттең күпселеге бөлгөнлөктә ғүмер итә. Илдәге байлыҡты халыҡтың бер нисә проценты ғына туплаған һәм уны кеше мәнфәғәттәренә файҙаланмай, сит илгә сығара. Был эш асыҡтан-асыҡ эшләнә. Конституцияла нығытылған хоҡуҡтар һам азатлыҡтар тормошҡа ашырылмай. Кешенең һайлауға хоҡуғы күпкә ҡыҫҡартылды. Иртәгә ни булыры билдәһеҙ. Халыҡ Рәсәйҙә йәшәп арыны.

1999 йылдың 31 декабрендә Борис Ельцин, ул саҡта әле Рәсәй Президенты, Яңы йылды ҡаршылаған төндә телевизион мөрәжәғәтендә халыҡ менән хушлашып: "Мин арыным. Мин китәм," - тине. Асылда шул төндә Борис Николевич уға ышанып тауыш биргән һайлаусыларҙың өмөттәрен өҙҙө. Яңы Рәсәйҙә яңы тормошҡа өмөтләнгән кешеләр ҙә, бөгөн беҙ арыныҡ, беҙ китәбеҙ, тип әйтер ине. Тик уларҙың Юрий Лужков, Роман Абрамович, Олег Дерипаска һымаҡ туплаған миллиардтары юҡ. Һәм, нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, уларҙың күбеһе һаман, бер нәмәгә ҡарамаҫтан, ошо илдең патриоттары булып ҡала.

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Март айында республикала бүре һәм төлкө тиреләре йыйыу башланасаҡ. Бер бүре тиреһе өсөн һунарсыларға 5-әр мең һум, төлкө тиреһе өсөн 500 һум түләйәсәктәр.

✓Ҡаһирәлә барған тәртипһеҙлектәр һөҙөмтәһендә Мысырҙың "Аль-Азхар" университетында белем алыусы Башҡортостан студенттары республикаға ҡайтты. Ту-154 М самолеты бортында 132 кеше, шул иҫәптән мәктәпкәсә йәштәге 20 бала Өфөгә 3 февралдә килеп төштө. Уларҙың 37-һе Башҡортостан кешеһе. Уларҙан тыш, самолетта Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә йәшәүселәр, журналистар ҙа бар ине.

✓Республикала бөгөн укыусыларҙың Бөтә Рәсәй олимпиадаһы төбәк этабы тамамлана. Был юлы уларҙа 2800 укыусы ҡатнашты. Былтыр 2328 бала ҡатнашҡайны. Олимпиадалар 21 предмет буйынса үткәрелде. Яҙ көнө иң лайыҡлылар олимпиаданың йомғаҡлау турында көс һынашасаҡ.

✓Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә һәҙиә Дәүләтшина исемендәге Дәүләт премияһын тапшырыу буйынса комиссия белдереүенсә, быйыл конкурста Кәтибә Кинйәбулатова, Салауат Сәлмәнов, Николай Андреев, Николай Грахов ҡатнашасаҡ. Премияға тәҡдим ителгән эштәр буйынса тәҡдимдәр, фекерҙәр 25 февралгә тиклем Өфө ҡалаһы, Туҡай урамы, 46, 215-се бүлмәлә ҡабул ителә. Тел.: 250-09-68.

✓Өфө ҡала эске эштәр идаралығы етәксеһе Илгиз Садыҡов белдереүенсә, былтыр ҡала территорияһында 22 мең енәйәт теркәлгән, был 2009 йыл менән сағыштырғанда 1,5 меңгә әҙерәк. Енәйәттәрҙең иң күбеһе - урлашыуҙар ҡаланың сауҙа нөктәләрендә эшләнә. Әфатирға төшөүҙәр, машина урлауҙар кеүек енәйәттәр һаны кәмегән. 2010 йылда ҡала урамдарында 2 мендән ашыу юл-транспорт ваҡиғалары теркәлгән, унда 77 кеше һәләк булған, 2,5 мене йәрәхәт алған. Үҫмерҙәр тарафынан яһалған енәйәттәр һаны 330-ға еткән.

✓"Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан идаралығы "Январь" сауҙа йәмғиәте тәҡдим иткән һауыт-һабаның сифатһыҙ партияһын асыҡлаған. Әлеге көндә предприятие был һауыт-һабаны һатыуҙан алған һәм уны һатып алып өлгөрөүселәрҙән дәғүәләр ҡабул итә.

*✓ Беҙ уңыштарыбыҙ, халыҡтар дуҫлығы тураһында әллә күпме һөйләй алабыҙ, әммә был ваҡытта кемдер компьютер артында халыҡтар араһында дошманлыҡ тыуҙырыусы мәҡәлә яҙып ултыра икән, эшебеҙ юҡҡа сыға.*



ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!

# ТАТЫУЛЫҠТЫҢ...
## ҡәҙерен беләйек

**Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов милли-мәҙәни берекмәләр етәкселәре һәм Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге ғалимдары менән осрашыуҙа 2011 йыл республикала Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы тип иғлан ителәсәге тураһында белдерҙе.**

-Бөгөн милләт-ара, шулай уҡ конфессия-ара мөнәсәбәттәр проблемалары төрлө сәбәптәр арҡаһында беренсе урынға сыға, - тине Президент осрашыуҙа. - Быйыл милләттәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙә татыулыҡ булдырыу юҫығында эш алып барырға тейешбеҙ. Бер ҡасан да, төрлө шарттарҙа ла милли ҡаршылыҡтар проблемаһы килеп тыумаһын өсөн беҙ ҡулыбыҙҙан килгәндең барыһын да эшләргә бурыслыбыҙ.

Президент фекеренсә, донъям алғанда, төбәктә, хатта тотош Рәсәйҙә милләт-ара мөнәсәбәттәр бигерәк сәйәсиләштерелгән. Ул йышыраҡ иҡтисад, халыҡтарҙың рухи үҫеше кеүек башҡа мөһим өлөштәрҙән сығып билдәләнә. Милләт-ара проблемалар үҙенән-үҙе килеп сыҡмай, улар һәр ваҡыт заманыбыҙҙың башҡа мөһим күренештәре артынан эйәрә. Тимәк, милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе нығытыу төбәктә иҡтисади яҡтан нығытыу, мәҙәниәтте үҫтереү, социаль хәлде яҡшыртыу менән тығыҙ бәйләнгән.

Был осрашыуҙа республика етәксеһе милләт-ара дошманлыҡ тыуҙырыусыларға ҡарата ҡаты саралар күреләсәге тураһында ла белдерҙе.

- Башҡортостан халыҡтарҙың толерантлы мөнәсәбәттәре буйынса тотош илгә үрнәк өлгө булып тора. Беҙҙең халыҡтар быуаттар буйына татыулыҡта йәшәй. Әммә беҙҙең дуҫлыҡты боҙорға тырышыусылар ҙа бар. Тап улар беҙҙең арала яуызлыҡ сәсә. Беҙ уңыштарыбыҙ, халыҡтар дуҫлығы тураһында әллә күпме һөйләй алабыҙ, әммә был ваҡытта кемдер компьютер артында халыҡтар араһында дошманлыҡ тыуҙырыусы мәҡәлә яҙып ултыра икән, эшебеҙ юҡҡа сыға. Ошо көндәрҙә интернетта башҡорт һәм урыҫ халҡын бер-береһенә ҡаршы ҡуйыусы тағы бер мәҡәлә килеп сыҡты. Был автор ҙа бының өсөн яуап бирергә тейеш, - тине Р. Хәмитов.

Президент фекеренсә, халыҡтар араһында низағ тыуҙырыусылар төрлө маҡсатты эҙәрләкләй. Кемдәрҙер, бигерәк тә йәштәр, төрлө радикаль ойошмаларҙың насар йоғонтоһона бирелә. Кемдер быны сәйәси маҡсаттарын күҙ уңында тотоп башҡара.

Ошо арала БР Халыҡтар дуҫлығы йорто яңы бинал ла буласаҡ, тип тә билдәләнде осрашыуҙа. Президент әйтеүенсә, яңы бинала концерттар, конференциялар, лекториjар, күргәҙмәләр үткәреү мөмкинлеге булырға тейеш. Халыҡтар дуҫлығы йорто өсөн төрлө варианттар, шул иҫәптән, бөгөнгө көндә күп өлөшө буш торған Конгресс-холл да ҡараласаҡ. Осрашыуҙа шулай уҡ республикала милләт-ара мөнәсәбәттәр мәсьәләләре буйынса йәмәғәт ойошмаһы булдырыу тураһында ла һүҙ барҙы. Был совет иғлан ителгән йыл сиктәрендә саралар үткәреү менән мәшғүл буласаҡ. Шулай уҡ төрлө этностар вәкилдәре араһынан йәштәр өсөн лидерҙар эҙләү кәрәклеге лә билдәләнде.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Өфөлә "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы - 2011" конкурсы башланды. Абруйлы ғалимдарҙан торған баһалау комиссияһы билдәләүенсә, был педагогик оҫталыҡ конкурсы йыл һайын яңы исемдәр асыусы сара ғына түгел, ә ысын мәғәнәһендә тәжрибә уртаҡлашыу майҙанына ла әүерелә.**

# УҠЫТЫУСЫЛАР СЫҒА...
## тәжрибә уртаҡлашыу майҙанына

Ысынлап та, бөгөн белем биреү системаһы йәмәғәт тормошоноң иң йылдам үҫешкән өлкәһе һанала һәм унда төрлө яңылыҡтар, үҙгәрештәр йыш булып тора. Шуға ла йыл һайын иң һәләтле уҡытыусыларҙы бер ҡорға йыйып, бар мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшергә мөмкинлек биргән был бәйгенең әһәмиәте ҙур, ти конкурста ҡатнашыусылар үҙҙәре лә.

Быйылғы конкурста 55 педагог ҡатнаша. Уларҙың араһында үҙ эшен ихлас күңелдән яратҡан йәш уҡытыусылар ҙа байтаҡ ҡына. Мәҫәлән, педагогик стажы ете йыл ғына булыуға ҡарамаҫтан, Республика башҡорт лицей-интернатының математика уҡытыусыһы Динар Ғиниәтуллин уҡыусылары араһында оло абруй һәм ихтирам ҡаҙанырға өлгөргән. Өфө дәүләт нефть-техник университетын тамамлаһа ла, аҙмышын уҡытыу эше менән бәйләүенә һис үкенмәй йәш белгес. "Малайҙар ғына уҡыған был уҡыу йортонда ир-ат уҡытыусылар бигерәк кәрәк, сөнки егет кеше ир тәрбиәһе алырға тейеш", - ти Динар Зөлфәр улы.

Һәләтле, ижади эшләүсе физкультура уҡытыусыларын билдәләү маҡсатында быйыл "Башҡортостан баш ҡалаһының иң яҡшы физкультура уҡытыусыһы - 2011" ҡала конкурсы ла айырым үткәрелә. Конкурсты ойоштороусылар фекеренсә, был белем биреү учреждениеларына физкультура уҡытыусыларының һөнәри үҫешенә иғтибар арттырып, эшләү өсөн шарттар тыуҙырыуға булышлыҡ итәсәк.

Әйткәндәй, быйыл "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы" конкурсы тарихында беренсе тапҡыр Өфө ҡала округы хакимиәте мәғариф идаралығының мәғлүмәти порталы ла иң-индәрҙе билдәләргә ярҙам итәсәк. Теләүселәр порталға ҡуйылған инновацион проекттар менән танышҡандан һуң конкурста ҡатнашыусы уҡытыусылар өсөн (бер IP-адрестан бер тауыш) тауыш бирә ала.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# "ЙӘШЕЛ АҘНА"НАН...
## ҙур уңыштар менән

**Берлинда үткән "Йәшел аҙна" халыҡ-ара сараһында Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте һәм Ауыл хужалығы министрлығы күргәҙмәгә ҡуйылған продукцияның юғары сифаты һәм киң ассортименты өсөн махсус призға лайыҡ булды.**

Халыҡ-ара күргәҙмәнең иҫтәлекле миҙалдары тағы ла БР Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенә, "Башспирт"ҡа, Бәләбәй һөт комбинатына, Башҡорт дәүләт аграр университетының биология, умартасылыҡ һәм һунарсылыҡ кафедраһына тапшырылған.

76-сы тапҡыр уҙғарылған агротауарҙар форумында донъяның 57 иленән экспоненттар ҡатнашҡан. Йола буйынса, "Йәшел аҙна"ла Рәсәй тауарҙары 6 мең квадрат метр майҙандағы павильонды биләгән. Унда Умартасылыҡ һәм апитерапия үҙәге умартасылыҡ продуктгары нигеҙендә етештерелгән аҙыҡ-түлек, дауалау-профилактика һәм косметика продукцияларының 200-ҙән ашыу төрөн тәҡдим иткән. Бәләбәй сырҙары ла күргәҙмәгә килеүселәргә бик оҡшаған.

Умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге "Йәшел аҙна"ла оҙайлы ваҡытҡа иҫәпләнгән дүрт контракт төҙөүгә лә өлгәшкән. "Leon GmbH", "Leis GmbH", "Imkerei Sondermann", "Berjozka Lebensmittelhandel" немец фирмалары менән төҙөгән килешеүгә ярашлы, хәҙер үҙәк был фирмаларҙы үҙ тауарҙары менән тәьмин итәсәк. Шулай уҡ Германияның умартасылыҡ буйынса ғилми-тикшеренеү институты менән дөйөм фәнни тикшеренеүҙәр үткәреү тураһында ла килешелгән.

Рәсәй ауыл хужалығы министрлығы белдереүенсә, күргәҙмәнең тәүге көндәрендә үк дөйөм суммаһы 218,2 млн. евро булған 13 халыҡ-ара килешеүгә һәм контрактҡа ҡул ҡуйылған. Килешеүҙәр башлыса малсылыҡ, үҫемлекселек, мелиорация, ауыл юлдарын төҙөү үҫеше, болан ите һәм бал менән тәьмин итеүгә бәйле. Был күргәҙмәлә Рәсәйҙең 12 төбәге 2,19 млрд. евро күләмендәге 81 инвестицион проект тәҡдим иткән, шуларҙы өсәүһе - беҙҙең республика аграрийҙарыныҡы.

# ҠАРТТАРҒА...
## лайыҡлы пенсия кәрәк

**Рәсәй Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, 2011 йылдың 1 февраленән хеҙмәт пенсиялары 8,8 процентҡа арттырылды. Уның күләмен, ғинуар пенсияһын 1,088-гә ҡабатлап, үҙ аллы иҫәпләргә мөмкин. Индексация һөҙөмтәһендә республикабыҙ буйынса хеҙмәт пенсияһының уртаса күләме 7973 һум, ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһының уртаса күләме 8290 һум тәшкил итә.**

Рәсәй пенсия фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса идарасыһы Фоат Хантимиров әйтеүенсә, республикалағы хеҙмәт пенсияларын алыусыларҙың барыһы ла (ә улар 1 миллионға яҡын кеше) 2 февралдән пенсияны яңы күләмдә аласаҡ.

Социаль пенсиялар, дәүләт пенсиялары, шулай уҡ федераль льготаларға ай һайын бирелгән аҡсалата түләүҙәр күләмен быйыл 1 апрелдән арттырыу планлаштырыла. Социаль пенсияларҙы арттырыуҙан тыш, 1 апрелдән айлыҡ аҡсалата түләүҙәр күләме лә артасаҡ, уны Рәсәйҙә 17 миллион кеше ала. Шул уҡ ваҡытта рәсәйлеләрҙең пенсия менән тәьмин ителешенең минималь күләме йыл буйына һәр төбәктәге пенсионерҙың йәшәү минимумынан түбән булмаясаҡ. Әгәр эшләмәүсе пенсионерға тейешле бөтә түләүҙәрҙән һуң да пенсия күләме йәшәү минимумынан түбән булған хәлдә уға социаль өҫтәмә тәғәйенләнәсәк.

2011 йылда пенсияларҙы - 9,1 процентҡа, 2012 йылда - 10,4 процентҡа, 2013 йылда 8,2 процентҡа ике этапта - 1 апрелдән һәм 1 июлдән индексациялау ҡуҙаллана. Бынан тыш, 2011, 2012, 2013 йылдың 1 апреленән айырым категория граждандарға (инвалидтар, ветерандар һ.б.) бер тапҡыр түләнә торған аҡсалата түләүҙәр 6,5, 6 һәм 5,5 процентҡа индексацияланасаҡ.

# Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә 5 һәм 6 февраль ит йәрминкәләре үткәрелә. Дим районында "Алтын" сауҙа комплексы, Калинин районында "Ауыл хужалығы йәрминкәһе" сауҙа-сервис комплексы, Киров районында элекке "Аврора" кинотеатры, Октябрь районында "Спорт һарайы" алдындағы майҙандарҙа ойошторолған йәрминкәләргә рәхим итегеҙ!

✓Ҡала округы хакимиәтендә 2010 йылға баш ҡаланың социаль-иҡтисади үҫеше буйынса йомғаҡ яһалды. Былтыр сәнәғәт тауарҙары етештереү индексы 110,6 процентҡа еткән. Йыл һөҙөмтәләре буйынса ҡала иҡтисадына йәлеп ителгән инвестициялар 51,6 миллиард һумға баһалана. Финанслауҙың төрлө сығанаҡтары иҫәбенә йыл башынан дөйөм майҙаны 654,4 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлгән һәм сафҡа индерелгән, 1156,9 миллион һумға капиталь ремонт үткәрелгән.

✓2010 йыл йомғаҡтары буйынса былтыр ҡаланың эре һәм урта предприятиеларында һәм ойошмаларында эшләүселәрҙең уртаса хеҙмәт хаҡы 21509,3 һумға еткән. Рәсәйҙең халҡы миллионға еткән 10 ҡалаһы араһында номиналь уртаса айлыҡ эш хаҡы күләме буйынса Өфө Екатеринбург һәм Новосибирскиҙан ҡала өсөнсө урында тора. Өфө миллионлы ҡалалар араһында 2008 йылдан алып халыҡтың тәбиғи үҫеше күҙәтелгән берҙән-бер ҡала. Үткән йылдың 11 айы эсендә 13541 бала тыуған. Халыҡтың тәбиғи үҫеше 1944 кеше тәшкил иткән.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте һәм "Спутник 107 FM" республика радиоһы яңы проект тәҡдим итә. Хәҙер айына ике тапҡыр, шаршамбы көнө 18.10 сәғәттә ҡала власы вәкилдәре 40 минут буйы "Ҡыҙыу линия" тапшырыуында ҡала тормошондағы иң әһәмиәтле проблемалар буйынса фекер алышасаҡ. Һорауҙарҙы 2-51-73-87 телефоны йәки 2320 смс-порталы буйынса бирергә мөмкин.

✓2010 йылда Өфөнөң законһыҙ эшмәкәрлек алып барған уйын клубтары һәм казиноларынан 1228 уйын автоматы, 4 рулетка һәм 22 карт өҫтәле тартып алынған. Закон буйынса Приморье, Алтай крайы, Калининград өлкәһе, Краснодар һәм Ростов өлкәләре сиктәрендә генә ҡомарлы уйындар рөхсәт ителгән. Хоҡуҡ органдары һәм урындағы властарҙың ике йыл дауамында көрәш алып барыуына ҡарамаҫтан, баш ҡалала йәшерен эшләгән уйын клубтары асыҡланыуы дауам итә.

*✓ Булдыҡлылығын эше менән раҫлаған да инде - "ҡарт алашаһын", йәғни йәшникле "Москвич"ын туғарып, йылҡылдап торған "Рено"ға атланып алған башҡорт ҡатыны - Аҙнай ауылы һылыуы.*

*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*


Гөлназ Ишемseason фотоһы.

**Тормош бит шулай ҡоролған - ыңғай ғына бара-бара ла ҡапыл ғына үтеп сыҡҡыһыҙ булып күренгән ҡаршылыҡтар алдына килтерә лә баҫтыра. "Уф!" тип донъя яңғыратып ҡысҡырырҙай, ергә ятып тәгәрәп-тәгәрәп иларҙай хәлгә етәһең хатта. Күптәр юғалып ҡала, юҡҡа сыға был ҡаршылыҡтар алдында. Әммә ихтыяр көсө ныҡлы булғандар бар бөтмөрлөгөн, булдыҡлылығын эшкә егеп, күкрәге менән киләсәгенә юл яра, артабан иһә ныҡлы, ышаныслы аҙымдар менән атлап китә. Ишембайҙың билдәле генә эшҡыуары Зилә Бибакова шундайҙарҙың береһе - ныҡышмалылығы, уңғанлығы, үҙ-үҙенә ышанысы һөҙөмтәһендә өлгәшә ул уңышҡа.**

# УҢЫШ ТЕЛӘҺӘҢ...

## уңыш яулайһың

Тормош уны ла ҙур һынауҙар алдына баҫтыра. Бынан тиҫтә ярым йыл самаһы элек, эшләйем тиһәң эше булмаған, эшләгәндәргә йүнлебашлы эш хаҡы түләнмәгән осорҙа, "кәкүк" ире ташлап сығып китеп, ике балаһы менән яңғыҙ тороп ҡала Зилә.

- Тәүге мәлдә нисек ҡыйын булғанын үҙем генә беләм. Ул саҡта үҙем тураһында, эшҡыуарлыҡ хаҡында уй ҙа юҡ ине - бары осто-осҡа ялғарға, ҡыҙҙарымдың тамағы туҡ, өҫтәре бөтөн булһын өсөн тырышырға икәнде генә белә инем, - ти ул.

"Ағиҙел" совхозы баҙарындағы магазинда һатыусы булып эшләгән Зилә баҙарсыларҙың, бигерәк тә сит-ят бәндәләрҙең нисек аҡса эшләгәнен күреп-белеп йөрөй. Үҙе лә бурысҡа инеп булһа ла аҙ-маҙ он, шәкәр ҡомо ҡайтартып, магазинда шуларҙы һатҡылап ала. Шулай тиндәр йыйыла, улары инде һумдарға әйләнгәс, баҙарҙа үҙенең һатыу нөктәләрен булдыра. Эштәре яйға һалынып, матур ғына табыш та ала башлай. Ләкин шул саҡ, үҙе әйтмешләй, яңылыш аҙым яһап ташлай. Әхирәтенең ҡотҡоһона бирелеп, һатыу нөктәләрен туғандары ҡулына тапшыра ла, Себер тарафтарына сығып китә. Әммә унда вәғәҙә ителгән эш тә, йәшәр мөйөш тә булмай сыға. Үҙен-үҙе әрләй-әрләй Зилә кире Ишембайға ҡайтып төшә. Ләкин әҙергә-хәҙер булып, алыпһатарлыҡтың тәмен татып өлгөргән туғандары һатыу нөктәләрен уға ҡайтарып биреүҙән баш тарта һәм Зилә ысын мәғәнәһендә ярыҡ ялғаш янында тороп ҡала.

Ни эшләргә лә белмәй башы ҡаңғырып йөрөгәндә Байғужа ауылы хакимиәте башлығы Әүхәт Ишҡәли улы ярҙамға килеп, уға Кинйәбулаттағы буш торған икмәкхананы арендаға алып, эш башлап ебәрергә тәҡдим итә. Әлбиттә, ҡушҡуллап риза була быға Зилә.

- Эште башлап ебәреүе еңелдән булманы инде. Тәү сиратта икмәктең сифатына иғтибар итергә тырыштым, сөнки етештергән ризығың үтемле булмаһа, һинең эшеңдән ни файҙа? - тип һөйләй эшҡыуар.

Аҙҙан башлаһа ла, аҡрынлап етештереү күләмен арттырып, үҙ икмәге менән Ишембай баҙарына ла сыға ул. Осһоҙ ғына хаҡҡа иҫке генә йәшникле "Москвич" машинаһы һатып алып, шуға тейәп ташып, һатыу итә башлай ул икмәге менән. Сифатлы ондан оҫта ҡулдар бешергән "Кинйәбулат икмәге" тиҙ арала үҙ һатып алыусыларын таба, халыҡ теләп ала башлай уны. Һорау етештереү күләмен бермә-бер арттырырға, икмәк ризыҡтарының ассортиментын киңәйтергә мөмкинселек бирә. Әлбиттә, иҫке ҡорамалдар һәм тығын бина әллә ни йәйелеп китергә форсат бирмәй. Эшҡыуар күптәнге хыялын тормошҡа ашырыу - заман талаптарына ярашлы үҙ етештереү нөктәһен булдырыу өсөн бар тырышлығын һала һәм күптән түгел уның теләге тормошҡа аша. Ул Перегонный ҡасабаһындағы элекке мебель магазинын һатып алып, уны икмәкханаға әүерелдерә. 15 кешене эшкә йәлеп итеп, яңыса йыһазландырылған бинала ныҡлап үҙ шөғөлөнә тотона.

- Үҙ икмәкханамда тәүге бешкән икмәкте күреү миңә нисек ҡыуаныс килтергәнен белһәгеҙ ине, шатлығымдан илар сиккә еттем хатта. Барыбер булдырҙың бит, тип эстән генә үҙ-үҙем менән ғорурланып та ҡуйҙым, - ти Зилә Хәйбулла ҡыҙы.

Эштәре ыңғай яҡҡа үҙгәрһә лә, үҙе теләгәнсә бармағанына йәне лә көйә эшҡыуарҙың. Үҙ һатып алыусыларын юғалтмаһа ла, икмәк етештереүселәрҙең бермә-бер артып, үҙ изделиелары менән Ишембай магазиндарын тултырыуы ярайһы уҡ аяҡ сала Зиләнең шөғөлөнә. Ысынлап та, күрше ҡала-райондарҙан да, хатта Өфөнән дә икмәк килтереп һаталар шул Ишембайҙа. Бары сифат менән генә алдырып буласағын аңлап, эшҡыуар үҙе етештергән икмәк изделиеларының үтемле булыуы өсөн барыһын да эшләргә тырыша.

Зилә Хәйбулла ҡыҙының иң төп, изге ниәте - ҡыҙҙарын матур итеп үҫтереп, уҡытып сығарып, ныҡлап аяҡҡа баҫтырыу теләге лә тормошҡа ашыу өҫтөндә.

Өлкән ҡыҙы Динә Башҡорт дәүләт университетының юридик факультетын тамамлап, Ишембай муниципаль районы хакимиәтендә юрист булып эш башланы. Кесеһе Гөлшат Санкт-Петербург ҡалаһында политолог һөнәрен үҙләштерә.

- Күркәм нәҫелдән беҙ. Һәр быуыныбыҙ үҙ заманында бына тигән итеп, етеш тормошта йәшәгән һәм уға үҙҙәренең тырышлығы, булдыҡлылығы менән өлгәшкән. Ниңә беҙ юғалып ҡалырға тейеш әле? Заманалар шулай, яҙмыш ауыр тип һылтанып ятыу беҙгә килешмәй. Булдырам, тип тотонһаң, барыһын да эшләргә була, - ти Зилә.

Булдыҡлылығын эше менән раҫлаған да инде - "ҡарт алашаһын", йәғни йәшникле "Москвич"ын туғарып, йылҡылдап торған "Рено"ға атланып алған башҡорт ҡатыны - Аҙнай ауылы һылыуы. Уға артабан да уңыштар ғына йылмаясағына иманым камил.

**Мөҙәрис БАГАЕВ.**
**Ишембай ҡалаһы.**

*ҺОРАУ-ЯУАП*

## АЙЫРЫЛЫШЫУҘАР

**Ҡатыным менән айырылышырға теләйем. Бер нисә йыл инде бергә тормайбыҙ, ул балалар менән ҡайҙа йәшәйҙер - белмәйем. Алимент түләйем, ул ҡатыным банктың урындағы бүлексәһендә асҡан иҫәбенә китә. Айырылышыу тураһында кемгә мөрәжәғәт итергә?**

- РФ Гражданлыҡ-процессуаль кодексҡа ярашлы, йәшәгән урыны билдәһеҙ булған яуап биреүсегә юллау менән әлеге Кодекстың 29-сы статьяһы буйынса Рәсәй Федерацияһында һуңғы осорҙа йәшәгән урыны буйынса йәки уның милке урынлашҡан биләмә буйынса судҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк. Шуға күрә ҡатынығыҙҙың һеҙгә мәғлүм булған һуңғы йәшәү адресы йәки уның күсемһеҙ милке булған урын буйынса мировой судҡа ғариза бирегеҙ.

## РИЗАЛЫҠ КӘРӘК

**Бәлиғ булмаған ҡыҙым менән сит илгә ялға китергә йыйынам. Ата-әсәһе ҡыҙымдың әхирәтен дә үҙебеҙ менән алыуҙы үтенә. Рәсәйҙән сит илгә кеше балаһын алып сығыу тәртибен аңлатһағыҙ ине, ниндәй документтар кәрәк?**

- Баланы үҙегеҙ менән алып китеүгә уның ата-әсәһенең нотариуста раҫлатылған ризалығы, шулай уҡ бала исеменә сит ил паспорты кәрәк.

## СУД ҠАРАРЫ ҮТӘЛМӘҺӘ...

**Расписка ҡағыҙы буйынса миңә бурыслы кешенән аҡсаны ҡайтартыу тураһында суд ҡарары булһа ла, байтаҡ ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, бер ни ҙә үҙгәрмәне. Суд ҡарары закон көсөнә ингәндән һуң күпме ваҡыт үткәс бурыслыға уның үтәлмәүе өсөн яуаплылыҡ йөкмәтелә?**

- Һеҙгә суд приставтары хеҙмәтенә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Суд приставы - башҡарыусы бурыслыға үҙ теләге менән суд ҡарарын үтәргә тәҡдим итә. Әгәр бурыслы кеше уны һанға һуҡмаһа, пристав мәжбүри сараларға тотона (мөлкәтте, иҫәбендәге аҡсаны ҡулға алыу һәм исемлеген төҙөү һ.б.). Суд ҡарарын үтәү өсөн суд приставы ваҡыт бирә һәм уны үтәмәгән хәлдә сара ҡулланыласағы хаҡында иҫкәртә. Әгәр бурысы ҙур күләмдә һәм бурыслы уны түләүҙән ҡасып йөрөһә, ул енәйәт яуаплылығына ла тарттырылыуы ихтимал.

## БӨТӘГЕҘ ҘӘ ЯЛЛАУСЫ

**Яңыраҡ өләсәйебеҙ үлеп китте. Беҙ, яҡын туғандар - 6 кеше йәшәгән фатирҙа ул яуаплы фатир ялляусы ине. Хәҙер уның урынына фатир өсөн кем яуаплы буласағын бергәләп хәл итә алмайбыҙ. Ни эшләргә?**

- РФ Граждандар кодексының 686-сы статьяһына ярашлы, ялляусының үлем осрағында йәки ул был торлаҡтан сығып киткән хәлдә килешеү шул уҡ шарттарҙа ғәмәлдә булыуын дауам итә, ә ялляусы булып элекке ялляусы менән даими йәшәгән граждандарҙың береһе фатирҙа йәшәүселәрҙең дөйөм килешеүе менән тәғәйенләнә. Әгәр килешеү килеп сыҡмай икән, ошо торлаҡ майҙанында йәшәүсе бөтә граждандар ҙа ялляусы булып тора ала.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



## Ашҡаҙанға дауа

Киҫкен һәм хроник гастрит булғанда ашҡаҙанда ауырлыҡ тойһағыҙ, газдар күбәйһә, баш ауырыһа, түбәндәге ҡатнашманы эшләп эсегеҙ.

Бер тигеҙ күләмдә мәтрүшкә сәскәһе һәм үләне, һары мәтрүшкә, кесерткән япрағы, бөтнөк япрағы, меңъяпраҡ, зопник, зюзник, дербенник, синеголовик, цикорий үләне, бәйғәмбәр тырнағы (календула), аҡ сәскә, етен, артыш һәм әнис (укроп) орлоҡтары алып, банкаға һалып болғатығыҙ һәм яҡтылыҡ төшмәгән урында ябыҡ килеш һаҡлағыҙ. Көн һайын иртән 1 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, өҫтөн ябып, 1 сәғәт торорға һәм һөҙгәндән һуң стакандың өстән бер өлөшө күләмендә көнөнә өс тапҡыр эсергә. Быны ашарҙан алда 10-15 минут алдараҡ эшләү яҡшы. Ҡалған төнәтмәне һыуытҡыста һаҡларға, эсер алдынан ҡайнар һыу өҫтәп, йылымыс итеп эсергә. Дауаланыу курсы: иң әҙе - 2-3 ай, иң күбе - ярты йыл. Йылына 1-әр ай ял итеп, 3 тапҡыр курс үткәрергә. Был төнәтмә ашҡаҙан эшмәкәрлеген яйлай, ашҡаҙан әселеген нормаға килтерә, унда булған яраларҙы бөтәйтә, яман шеш барлыҡҡа килтермәй. Ашҡаҙан һәм аш эшкәртеү юлдарында яман шеш булғанда ла ҡулланырға ярай.

## Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн

Ҡатын-ҡыҙҙарҙа климакс ваҡытында хәүефһеҙ шештәр - фибромиома, субсероз, интрамураль миома, инәлек ҡан тамырҙарының варикоз киңәйеүе һәм күрем ваҡытында ҡан кәрәгенән артыҡ күп килгәндә: ҡырҡҡолас (кровохлебка) тамыры, кесерткән япрағы, еҙ төймәлек (пижма) сәскәһе, меңъяпраҡ, арыҫлан ҡойроғо (пустырник), көтөүсе муҡсаһы (пастушья сумка), ярутка үләне, смолевка, смолка, һыу боросон (водяной перец) ҡушып болғатҡас, 1 ҡалаҡ ҡатнашмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп төнәтергә һәм көнөнә өс тапҡыр ашар алдынан стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә. Дауаны күрем килер алдынан 5 көн алда эсә башларға һәм ул килгәс тағы биш көн дауам итергә. Шулай ай һайын дауаланырға һәм хәл яҡшырғансы дауам итергә. Табип менән кәңәшләшкәндән һуң, 2 ай ял итеп алып, тағы ҡабатларға мөмкин. Был составлы үләндәр сәйе дарыуханала ла һатыла.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

***✓ Әлеге көндә уның тоҡомо Төркиәлә йәшәй. Барыһы ла белемле, етеш йәшәйҙәр. Улар Башҡортостандағы туғандарын табып, атайҙарының - Әхмәт Мөхәмәт улының тыуған тупрағын күреү теләге менән йәшәй.***



ЭҘЛӘЙБЕҘ!

# ӘХМӘТТЕҢ ТОҠОМДАРЫ...

## ҡайҙарҙалыр барҙыр

**Төркиәлә бик йыш булмаһа ла башҡорт тамырлы кешеләр осрай. Былтыр Анкарала ТӨРКСОЙ ойошмаһы тарафынан үткәрелгән Наурыз байрамы ваҡытында Өҙәр Ураллы исемле кеше менән таныштым. Ул миңә атаһының сығышы менән Башҡортостандан булыуы, шуға ла башҡорт мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһыныуы тураһында һөйләне.**

Өҙәр бейҙең атаһы Әхмәт, Төркиәләге танытмаһы буйынса, Башҡортостандың Өфө ҡалаһында 1896 йылда тыуған. Атаһының исеме Мәхмәт, әсәһенеке - Мәмдүхә. Башҡорттарҙа Мәхмәт исеме һирәк осрай, шуға ул Мөхәмәт булғандыр, тип фараз итәйек. Әхмәт үткән быуатта егерменсе йылдарҙағы боланан һуң төрлө юлдар үтеп 1921 йылда Иранға килгән. Бында ул Риза Шаһ Пехлеви һарайында һаҡсылар командиры була. 1925 йылда Төркиәгә күсенә. Белемле булыуы сәбәпле ул Анталияның төньяҡ-көнсығыш мөйөшөндәге Әрмәнстан сигендәге Ығдыр ҡалаһына яҡын Маркара таможняһында эшләй. 1936 йылда таможня ябылғандан һуң үҙ эше менән шөғөлләнә. Измир ҡалаһында уның менән бергә килгән, офицер булып хеҙмәт иткән тағы бер туғаны булыуы ихтимал. Ығдырҙа йәшәгән осоронда ул күп тапҡыр Әхмәтте күрергә килә.

Ығдыр ҡалаһында 1935 йылда Әхмәт Калемзар исемле ҡыҙға өйләнә. Уларҙың 1938 йылда Тургут исемле улдары тыуа. 1940 йылда ҡатыны үлеп киткәс, Әхмәт бей Зәһрә исемле ҡыҙға өйләнә. Уларҙың Өҙәр, Эрол, Эртуғрул исемле 3 улы һәм Арзу, Ниһаль исемле ҡыҙҙары тыуа. 1960 йылда Әхмәт донъя ҡуя. Әлеге көндә уның тоҡомо (балалары, ейән-ейәнсәрҙәре) Төркиәлә йәшәй. Барыһы ла белемле, етеш йәшәйҙәр. Өҙәр ағай әйтеүенсә, улар Башҡортостандағы туғандарын табып, атайҙарының - Әхмәт Мөхәмәт улының тыуған тупрағын күреү теләге менән йәшәй.

Бәлки, гәзит уҡыусылар араһында был мәсьәләне асыҡларлыҡ мәғлүмәт ебәреүселәр табылыр. Уны түбәндәге электрон почта адресына ебәреүегеҙҙе үтенәм: ahatsaliv@mail.ru. Гәзиткә мөрәжәғәт итергә лә була.

**Әхәт СӘЛИХОВ.**



Әхмәт Ураллы.

УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...

**Һәр халыҡтың быуаттар буйына һаҡлана, туплана килгән тәрбиә ҡанундары бар. Башҡорт халҡының иһә тәрбиә ҡанундары ауыҙ-тел ижадында, бигерәк тә мәҡәл-әйтемдәрендә һәм "Урал батыр" эпосында һаҡлана. Эпоста атай-әсәйҙәр аңы менән генә зиһенгә һеңдерерлек, атай-әсәйҙәргә генә һөйләрлек фәһемле һабаҡтар бихисап. Шуларҙың бер нисәһенә генә туҡталып китәйек.**

# ОЛОНО ОЛО ИТЕГЕҘ, -

## Кәңәш алып йөрөгөҙ



Баян Хәйруллин һүрәте.

"Урал батыр" эпосы меңәр йыл элек ижад ителгән, XXI быуат балаларын ундағы һабаҡтар менән тәрбиәләп булырмы?" тигән аптыраулы һорау тыуыуы ихтимал. Дөрөҫ, заман шауҡымының тәрбиәгә йоғонтоһо бик ҙур: кешене атай-әсәй генә түгел, мөхит тә тәрбиәләй. "Урал батыр" эпосы ижад ителгән осор менән беҙҙең заман араһында тиҫтәләгән быуат ята. Әммә шуныһы ғәжәп: кешенең күңел донъяһы әллә ни үҙгәреш кисермәй. Яратыу-яратмау, киң күңеллелек-көнсөллөк, яҡшылыҡ-яуызлыҡ, ихласлыҡ-ике йөҙлөлөк, асыҡлыҡ-аҫтыртынлыҡ һәм башҡа бик күп тойғо-хистәрҙән торған эске донъя, күңел донъяһы шул уҡ. Иғтибар менән ентекләп өйрәнһәң, эпостың һәр һүҙе, кинәйә менән әйтелгән һәр фекере тәрән мәғәнәгә эйә һәм бөгөнгө көнгә тап килә, уны аҙ ғына үҙгәртеү йәки яңылыш һөйләү, хатта интонацияларҙағы яңылышлыҡ та был халыҡ әҫәренә, уның баһалап бөткөһөҙ ҡиммәтле фекеренә хилафлыҡ килтерә. Халыҡ быны алдан күрә алған һәм, хилафлыҡҡа юл ҡуймау маҡсатында, әҫәрҙе шиғри юлдар менән ижад иткән. Был бөйөк әҫәрҙе һәр берегеҙ уҡып сыҡһағыҙ, уның тиндәшһеҙ ҡиммәтле хазина булыуына үҙегеҙ ҙә инанып инегеҙ, хөрмәтле атай-әсәйҙәр. Бына, мәҫәлән...

Баланы тыйыу. Эпос ике төрлө холоҡло балаларҙың - Шүлгән менән Уралдың бәхәсе менән башлана. Атай менән әсәй - Йәнбирҙе менән Йәнбикә" ҡанды һыуһын" яһаһа ла улдарын ҡан эсеүҙән тыя. Урал атаһын тыңлай, ҡабырсаҡтағы ҡанға теймәй. Шүлгән ҡанды тәмләп ҡарай. Ни өсөн Урал атаһын тыңлай, ә Шүлгән тыңламай, үҙенсә эшләй? Күреүебеҙсә, Йәнбирҙе ҡарт уландарын ҡан эсеүҙән тыя, ләкин ни өсөн уларға ҡан эсергә ярамағанлығын аңлатмай. Шүлгән ун ике йәштә. Ул быға тиклем атаһын тыңлап, тыйылып килгән, хәҙер инде үҙенсә эшләй башлар, үҙенсә һығымта яһап, хәл итер йәшкә еткән. Уға артабан аңлатып та, уны ҡурҡытып тыйып та булмаясаҡ. Тимәк, баланы ун ике йәше тулғанға тиклем донъяуи серҙәрҙе төшөндөрөп, аңлатып, бер ниндәй шик-шөбһә, икеле-микеле фекер, сер ҡалдырмай, зиһененә аҡыл һалып өйрәтергә кәрәк. Йәнбирҙе ҡарт ошо юҫыҡта тәрбиәүи хата ебәрә. Шуның өсөн дә Шүлгән яманлыҡ, еңел тормош, үс алыу, яуыз йән эйәләре менән дуҫлашыу юлынан китә. Уралға ун йәш, ул иһә өлкәндәрҙе тыңлау йәшенән үтмәгән. Әммә донъяны аңлап-белергә ынтылып тора. Үҙенсә һығымта яһау йәшенә барып етмәгән, әммә белергә теләү йәшенән үтмәгән. Тимәк, баланың донъяға үҙ ҡарашы ҡалыплашҡанға тиклем үк, ун йәшкә саҡлы, бала аңы кимәлендә үҙаллы һығымталарға урын ҡалдырмай, фәҡәт дөрөҫлөктө аңлатып тыйырға кәрәк баланы. Балаға фәҡәт ҡат-ҡат әйтеп тыйыу ғына етмәй - ни өсөн икәнлеген аңлатыу мөһим.

Атай рухында тәрбиәләү. Шүлгән менән Уралды тәрбиәләүҙә әсәй йоғонтоһо тойолмай. Йәнбикә фәҡәт ире менән бергә ризыҡ табыу хәстәрлеге күрә. Балалар тулыһынса үҙаллы. Үҙаллылыҡтың төрлө һөҙөмтәләргә килтереүе көн кеүек асыҡ. Артабанғы ваҡиғаларҙа иһә Уралдың улдарын - Иҙелде, Яйыҡты, Нөгөштө әсәйҙәре Һомай, Гөлөстан, Ҡатил батшаның ҡыҙы үҙҙәре тәрбиәләй. Улар атаһы юлына - Яҡшылыҡ юлына баҫалар. Сөнки әсәйҙәр уларҙы Атай рухында - Урал батыр өлгөһөндә тәрбиәләй. Атай күренмәһә лә, уның рухы, өлгөһө һәр саҡ әсә телендә була:

*Ҡатил батша ҡыҙынан*
*Һинән тыуған улыңмын…*
*Тип килеп етә Яйыҡ һәм:*
*Билем биштән быуҙым мин,*
*Һинең юлды ҡыуҙым мин,* - ти атаһына.

Икенсеһенә әсәһе Гөлөстан былай тигән:

*Атаң - Урал батырым,*
*Унан тыуған Нөгөшөм,*
*Батыр булып тыуғанһың,*
*Атаңа ҡулдаш булғанһың,*
*Мен толпарға һин, балам,*
*Атаңа юлдаш бул, балам.*

Иҙелгә Һомай былай ти:

*Батырҙан батыр тыуғанһың,*
*Атаңдай батыр булғанһың,*
*Атаң яңғыҙ тилмерә,*
*Ауыр көндәр кисерә,*
*Атаң яңғыҙ булмаһын,*
*Дошман яуы еңмәһен,*
*Бар, атаңа, юлдаш бул.*

Хатта Шүлгәндең ҡатыны Айһылыу ҙа улының үҙ атаһы Шүлгән өлгө алырлыҡ зат булмағанлыҡтан, шул нәҫелдән Урал батырҙы өлгө итеп ҡуйып, уның рухында тәрбиәләй.

*Кейәүгә тигән бүләгем -*
*Һары толпар бирәйем,*
*Балам, атҡа мен, тине,*
*Иҙел менән кит, тине,*
*Урал атаң юлынан.*

Бына ни өсөн башҡорт шәжәрә төҙөп, ундағы затлы нәҫелдәрен айырым атап, балаларына өлгө итеп ҡуйған. Ҡайһылай ғына булмаһын, бала атай рухында тәрбиәләнһә, ыңғай һөҙөмтә була. Үҙ атаһы, Шүлгән кеүек өлгө алырлыҡ булмаһа, шәжәрәнән атай нәҫеленән затлы кешене табып, шуны өлгө итеп ҡуйырға кәрәк. Айһылыуҙың улы Һаҡмарҙың Урал батырға әйткән һүҙҙәре ошоға ишара.

Йәшәү рәүеше. Шүлгән менән Урал үҙ көндәрен үҙҙәре кургән, әммә уйын менән көн үткәрмәгән. Артабанғы тормошҡа әҙерләнгәндәр. Атай менән әсәй ҡан эсеүҙән тыйған. Йәшегеҙ етмәгән, тешекмәгәнһегеҙ, быуынығыҙ нығынмаған, тип кенә аңлаталар. Әммә был һүҙҙәрҙән ошондай һабаҡ алып була: тимәк, ҡайһы бер аҙыҡ менән туҡланыу өсөн билдәле бер йәшкә етергә кәрәк. Бында рухи һәм физик сәләмәтлек күҙҙә тотолған булһа кәрәк. Ошо йәһәттән эпостағы тағы бер фекергә иғтибар итәйек:

*Йәнлек иркәк булдыниһә,*
*Ирле-бисәле икәүһе*
*Башын сәйнәп ашаған.*
*Йәнлек орғасы булһа,*
*Ирле-бисәле икәүһе*
*Йөрәгене һайлаған.*

Орғасы йән эйәһенең йөрәген генә ашағандар, ә иркәк, йәғни ата йән эйәһенең башын сәйнәп ташлағандар. Батырлыҡ, ҡурҡмау күҙәнәктәре - баш мейеһендә, ә нескә күңеллелек, күркәм хис инә йөрәге аша киләләр. Бәлки, ысынлап та, иркәк малдың йөрәген ашарға ярамайҙыр, ә, бәлки, был йыртҡыс йән эйәһенә генә ҡағылалыр. Ошо йәһәттән тик-

шереңеү эшенә тотонорлоҡ кеше табылһа, бәлки, быҒаса кешелек донъяһы ғилемендә билдәле булмаған асыш яһалыр ине берәй башҡорт ғалимы тарафынан.

Йәшәү маҡсатына төп иғтибар бүленә эпоста. Йәшәү маҡсаты билдәләү - тәрбиә йүнәлеше билдәләү ул.

*Намыҫ тапар ир булһа,*
*Өмөтө булмаҫ көнөнән.*
Йәки:
*Батырҙан тыуған ир-егет*
*Аптырауҙа ҡалырмы?*

Ниндәй генә хәл-ваҡиға килеп сыҡһа ла ир-егет аптыранып ҡалырға тейеш түгел, хәл итеү сараһын күрергә тейеш. Әммә намыҫ тапау, намыҫ юғалтыу артабан мәғәнәле йәшәүендә - яҡты көндәрендә юҡҡа сығарыу тигән һүҙ.

*Илде талап йөрөмәҫкә,*
*Кеше ҡанын ҡоймаҫҡа,*
*Ил ыныһын йәшереп,*
*Ерҙә күмеп ҡуймаҫҡа.*

Был ҡанунды тотмағандар илдән ҡыуыла. Ундай кеше:

*Үҙе йәшәй тарлыҡта,*
*Ғүмере үтә зарлыҡта.*

Тимәк, ил байлығын талап, халыҡтан йәшереп ҡуйыу - ауыр язаға дусар итерлек енәйәт. Ә башҡорт өсөн иң ауыр яза - илдән ҡыуылыу һанала.

Кеше ни тиклем генә көслө, ғәйрәтле булмаһын, бер саҡ бары даны ғына ҡала. Ә быуын-быуын йәшәү дауам итһен өсөн, батырҙан батыр тыуып ҡалырға тейеш.

*Һинең даның ҡалһа ла,*
*Ҡулда ғәйрәт бөтөр ул.*
*Ир бөтһә лә ил бөтмәҫ,*
*Ил батыры -батырҙан,*
*Батыр ирҙән тыуыр ул.*
*Атанан күреп уҡ юныл,*
*Өлкәндән күреп, яу ҡыуып,*
*Ил эсендә үҫер ул.*

Тимәк, бала ил эсендә үҫергә, атайҙан ғына түгел, өлкәндәрҙән дә фәһем алырға тейеш. Ә батыр үҙенең эшен дауам итерлек батыр ҡалдырыу хәстәре күрергә тейеш.

*Һиңә тиңдәш ҡыҙ,*
*Батырға әсә булыр ҡыҙ.*

Быуын ҡалдырыу. Халыҡ кем менән ғаилә ҡороуға айырым иғтибар бүлгән. Үҙеңдән һуң яҡшы нәҫел - батыр ҡалдырам тиһәң, үҙеңә тиңдәш ҡатын алырға тейешһең.

*Урал Шүлгәнгә былай ти:*
*Яҡшынан эскәне - һыу булыр,*
*Ямандан эскәне - ыу булыр.*

"Ыу" тигәне иҫерткес эсемлек, ағыу. Шул саҡта уҡ иҫерткес эсемлек эсеүҙең яманлыҡ икәнлеген аңлаған халыҡ һәм киләсәк быуынға васыят итеп ҡалдырған.

Урал батырҙың ерҙәге тормошо һәр ваҡыт Һомайға билдәле булып тора. Тимәк, эпосты ижад иткән халыҡҡа Йыһан менән Ер тормошоноң бер бөтөн икәнлеге күптән билдәле булған. Ерҙәге үҙгәрештәр Ҡояш, Йыһан үҙгәрештәре менән тығыҙ бәйле. Кеше үҙ йәшәйешендә Тәбиғәт ҡанундарынан тайпылырға тейеш түгел. Тәбиғәт ҡанундарынан тайпылыу афәткә килтерә. Быны Урал батыр бала сағынан уҡ яҡшы аңлай. Ул Үлем тураһында һорашыу өсөн урман йәнлектәрен, ҡоштарын йыя һәм ағаһына аңлатырға тырыша. Әммә Шүлгәндең ҡаны ҡарайып өлгөргән. Тәрбиәләүгә һуңлаған. Уны фәҡәт Шүлгән үҙе генә, үҙтәрбиә менән генә төҙәтә ала.

*Ҡарайып бөткән ҡаныңды, -*
*Үткәнеңде уйлатып,*
*Йөрәгеңде һыҙлатып,*
*Тәнең һыҙлап ҡаҡайһын,*
*Йәнең һыҡтап ағарһын;*
*Йөрәгеңдәге ҡара ҡан*
*Кибеп, ҡабат ҡыҙарһын,*
*Шунда кеше булырһың,*
*Илдә бергә ҡалырһың,*
*Яуҙа батыр булырһың.*

Һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтеп китергә кәрәк:

*Донъяны матур төҙөгән,*
*Бағты мәңге биҙәгән -*
*Ул да булһа яҡшылыҡ,*
*Һыуҙа ла батмаҫ яҡшылыҡ,*
*Утҡа ла янмаҫ яҡшылыҡ,*
*Телдән дә төшмәҫ яҡшылыҡ,*
*Бары эшкә баш булыр,*
*Үҙеңә лә, кешегә лә*
*Мәңге йәшәр аш булыр,* - тиелә эпоста. Бер ни ҙә мәңгелек түгел. Тәбиғәт барыһын да белеп яратҡан. Хатта иң яуыз көс - Үлем дә кәрәк икән. Ә бына яҡшылыҡ мәңгелек. Кешенең йәшәү маҡсаты - Яҡшылыҡ, Яҡшы исем ҡалдырырға тырышыу, ер йөҙөндәге баҡсаға матурлыҡ өҫтәү.

Яҡшы исем. Яҡшылыҡты кеше аңламай хәҙер, тигән фекер әйтеүсәндәр. Ә кешенең аңлауы бик кәрәкме? Һин яҡшылыҡты үҙең аңла. Үҙ күңелеңде сафландыр. "Юғары көс - Тәбиғәт, Хоҙай кешенең күңел сафлығын аңлай, сафлыҡҡа сафлыҡ менән яуап ҡайтара. Был тормошта бер ниндәй хилафлыҡтан да ҡурҡмай, саф күңел менән йәшәүҙән дә оло бәхет юҡ. Әлеге заманда ғына түгел, кешелек донъяһы күпме йәшәй, шул тиклем Яҡшылыҡ менән Яуызлыҡ араһында алыш бара. Урал да Шүлгәнде тотош юҡ итә алмай. Аҙаҡ Һомай:

*Шүлгәнгә яу асһаң да,*
*Уны тар-мар итһәң дә,*
*Күленән ил мандымаҫ,* - ти уланарына.
*Батыр исеме күтәреп,*
*Һыу таба алмай тилмереп*
*Тороу ирлек булырмы?* - тип, Иҙел туғандарын эйәртеп һыу эҙләргә сығып китә. Тимәк, яуызлыҡ йәшәгән, йәшәйәсәк, ә яҡшылыҡ ҡылыу - һәр быуындың мөҡәддәс бурысы һәм һинең ҡылған яҡшылығың, изгелегең үҙеңә ҡайта.

Урал батыр ҡара көстәрҙе ҡырып, батыр исеме яулаһа, икенсе батырлығы - үҙ хатаһын таныуы. Үҙ хатаңды таныу, ошо хатаны ҡабатламағыҙ, тип, башҡаларға васыят ҡалдырыу - ҙур батырлыҡ.

*Менһәм, Буҙ ат бар ине,*
*Ҡулда булат бар ине.*
*Яу туплаҡлыҡ еремдә*
*Талай илем бар ине.*
*Ҡулдаш булыр илемдә*
*Батыр ирҙәр бар ине.*
*Шулар ҡәҙерен белмәнем,*
*Батырлыҡҡа маһайып,*
*Кәңәш ҡороп торманым,*
*Яңғыҙ башым үйланым,*
*Уңмаҫ юлды һайланым.*
*Олоно оло итегеҙ,-*
*Кәңәш алып йөрөгөҙ,*
*Кесене кесе итегеҙ, -*
*Кәңәш биреп йөрөгөҙ.*
*Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,*
*Кеше булһын затығыҙ,*
*Яманға юл ҡуймағыҙ,*
*Яҡшынан баш тартмағыҙ.*

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халҡыбыҙ ниндәй ауырлыҡтарҙы, ҡырылыуҙарҙы еңеп, үҙен милләт булараҡ һаҡлап ҡалған икән, Урал батыр васыятына тоғролоҡ менән еңгән һәр төрлө ҡыйралыштарҙы. Тимәк, Яҡшылыҡ ҡылыуға ынтылған халҡыбыҙға Тәңре, Хоҙай һәр саҡ ярҙамға килгән. Ошо ҡанундарҙан тайпылмаһаҡ, милләт булып һаҡланырбыҙ, үҙ телебеҙҙә уҡырбыҙ, йырларбыҙ, үҙ сәнғәтебеҙҙе үҫтерербеҙ, тарихыбыҙҙы өйрәнербеҙ, шәжәрәләребеҙҙе тамырыбыҙға хилаф килтермәй дауам итербеҙ. Рухи байлығыбыҙға эйә булып, донъя кимәленә танытырбыҙ. Йәмғиәткә, халыҡҡа файҙалы кеше булып, эпоста әйтелгәнсә, онотолмаҫ зат булып, үҙебеҙҙе үҙебеҙ һаҡлап йәшәргә кәрәк. Уның өсөн Урал батыр васыятын үтәйек: ыуҙан ҡотолайыҡ, ил ташлап, сит яҡтарға олағып, башҡаларға олтан булмайыҡ, яҡшылыҡҡа ынтылайыҡ. Саф күңел менән йәшәү, таҙа намыҫлы балалар тәрбиәләү - иң мөһим шарт ошо.**

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# ЕЛДӘР АЯҠТАН ЙЫҠҺА ЛА...

## ҡылыҡтарыбыҙ йыҡмаһын

- Эсендә ни - тышында шул, уйында ни - телендә шул.
- Үҙең дә аҙағынаса аткармаҫтай эште башҡаларға таҡма.
- Әсә илатҡанды һыу йотор, ата рәнйеткәндә ер убыр, изгелек эшләгән ҡуҡҡа осор - кәрәкләһен үҙең һайла.
- Яуызлыҡ эшләгән закон язаһынан ҡотолһа ла кеше нәфрәтенән тайшанып ҡала алмай.
- Ҡағыҙ - ул күтәрелгән ҡылысты ҡынға һалырға, тамырҙарын тәрәнгә ебәргән имәндәй түрәләрҙе лә урындарынан осороусы көс.
- Үҙ һүҙле ҡара тырыш, тиҫкәре кеше генә бар ғәләмде болғарға оҫта.
- Ҡарышҡыр утта яныр, ыңғайҙар ҡуҡҡә ашыр.
- Һәр кем үҙ һүрпаһында бешә, сит ҡалаҡҡа урын юҡ.
- Тәрбиәле кеше ҡиммәтле аҡылға эйә - уның менән һөйләшеү үҙе бер ғүмер.
- Үҙенде хурлаусыға күп һүҙҙәр яуҙырма, тәрән мәғәнәле, әсе һүҙле бер һөйләмде һип өҫтөнә.
- Алаһы әйберенде яҡшылап ҡарап ал, алыусының ҡулына тоттор - икеһе лә әҙәплелек.
- Дуҫҡа барһаң, әрләп-өйрәтеп һыу эсерер, дошманға барһаң, маҡтап-ҡуптап ыу эсерер.
- Ҡото осҡанға ҡот ҡойҙор, ете ҡоҙоҡ һыуын эсер.
- Кеше бөйөклөккә лә менеүсе, ҡурҡыныс түбәнлеккә лә тәгәрәүсе, замандың ҡаты һынауҙарына ла бирешмәүсе йән эйәһе икәнен онотмайыҡ.
- Ҡаты иҫкән ел аяҡтан йыҡһа йыҡһын, үҙ телең, үҙ ҡылығың ғына йыҡмаһын.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*



Рәфис БАТЫРҠАЙ һүрәте.

# НАСРЕТДИН ӘЛ-НАСЫРИ

## (XIII быуат аҙағы - 1351)

**Насретдин әл-Насыри хаҡында тарихсы Морат Рәмзиҙең ошондай һүҙҙәре бар: "Башҡорт Насретдин әл-Насыри үҙенең сығышы менән ән Наср ибне әл-Ғәзиз мәмлүктәренән. Хеҙмәте буйынса юғары үрләп власҡа өлгәшкән, аҡыллы һәм юғары дәрәжәле әмирҙәрҙән булған. Назим менән дә, нәҫер менән дә яҙған". Ғәрәп әҙәбиәтселәре һәм тарихсылары уның шәхесен, ғилми һәм әҙәби эшмәкәрлеген юғары баһалаған. Ибне Хажар әл-Ғасҡалани (1372-1449) үҙенең "Әлдөрөр әл-каминә" ("Йәшерен яткан ынйылар") тигән китабында үҙе телгә алған исемдәргә ҡарата, "иң ҙур дан һәм иң яҡты шөһрәтлек белдерәм", тигән. Ә Насретдин әл-Насыриҙың замандашы Ибне Зәмләкәни "ул әҫәрҙәрен үҙенең тәбиғи оҫталығы буйынса, шиғыр ҡағиҙәләрен һаҡламаҫтан яҙа ине", тигән.**

Беҙҙең дәүерҙә хәҙерге Мысыр ғалимы Әмин әл-Холи, Насретдин әл-Насыриҙың үҙ дәүерендә күренекле ғалим, әҙип икәнлеген билдәләп, "уның замандаштары тарафынан юғары баһаланған шиғри һәм сәсмә әҫәрҙәре лә билдәле", ти.

Насретдин әл-Насыриҙың тыуған йылы аныҡ ҡына билдәле булмаһа ла, донъя ҡуйған ваҡыты хаҡында мәғлүмәт йылы, айы, көнөнә тиклем ҡағыҙға теркәп ҡалдырылған: шағир һижрә йыл иҫәбе менән 752 йылдың сәфәр айы 13-сө көнөндә (миләди иҫәбе менән 1351 йылдың 11 апрелендә) Дамаск ҡалаһында вафат була.

"Сәнжар әл-Башҡорди менән Насретдин әл-Насыри,- тип яҙҙы профессор Ә. И. Харисов, - үҙҙәрен тыуған ерҙәрендә түгел, ә ғәрәп илендә танытҡандар. Быға уларҙың мәмлүклеге һәм юғары ҡатламға күтәрелеүе сәбәпсе булған. Ләкин урта быуаттарҙа башҡорттар Ғәрәбстанға бер мәмлүклек юлы менән генә бармағандыр, тип әйтеп була... Заманының уҡымышлыраҡ кешеләре өсөн Мысырҙың "үҙенә тартыу" көсө шаҡтай булыу менән бергә, Волга һәм Урал буйы тормошоноң "үҙенән этеү" көсө лә ярайһы ғына булған, күрәһең. Көнсығыш Европа, шул иҫәптән Башҡортостан һәм уның бер өлөшө ҡараған Болғар дәүләте, XIII-XIV быуаттарҙа монгол-татар иҙеүе аҫтында ыҙаланып йәшәне... Башҡорт ҡәбиләләренең һәм ырыуҙарының бер халыҡ булып ойоша башлау процесы, шулай уҡ башҡорт иленең иҗтимағи-иҡтисади һәм мәҙәниәт йәһәтенән үҫеше быуылып торҙо. Бына шуның һөҙөмтәһендә Алтын Урҙа режимы хакимлыҡ иткән ике йөҙ йылдан артығыраҡ ҡараңғы дәүер эсендә Башҡортостандың үҙендә заманына күрә әҙме-күпме билдәлелек алған бер генә шәхес тә күтәрелә алмаған. Күп булмаған уҡымышлылар араһында ҡыйыуыраҡтары, дин белемендә үҙҙәрен көслөрәк һиҙгәндәре йәки ижад ҡомарҙары "ташып барғандары" йыш ҡына үҙҙәре уҡыған Мысырға һәм башҡа ғәрәп илдәренә кире китергә йәки, уҡыуҙы тамамлағас, ғөмүмән, шунда тороп ҡалырға мәжбүр булған".

Ә. И. Харисовтың "йәшерен яткан ынйыларҙы" алыҫ замандарға сәйәхәт итеп кенә түгел, йыраҡ илдәргә барып та эҙләү һәм табыу бурысы тора, тигән һүҙҙәре бөгөнгө көн өсөн дә мөһим.

**Рәшит ШӘКҮР.**
**"Арҙаҡлы башҡорттар" китабынан.**

✓ *Үҙ-үҙен яратҡан һәм ихтирам иткән милләт башҡаларҙың да барлыҡ хоҡуҡтарын таный һәм ихтирам итә, милләт-ара ҡырҡыу мөнәсәбәткә юл ҡуймай.*



# БЕҘҘЕ ЯҠЛАР,

## мәҙәниәт

**Кеше мөхәббәте сикһеҙ. Ул бар ғәләмде, донъяны, кешеләрҙе ярата, ихтирам итә ала. Әммә ошоларҙың араһынан ул үҙ-үҙен яратыуҙы, ихтирам итеүҙе онота икән, уның башҡаларға булған мөхәббәтле мөнәсәбәте лә юҡҡа сыға. Үҙ-үҙен яратмаған кеше бер үк ваҡытта үҙен яралтҡан Хоҙайҙы ла, тыуҙырған ата-әсәһен дә, туғандарын, дуҫтарын да, үҙен кеше итеп тойорға ярҙам иткән милләтен дә ярата алмай. Хәйер, был әңгәмә бер мөхәббәт хаҡында ғына түгел. Шулай итеп, һүҙ - Башҡорт дәүләт университеты Сибай институты директорының уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫары, педагогика фәндәре кандидаты, профессор, киң ҡарашлы инсан Вәкил Исмәғил улы ХАЖИНға.**

### Һәр бер сағыштырыу аҡһай

Бөтә нәмә сағыштырғанда беленә, тиҙәр. Шуға күрәлерме, беҙ үҙебеҙҙәге йәшәү кимәлен Европа илдәре, Америка тормошо менән сағыштырып ҡарап, зарланырға тотонабыҙ. Әммә "Һәр бер сағыштырыу аҡһай", тип тә әйтә урыҫтар. Шуға күрә, һәр беребеҙ үҙенең хәҙерге тормошон сит илдеке менән түгел, ә ата-әсәһенең йәшәгән дәүере йә үҙенең бала сағы менән сағыштырһа, ер менән күк араһындай айырма табыр ине. Минең бала саҡта, мәҫәлән, беҙҙең ауылдағы ҡайһы бер балаларҙың аяҡ кейеме бөтөнләй булманы. Улар ҡыш көндәрендә, ата-әсәләре өйгә ингән арала, уларҙың аяҡ кейемен кейеп, хәжәтен үтәмәккә тышҡа йүгерә торғайны. Беҙ тауға һырғалаҡҡа сыҡһаҡ, өйҙән, күҙе ҡыҙып, беҙҙе күҙәткән ул малайҙар яланаяҡ йүгереп килеп сығалар ҙа, тиҙ арала аяҡтары туңып, кире өйҙәренә йүгереп инеп китәләр ине. Күптәре һыуыҡ тейҙереп, йәшләй үлеп бөттө.

Милләтебеҙҙең хәҙерге тормошон да үткән быуаттың 60-сы йылдары менән бөтөнләй сағыштырырлыҡ түгел. Беҙҙең хәҙер һәр өлкә буйынса үҙ ғалимдарыбыҙ бар. Үткән юлыбыҙ, тарихыбыҙ буйынса байтаҡ ҡына мәғлүмәт туплай алдыҡ. Халҡыбыҙ үткәненең ҡағыҙға төшкән, документҡа әүерелгән өлөшөн ғалимдар өйрәнә, халыҡҡа еткерә. Бынан тыш, тарихтың хәтерҙә һаҡланған өлөшөн дә рәсмиләштереү мөһим. Уларҙың әлегә документтар менән раҫланмағаны араһында ғәжәйеп мәғлүмәттәр килеп сыға. Мәҫәлән, шулар араһында Салауат Юлаевҡа тыуған иленән делегация барып тороуы, батырға һәм уның яуҙаштарына ҡайтырға рөхсәт булыуы, әммә ҡайтмауы, сөнки тыуған яғы яндырылған, туғандары үлтерелгән, ситкә ҡыуылған, танау ҡырҡылған, маңлайҙа мөһөр - нимә тип ҡайтһын ул? Фараздар буйынса, Салауат шведтарҙың Рогервик портына һөжүмен кире ҡағыуҙы ойоштора. Быға ышанырға була, сөнки тәбиғәттән полководец һәләтенә эйә Салауат Уралда барған яуҙарҙа батша армияһының махсус белеме булған һәм тәжрибәле хәрби башлыҡтарын күп тапҡыр еңә бит. Каторгала пугачевсыларға өйләнергә рөхсәт иткәндәр, кем белә, бәлки, Салауаттың тоҡомо ул яҡта дауам итәлер? Бындай хәбәрҙәр юҡтан бар булмаған, улар кемдер берәүҙең кемгәлер һөйләүе аша беҙгә килеп еткән. Халыҡ хәтере тип атала был. Ә халыҡ хәтере - шул уҡ тарих. Беҙҙең боронғо һәм элекке тарихты белеүселәр әле булһа бар.

Беҙ хәҙер 60-сы йылдар башҡортонан ныҡ айырылабыҙ. Октябрҙең 50 йыллығына Ғата Сөләймәнов сәхнәгә 50 ҡурайсы сығарып баҫтырғайны. Уларҙың утыҙы ғына уйнаны, ҡалғандары иҫәп өсөн торҙо. Лениндың 100 йыллығына 100 ҡурайсыны сығарып баҫтырҙылар. Бөгөн иһә, һәр район юғары кимәлдә уйнаған 100 ҡурайсыны сәхнәгә сығара ала.

80-се йылдарҙа милли идея ихтыяжы барлыҡҡа килде. Беҙҙең милли идея берәү - "Урал батыр" эпосы. Ҡырғыҙҙар үҙҙәренең "Манас"ына нисек тотонһа, беҙ ҙә "Урал батыр"ға шулай тотонорға тейешбеҙ. Эпосыбыҙҙы хәҙер милләтебеҙҙең 60 проценты өйрәнгән, йөкмәткеһен белә. Беҙ "Урал батыр"ҙы балалар баҡсаһынан өйрәнеп, уны белеү кимәлен 100 процентҡа еткерергә тейешбеҙ. Был эпосты яҡшы белгән, унда һалынған идеяны аңлаған кеше бер ваҡытта ла үҙенең башҡортлоғонан баш тартмаясаҡ, балаларын, ейән-ейәнсәрҙәрен ошо рухта тәрбиәләйәсәк. Беҙ хәҙер милли проблемалар хаҡында асыҡтан-асыҡ яҙа алабыҙ. Был йүнәлеште, әйтергә кәрәк, башҡа милләттәргә һәм милләт-ара мөнәсәбәттәргә теймәгән, тик үҙебеҙгә генә ҡағылған проблемаларҙы матбуғат битендә күтәреүҙе һәм уларҙы хәл итеүҙе дауам итергә бурыслыбыҙ. Бар ундай проблемалар, әйтәйек: манҡортлоҡ, балалар тыуҙырыу һәм тәрбиәләү, үҙ милләтендәге кеше менән ғаилә ҡороу мәсьәләләре.

### Милли эгоизм тойғоһо

Беҙгә дөйөм кешелеккә ҡағылған мәсьәләләрҙә толерантлы, ә үҙебеҙҙең милләткә ҡағылғандарында эгоист булырға кәрәк. Үҙ-үҙен яратмаған, ихтирам итмәгән кеше башҡаларҙы ла ярата һәм ихтирам итә алмай. (Үҙ-үҙеңде яратыу һәм ихтирам итеү үҙеңде башҡаларҙан кәм итеп тоймауҙан башлана. Рәми Ғарипов үҙенең "Туған тел" шиғырында күп нәмә тураһында әйткән, әммә ундағы иң төп фекерҙе: "Бер телдән дә телем кәм түгел..."- тигән юлдар белдерә. Был юлдарҙың артында "Мин һәм минең милләтем берәүҙән дә кәм түгел" тигән оло мәғәнә ята. Беҙ әгәр ҙә ошондай аңлауҙы милләтебеҙҙең һәр ағзаһына һеңдерә алһаҡ, милләтебеҙ йәшәйәсәк. Беҙҙең милли эгоизм, кәм күрергә тырышыусыларға иғтибар итмәйенсә, тарихыбыҙ менән ғорурланыуға нигеҙләнергә тейеш. Хәҙерге Рәсәй Федерацияһы составындағы беҙҙең кеүек боронғо, шаңлы тарихлы халыҡты табып ҡарағыҙ! Эйе, СССР мәлендә бар ине беҙҙең йәштәге халыҡтар, әйтәйек, грузиндар, әрмәндәр, тажиктар, әзербайжандар һ.б.



*Беҙгә дөйөм кешелеккә ҡағылған мәсьәләләрҙә толерантлы, ә үҙебеҙҙең милләткә ҡағылғандарында эгоист булырға кәрәк. Үҙ-үҙен яратмаған, ихтирам итмәгән кеше башҡаларҙы ла ярата һәм ихтирам итә алмай. (Үҙ-үҙеңде яратыу һәм ихтирам итеү үҙеңде башҡаларҙан кәм итеп тоймауҙан башлана. Рәми Ғарипов үҙенең "Туған тел" шиғырында күп нәмә тураһында әйткән, әммә ундағы иң төп фекерҙе: "Бер телдән дә телем кәм түгел..."- тигән юлдар белдерә. Был юлдарҙың артында "Мин һәм минең милләтем берәүҙән дә кәм түгел" тигән оло мәғәнә ята. Беҙ әгәр ҙә ошондай аңлауҙы милләтебеҙҙең һәр ағзаһына һеңдерә алһаҡ, милләтебеҙ йәшәйәсәк. Беҙҙең милли эгоизм, кәм күрергә тырышыусыларға иғтибар итмәйенсә, тарихыбыҙ менән ғорурланыуға нигеҙләнергә тейеш. Хәҙерге Рәсәй Федерацияһы составындағы беҙҙең кеүек боронғо, шаңлы тарихлы халыҡты табып ҡарағыҙ!*

Беҙ төрки телле халыҡ булһаҡ та, беҙҙең бөтөн төрки халыҡтарынан айырылған һыҙатыбыҙ бар: ул да булһа, телебеҙҙәге үҙенсәлекле "ҙ", "ҫ" һәм "һ" өндәре. Шул уҡ ваҡытта Орхон-Йәнәсәй яҙмаларының "антамынта" элементы тик беҙҙең телдә генә бар. Бер халыҡта ла "Тарих яҙыр инем ташына", "Ташҡайҙарға соҡоп яҙҙым ҡарғыш" тигән йыр һүҙҙәре юҡ.

Халҡыбыҙҙың үҙ-үҙен генетик яҡтан һаҡлай алыу һәләте бар. Беҙҙе мәҙәниәтебеҙ һаҡлай. Мәҙәниәт беҙҙе башҡа халыҡтарҙан айыра торған байлыҡ түгел, ул беҙҙе һаҡлай торған ҡалҡан. Мәҙәниәткә, милли кейем кейеп, сәхнәгә сығып ҡурай тартыу, йырлау йә бейеү генә инмәй. Унда беҙҙең эпостарыбыҙ, әкиәттәребеҙ, кейемдәребеҙ, милли аш-һыуыбыҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ, йола-традицияларыбыҙ, үҙ-ара һәм башҡалар менән мөнәсәбәт үҙенсәлегебеҙ, эске мәҙәниәтебеҙ, холҡобоҙ, темпераментыбыҙ һ.б. инә. Беҙ төрлө конкурстар, бәйгеләр, милли байрамдар, һабантуйҙар, йыйындар үткәрәбеҙ. Бөгөн тотош алған ваҡытта беҙҙең милли идеология юҡ та кеүек, әммә йөрәгендә башҡорт рухы булған кеше, ошондай милли мәҙәни сараларҙа ҡатнашып, тамаша ҡылып, милли тормош һыуһынын ҡандыра. Кемдер ҡурай, оҙон көй бәйгеләрен үткәрә башланы, кемдер "Салауат йыйыны"н, кемдер "Ирәндек мондары", кемдер "Дуҫлыҡ мондары", кемдер "Байыҡ" бәйгеһен башланы, кемдер "Ватандаш", "Шоңҡар", "Аҡбуҙат", "Тамаша" журналдарын, "Йәшлек", "Киске Өфө" гәзиттәрен асты, кемдер башҡорт ҡоролтайҙарын үткәреүҙе башланы. Былар барыһы ла беҙҙең рухты һаҡлай торған күренештәр. Беҙ бөгөн иң тәүҙә үҙ милләтебеҙ эсендәге проблемаларҙы хәл итергә бурыслыбыҙ.

Бөгөн башҡорттоң байҙары, ҙур дәрәжәле чиновниктары юҡ дәрәжәһендә. Ләкин милләттең бөйөклөгө уның байҙарының, чиновниктарының күплеге менән түгел, уның шағирҙарының, яҙыусыларының, ҡурайсыларының, ғалимдарының, рәссамдарының һаны менән билдәләнә.

Минә 1986 йылда Әрмәнстанда үткән халыҡ-ара конференцияла ҡатнашырға насип булды. Барлығы 5 миллионлыҡ әрмән халҡының әрмән филологияһы буйынса 2 мең фән кандидаты булыуын белеп шаҡ ҡатҡайным. Ул ваҡытта беҙҙә башҡорт филологияһы буйынса 10-15 кенә фән кандидаты бар ине. 1 миллион эстон халҡының ижади интеллигенцияһы 2 миллион самаһы булған башҡорттоҡонан 10 тапҡырға күберәк. Был халыҡтарҙа милли эгоизм тойғоһо көслө. Улар, үҙҙәренең милләтенә ҡарата саҡ ҡына кәмһетеп ҡарау булһа, бик ҡаты итеп яуап бирәләр. Һәр милләттең үҙ-үҙен яратыуын Мәскәү күрә белмәй, быны икенсе төрлө итеп - милләтселек тип атай. Үҙ-үҙен яратҡан һәм ихтирам иткән милләт башҡаларҙың да барлыҡ хоҡуҡтарын таный һәм ихтирам итә, милләт-ара ҡырҡыу мөнәсәбәткә юл ҡуймай. Тимәк, беҙҙең илдә ниндәйҙер милләт-ара ҡырҡыу хәл килеп тыуа икән, бында дәғүәгә килгән ике милләт вәкилдәрендә лә милли эгоизм тойғоһо юҡ тигәнде аңлата. Беҙҙә шундай күренеш: әйтәйек, ябайлаштырып алғанда, бер иҫерек шешә менән өҫтәлгә килтереп һуҡһа, шешә ярсыҡтарының кемгә зыян килтереүен генә тикшерәләр. Был кеше ни өсөн ошондай ғәмәл башҡарған, ни өсөн эскән, бүлмәлә ултырыусылар уға алдан ниндәй мөнәсәбәттә булған һ.б. - быларына иғтибар ителмәй.

### Тел ғилеме - күтәрелмәгән сиҙәм

Беҙҙең тел ғилемендә тикшерәһе, өйрәнәһе өлкәләр бихисап. Күтәрелмәгән сиҙәм өлөштәре лә бар. Этимология, йәғни һүҙҙең килеп сығышын, иң тәүге мәғәнәһен асыҡлау - шундайҙарҙан. Этимология буйынса махсус рәүештә шөғөлләнмәһәм дә, ҡайһы бер үҙем белгәндәрҙе теркәй барам.

Бик оҙаҡ йылдар буйына беҙҙең әртистәр "Сыбай ҡашҡа"ны - "Һыбай ҡашҡа" тип йырлап йөрөнө. "Ҡашҡа" ат тигәнде аңлата, логика буйынса ҡараһаң, "Һыбай ҡашҡа" бөтөнләй мәғәнәһеҙ, йәғни эйәрҙә ултырып килгән ат, тигәнде аңлата. "Сыбай" иһә оҙон тигәнде аңлата, йәғни маңлайынан алып танау осона тиклем төшкән юлаҡ. Сағыштырығыҙ: маңлайҙағыһы ғына "йондоҙ ҡашҡа" тип йөрөтөлә. Башҡорттарҙа атты "сыбата егеү", йәғни "оҙонайтып егеү" тигән төшөнсә бар. Урманлы, таулы урындарҙа пар ат

✓ ***Мәктәптәрҙә грамматика уҡытмайынса, балаларға телде тойорға, һиҙергә, унын менән аралашырға өйрәтһәк, күпкә файҙалыраҡ булыр ине. Беҙ иһә, кәрәкмәгән ҡағиҙәләрҙе ятлатып, ысынында, уҡыусыларҙы телдән биҙҙерәбеҙ.***

# ҺАҠЛАР УЛ ҡалҡаны...

менән йөрөү мөмкин булмағанда аттарҙы бер-бер артлы ҡуйып еккәндәр.

Әгәр ҙә бынан ике-өс быуат элек йәшәгән башҡорт менән хәҙерге башҡорт һөйләшһә, улар бер-береһен һис һүҙһеҙ аңлар ине. Сөнки телебеҙҙәге "ҙ","ҫ", "һ" өндәре һәр ваҡыт булған. Быны иҫбат итер өсөн бынан ике-өс быуат элек тыуған халыҡ йырҙарының һүҙҙәренә иғтибар итеү ҙә етә. Мин шулай ҙа уйлайым: оҙон көйҙәр беҙҙең борон-борондан тыуып, бәлки, икенсе һүҙҙәр менән дә йырланып йөрөгәндер. Ҡайһы бер баҫылып сыҡҡан боронғо йырҙарҙың 20-гә яҡын куплеты бар. Элек кеше шунынсама куплетты йырлап ултырған тиһегеҙме? Улар бер үк йырҙың төрлө вариантта һаҡланған һүҙҙәре.

XX быуатта беҙ үҙебеҙҙең күп кенә һүҙҙәребеҙҙе башҡа телдәрҙең һүҙҙәре менән алмаштыра башланыҡ. Мәҫәлән, мин Мостай Кәримдең бер генә әҫәрендә лә "тубыҡ" һүҙен осратҡаным юҡ, унын урынына "теҙ" ҡулланыла. Уға эйәреп, үҙебеҙҙең башҡорт мәктәбендә уҡыған яҙыусылар ҙа "теҙ" тип яҙа башланы. Аңлымы, аңһыҙмы, байтаҡ төп башҡорт һүҙҙәре яҙма телдән, радио, телевидение, сәхнә теленән даими төшөрөп ҡалдырыла, уларҙың ҡайһы берҙәре хатта тупаҫ лексика дәрәжәһенә еткерелгән. Мәҫәлән, мышар һүҙен индереп яҙылған шиғырҙы осратҡан юҡ. Үҙ ауылдарында миләш һүҙен әйтеп тә ҡарамаһалар ҙа, һәр шағирҙың тип әйтерлек шул һүҙҙе индереп яҙған шиғыры бар. Күренеп тора: миләш, йәнәһе - "юғары стиль", ә мышар "түбән стилдеке" була инде. Шундайҙарға бер нисә миҫал (тәүгеләре төп үҙебеҙҙең һүҙҙәр): ялҡытты - еләтте, йүткерә - йүтәлләй, алйот, ауһар - йүләр, һөйрәй - өҫтөрәй, ауырый - сирләй, егәрле - уңған, нәҙек - нескә, тоҡ - ҡапсыҡ, күтәрмә - болдор, етем - йәтим һ.б.

Беҙҙең тел төрки телдәр ғаиләһенә ҡараһа ла, унда бик киң ҡатлам фарсы, монгол, ҡытай, ғәрәп һүҙҙәре бар. Бер ниндәй ҙә һүҙ телгә былай ғына, үҙенәнүҙе килеп инмәй. Былар ошо телдә һөйләшеүсе ҡәүемдәр, илдәр, дәүләттәр менән уртаҡ тарихыбыҙ барлығы хаҡында ла һөйләй. Әйтәйек, беҙҙең телгә ингән фарсы һүҙҙәрен сауҙа менән генә бәйләп аңлатыу бөтөнләй дөрөҫ түгел. Әйтәйек, "тәҙрә" һүҙе. Нимә, уны башҡорттар фарсыларҙан һатып алып ҡайтып, үҙҙәренең өйөнә ҡуйғанмы? Шул уҡ "таҡта" һүҙе. Нимә, башҡорттар таҡтаны меңәр саҡрымдарҙан ташып йөрөгәнме ни, үҙебеҙҙә ағас бөткәнме?

## Телдең эске мөмкинлеге

Беҙҙең телдең эске мөмкинлеге ғәжәйеп бай. Әйтәйек, ҡулланылышҡа яңы әйбер килеп инһә, инәйҙәребеҙ шундуҡ һүҙен дә табып ҡуя. Әйтәйек, мотоциклды "тыр-тыр" йә "дөрпөлдәк" тиҙәр. Пластик шешәләрҙе "ҡупылдаҡ", Т-40 тракторын "һупылдаҡ" тиҙәр. Әрмәндәр, мәҫәлән, телдәренең ошо мөмкинлеген киң файҙалана, яңы предметтарға атаманы 98 процент һүҙҙәре менән бирә. Гәзиттең бер һанында мин "йыу" ҡылымының 36 меңдән ашыу һүҙ формаһы яһап булыуы тураһында әйткәйнем инде. Шуға әйләнеп ҡайтайыҡ. Ошондай һүҙ формаларының барлығы беҙҙең халыҡтың эшкә, хеҙмәткә ҡарата булған мөнәсәбәтен күрһәтә. Ул мөнәсәбәт ваҡыт, бер ҡат, күп ҡат булыу, башҡарыу сифаты, боронғолоҡ, элеккелек, киләсәк менән, мөмкинлек, эште башҡарған кешегә һәм шул хаҡта һөйләүсенең эшкә мөнәсәбәте менән бәйләнгән. Йәғни беҙҙең телебеҙҙәге һүҙҙәр ярҙамында оҙон-оҙаҡ итеп һөйләмәйенсә лә, шул бер һүҙҙе ҡулланып ҡына кешегә тулы характеристика биреп була. Әйтәйек, шул уҡ "йыу" тамырынан төрлө ялғауҙар ярҙамында шунсама һүҙ формалары барлыҡҡа килгән икән, бының артында меңәр-меңәр йыллап көн итеүгә бәйле халыҡ тарихы, мөнәсәбәт, мәҙәниәт ята. Тик шул 36 мең һүҙҙе өйрәнеп кенә йәшәү рәүешебеҙҙе анализларға була. Беҙ әле бөгөн шул 36 мең һүҙ формаһының 60-100 формаһын белһәк тә, бик яҡшы әле.

Беҙҙең телдә артыҡ күп һөйләмәй генә - ялғауҙар, йә баҫым ярҙамында ғына төрлө мөнәсәбәттәрҙе аңлатыу мөмкинлеге бар. Әйтәйек, минең ҡустым әрменән ҡайтһа һәм мин уны әле күрмәгән булһам, "Ул әрменән ҡайтҡан", тип һөйләйем. "Ҡайтҡан", тимәк, мин әле унын менән осрашмағанмын. Әгәр ҙә "Ҡустым әрменән ҡайтты", тип әйтәм икән, тимәк, мин унын менән осрашҡанмын. Йәғни ҡустыһының әрменән ҡайтыуын башҡаларға һөйләүсе кеше ошо ялғауҙар менән күп кенә мөнәсәбәт тарихын һөйләп аңлата ала. Йә булмаһа, "ҡайтма" һүҙе менән һуңғы ижекҡә баҫымлы "ҡайтм-а-а-а" һүҙҙәре лә бик ныҡ айырыла. Уларҙың тәүгеһендә - бойороу, икенсеһендә - инәлеү, үтенеү интонацияһы. Беҙ ошо баҫым ярҙамында ғына ошо һүҙҙе әйтеүсенең икенсе кешегә мөнәсәбәтен белә алабыҙ. Бойороусы менән үтенеүсе - икеһе ике төрлө кеше һәм ике төрлө мөнәсәбәтле кеше. Ҡытай телендә лә интонация ҙур роль уйнай. Уларҙың телендә лә һүҙ формалары күп һәм улар яҙылышта бер үк булған һүҙҙәрҙең төрлөсә әйтелеше менән генә айырыла. Беҙҙең дә "йыу"ҙың 36 мең һүҙ формаһы өсөн 36 мең төрлө ҡағиҙә кәрәк. Уларҙы берәү ҙә иҫендә ҡалдыра алмаясаҡ. Уларҙы белеү һәм дөрөҫ итеп ҡулланыу өсөн, башҡорт көнкүреше, йола-традициялары менән йәшәгән ауылда тыуып-үҫергә кәрәк. Шуға күрә лә мәктәптәрҙә грамматика уҡытмайынса, балаларға телде тойорға, һиҙергә, унын менән аралашырға өйрәтһәк, күпкә файҙалыраҡ булыр ине. Беҙ иһә, кәрәкмәгән ҡағиҙәләрҙе ятлатып, ысынында, уҡыусыларҙы телдән биҙҙерәбеҙ.

Образдар, кинәйәләр, ишаралар оло тарихы булған халыҡтарға хас. Аҙ ғына һөйләү ярҙамында күпте аңғартыу ҙа тел тарихының боронғолоғо тураһында һөйләй. Бына бик талантлы шағир Рәйес Түләктең өс кенә юллыҡ шиғыры:

Һаҡмарҡайым аҡ тулҡынға биҙәлгән.

Тулҡын түгел, тәнем шулай биҙрәгән,

Түбән ҡарап һыу алған биҙрәләрҙән.

Шағирҙың ошо ғына шиғри юлдары буйынса тотош роман яҙырға була.

## Тарихыбыҙ - йыр һүҙҙәрендә

Башҡорт халыҡ йырҙарының текстарында тәүге ике юл ул ҡалған ике юлдарҙағы фекергә йүнәлеш бирә: "Ҡулымдағы йөҙөгөмдөң исемдәре Хөбөтдин", - тигән һымағыраҡ таҡмаҡ һүҙҙәре түгел. Беҙҙең йыр текстарының тәүге ике юлында төп мәғәнә ята. Әйтәйек, "Сибай" йырының тәүге ике юлындағы һүҙҙәр:

Йәшел генә сана, зеңгерле лә дуға

Ектерһәнә, Фатимам, туратҡа...

Бында урынлы һорауҙар тыуа: ниңә "йәшел сана", "зеңгерле" дуға, ни өсөн туры ат? Былар барыһы ла кантон атрибуттары. Бөгөн начальниктар мигалкалар тағып, ҡара машиналарҙа йөрөй, тап шулар кеүек, ул ваҡытта кантон башлығының да аты ҡара туры булырға тейеш, унын дуғаһында мотлаҡ рәүештә зеңгер-мигалка эленеп торорға тейеш. Кантон башлығының еккән санаһы ҡара төҫтә, ә ултырғысы йәшел буҫтау менән ҡапланған булған. Был ике юл, айырым ғына алғанда, бер нәмәне лә белдермәгән һымаҡ. Йырҙың ҡалған ике юлындағы һүҙҙәре:

Атайсалға ҡайтып, кантон булһам,

Ирешер инем, Фатимам, моратҡа.

Хәҙер куплетты тулы килеш ҡараһаҡ, әле үк кантон булған кешенең үҙ ауылына ҡайтып кантон булыу теләге асыҡлана. Тарихтан билдәле булыуынса, Атайсал ауылы ир-уҙаманы Шәйәхмәт Сибаев хәҙерге Әбйәлил районының кантон үҙәге булған Рәхмәт ауылында кантон вазифаһын үтәй. Әммә унын һөйгән ҡатыны Фатима ул яҡҡа бармайынса, Атайсалда тороп ҡала. Шәйәхмәт кантон ҡатынын һағынып, ошо йырҙы сығара. Бары тик үҙ ауылына ҡайтып кантон булған осраҡта ғына ҡатыны менән бергә йәшәү мөмкинлеге булыуын ул ошо йыр менән аңлатып бирә.

"Тәфтиләү" йырының ошо һүҙҙәренә иғтибар итәйек:

Шарлап ҡына аҡҡан Иҙел аша

Тәфтиләүҙәр кисеү табалмаҫ...

Башҡорт йылғаларының кисеүе һәр ваҡыт йәшерен сер итеп һаҡланған. Хәҙерге кеүек, кисеүҙәр оло юл менән килеп йылғаға терәлмәгән. Кисеүҙәр һәр ваҡыт ҡуйы әрәмә йә тал менән уратып алынған булған һәм ул саҡтағы шарлап аҡҡан йылғалар аша дошман ғәскәрҙәре сыға алмаған.

Әрмеләргә барып сәс еткерҙем,

Сәскенәйем етте үрмәгә,

тип йырлана "Әрме" йырында. Ниңә бында әрмегә барыу фәҡәт сәс еткереүгә тиңләнгән һуң? Сөнки хатта Геродот үҙе беҙҙе "сәсһеҙ халыҡ" тип яҙған. Башҡорт ир-аттары сәс үҫтермәгән, әммә сәс үҫмәгәндән түгел. Ибн-Фаҙлан да был хаҡта яҙа. Мин бәләкәй ваҡытта беҙгә лә сәс үҫтертмәнеләр. Мәктәп директорының ҡулында һәр ваҡыт сәс алғыс машинка булды. Сәсебеҙ бер сантиметрҙан артып китһә, ул сәсебеҙҙе уртанан алып, юлаҡ ҡына төшөрә торғайны. Беҙ ул саҡта инде, ирекһеҙҙең көнөнән, сәсебеҙҙе алдырырға мәжбүр була инек. Атайҙар күҙҙәрҙән йәш сығартып, башыбыҙҙы бысаҡ менән ҡыра торғайны. "Әрме" йыры сыҡҡан ваҡыттарҙа ир-атҡа сәс үҫтереү хәҙер ҡатын-ҡыҙҙарҙың сәсен таҡыр итеп алдырыуға тиң ғәрлек һаналған. Тимәк, "Әрме" йырында әрме хеҙмәтенең ауырлығы унда сәс еткереүгә тиң фажиғәгә тиңләнә. Әгәр ҙә беҙ был йырҙы тарихи күренеш булараҡ, ошо рәүешле ҡарамаһаҡ, унын аһәңен тулыһынса аңлай ҙа алмайбыҙ.

Ғөмүмән, йырҙарҙың һүҙҙәрен ошо рәүешле анализлаһаң, әллә ниндәй донъяларҙы, тарихтың күренмәгән яҡтарын үҙеңә асаһың. Әлбиттә, беҙҙең мәктәптәрҙә бындай анализ юҡ. Беҙҙең тарихи йырҙарҙың әһәмиәте лә шунда: тәүге ике юлда тарих һөйләнелә, ҡалған юлдарҙа шул тарихҡа бәйле кинәйәле фәлсәфә асыла. Беҙ тәүге ике юлдағы тарихҡа иғтибар итмәйенсә, һуңғы юлдарға күберәк иғтибар йүнәлтәбеҙ.

## Башҡорт теле дәресе - үҙ-үҙеңде яратыу дәресе

Әгәр ҙә милләттә үҙ теленә, мәҙәниәтенә, тарихына йәбешеп ятыу булһа, бер кем дә бер милләткә лә, бер ҡасан да аламалыҡ эшләй алмай. Беҙҙә барлыҡ предметтар ҙа урыҫса уҡытылған, тәнәфестәрҙә, урамдарҙа аралашыу урыҫса йә башҡа телдә барған шарттарҙа ла башҡорт теле башҡорт балаһына иммунитет һалыу, үҙ-үҙеңде яратырға өйрәтеү дәресе булырға тейеш. Әгәр ҙә башҡа дәрестәр башҡорт телендә үткәрелеп, тәнәфестә һәм урамда аралашыуҙар туған телебеҙҙә барһа, мин телебеҙҙең әлеге кимәлдә уҡытылғаны менән дә ризалашыр инем. Юҡ, беҙҙең уҡытыусылар һаман да берәүгә лә, хатта үҙҙәренә лә кәрәк булмаған эйә, хәбәр, аныҡлаусы, тултырыусылар өйрәтә. Бының менән улар беҙҙең телде уҡытыуға ҡаршы булған көстәргә ҡарағанда ла милләткә зыянды күберәк эшләй.

Халыҡтың бәләкәйе, ҙуры, яҡшыһы, яманы, көсһөҙө булмай. Ғәлимйән Ибраһимов бер хикәйәһендә үҙе менән бергә уҡыған башҡорт егетенең үҙенең төҫкә йәмһеҙ генә күренгән әсәһен нисек итеп яратыуын, уны нисек ихтирам итеүен, нисек итеп уға өндәшеүен иҫе китеп яҙа. Кәмһенеү комплексы менән яфаланыусылар үҙҙәренең исеменән оялып, Зөлхизәләр - Зоя, Гөлсирәләр - Гуля, Таңһылыуҙар - Таня булып йөрөй. Бер ағай үҙенең атаһының исемен "Михайлович" тип өндәшеүгә күнегеп киткәйне. Мин уға: "Ағай, тегендә барғас, атайың, ниңә минең исемде Михаилға алыштырҙың, тиһә, ни тип яуап бирерһең?"-тинем. Уйланды, шикелле, ағай, артабан атаһының үҙ исемен генә әйттерер булды.

Башҡорт әҙәби теле нормалары ҡабул ителгән саҡта, күплектә "-лар", "ләр"ялғауҙары ғына ҡабул ителһә, беҙҙең тел татар теле ассимиляцияһына бирелмәҫ ине, тигән ҡараш йәшәй. Төрки телдәренең барыһында ла күплекте "-лар", "-ләр" генә белдерә. Татарҙарҙа ғына бер нисә урында "-нар", "-нәр" ялғауы бар. Тик беҙҙең телдә генә "-тар","-тәр", "-ҙар", "ҙәр", "-дар", "-дәр" ялғауҙары ҡулланыла. Мин, киреһенсә, был ялғауҙар - телебеҙҙе һаҡлаусы ялғауҙар, тип уйлайым. Әгәр ҙә беҙ уларса ялғауҙарҙы ҡабул итһәк, "ҙ" урынына "з"-ны индереп ебәрһәк, беҙҙең телебеҙ теге телдәрҙән бер яғы менән дә айырылмаясаҡ. Николай Константинович Дмитриевтың беҙҙең тел тураһында әйткән шундай һүҙҙәре бар: "Башҡорттар үҙҙәренең "ҙ" өнөн шул тиклем ярата, ул өн - башҡорт телен татар теленән айыра торған төп билдә". Тимәк, ҡасандыр Шәһит Хоҙайбирҙин етәкселегендәге башҡорт әҙәби теленең формаһын билдәләүсе төркөм интуитив рәүештә дөрөҫ юлда торған. Беҙ шуға күрә лә, үҙебеҙҙең һүҙҙәрҙе ҡулланып, әҙәби әҫәрҙәр яҙырға, һөйләшеүебеҙҙәге интонацияларыбыҙҙы юғалтмаҫҡа бурыслыбыҙ.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Әңгәмәсебеҙ хәҙерге ваҡытта киң Рәсәй йәмәғәтселеге яуап эҙләгән мәсьәләне лә асыҡланы, буғай. Үҙ-үҙен, үҙенең тарихын, ата-әсәһен, милләтен яратҡан һәм ихтирам иткән кеше генә башҡаларҙы ярата һәм ихтирам итә ала. Сөнки үҙ-үҙен яратҡан һәм ихтирам иткән кеше үҙенә һәм милләтенә ҡарата башҡаларҙың насар мөнәсәбәтен теләмәй. Шулай түгелме?**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**

✓ *Улар шаҡ ҡатырлыҡ күренештең шаһиты була. Ирек алған меңәрләгән ҡол бер-береһен тапай-тапай йүгереп йөрөп таш ташый. Кисәге һаҡсылар ҙа, ҡолдар менән буталып, таш ташыуға күскән.*



ҺАБАҠТАР



**Владимир Мегренең тайгала йәшәүсе Анастасия тураһындағы һигеҙ китаптан торған әҫәре ваҡытында бик ҙур ҡыҙыҡһыныу уятҡайны. Интернет сайттарында Мегре күтәргән проблемалар буйынса бәхәстәр һаман да дауам итә. Китап магазиндарында ла был китаптар оҙаҡ ятмай, үҙ уҡыусыһын таба тора. Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ, һеҙҙең иғтибарығыҙға ошо әҫәрҙең уйланырға мәжбүр иткәндәй ҡайһы бер өлөштәрен тәҡдим итәбеҙ. Тәҡдим - беҙҙән, фекер - һеҙҙән, тигәндәй, үҙ уйҙарығыҙ менән уртаҡлашһағыҙ, ошондай кимәлдә аралашыуға бик тә шат булыр инек.**

# Демон Кратий

Ҡулдарына шымартылған таш тотҡан эшелеләр яй ғына бер-береһенең артынан атлай. Дүрт шеренгалыҡ ҡолдар теҙеме саҡрымдан ашыу оҙонлоҡҡа һуҙылған. Таш сығарған урындан төҙөлөп ятҡан ҡала-ҡәлғәгә шул тиклем арауыҡ. Ҡайҙа ҡарама, һаҡсылар - һәр ун ҡолға берәү. Бер яҡ ситтә, шымартылған таштарҙан һалынған ун өс метрлыҡ бейеклектәге яһалма тау башында Кратий эш барышын дүрт ай буйына күҙәтеп ултыра. Уны бер кем дә борсомай, уйҙарын бүлмәй. Ҡолдар ҙа , һаҡсылар ҙа үҙ яҙмышына күптән күнгән, ысынбарлыҡты нисек бар, шулай ҡабул итеп өйрәнгәндәр, Кратийға иғтибар ҙа итмәйҙәр. Ә ул үҙ уйҙарына сумған. Дәүләт ҡоролошон шундай итеп үҙгәртергә кәрәк: киләһе мең йыллыҡтарҙа ла Ер шарындағы барлыҡ кешеләр - ҡолдар ҙа, дәүләт башлыҡтары ла жрецтарға хеҙмәт итергә тейеш. Кратий дүрт ай дауамында тик шул турала ғына фекер туплай.

* * *

Тышҡы ҡиәфәте менән үҙен хәтерләткән икенсе берәүҙе ҡалдырып, Кратий тәхетенән аҫҡа төштө, паригын систе, өҫ кейемен алыштырып кейҙе. Һаҡсылар башлығына ҡулдарына бығау һалырға бойорҙо. Хәҙер ул башҡа ҡолдарҙан бер ние менән дә айырылмай ине. Жрец үҙ теләге менән Нард исемле иң йәш, көслө бер ҡолдоң эргәһенә баҫты. Ул күптән инде был егеттең башҡаларҙан айырылып тороуына иғтибар иткәйне. Нардтың ҡарашында ниндәйҙер аңлашылып етмәгән өмөт тойғоһо сағыла, башҡалар кеүек төшөнкөлөккә бирелеп, башын түбән эймәгән. Уның йөҙө ҡайсаҡ үтә уйсан, ҡайсаҡ аңлашылмаған тойғоларҙан балҡып китә. "Тимәк, был егеттең ниндәйҙер маҡсаты бар", тигән фекергә килгәйне Кратий. Әле уйҙарының дөрөҫлөгөн тикшереп ҡарарға булды.

* * *

Ике көн буйына ул Нардты күҙәтте, ашаған ваҡытта ла, йоҡларға ятҡанда ла эргәһендә булырға тырышты. Өсөнсө көндө йоҡларға ятҡас та, Кратий, уфтанып, Нард ишеткәндәй итеп: "Был тормош ғүмер буйы шулай дауам итерме икән ни?" - тине. Йәш ҡол ҡапыл тетрәнде, күршеһе яғына боролоп ятты. Уның күҙҙәрендә ярһыу осҡондар балҡый ине.

- Юҡ, былай оҙаҡ дауам итмәйәсәк. Минең аныҡ планым бар. Һин, бабай, шул маҡсатты тормошҡа ашырыуҙа миңә ярҙам итәсәкһең, - тине ул шыбырлап ҡына.

- Ниндәй план? - тигән булды Кратий, иҫе китмәй генә иҫнәп. Нард ярһып, ышанысլы итеп аңлата башланы:

- Һин дә, мин дә тиҙҙән азат кеше буласаҡбыҙ, ҡоллоҡтан ҡотоласаҡбыҙ. Иҫәпләп ҡарағаның бармы, бер ҡолға ун һаҡсы ҡуйылған. Беҙгә аш бешергән ун биш ҡатын-ҡолға ла бер һаҡсы. Алдан килешеп, бер үк ваҡытта һөжүм итһәк, беҙҙең енеү көн кеүек асыҡ. Беҙҙән ҡулда бығау булһа ла, һаҡсылар ҡоралланған булыуға ҡарамаҫтантан да, енеү беҙҙең яҡта буласаҡ. Әмәлен тапһаң, бығауҙарҙы ла ҡорал урынына ҡулланып була. Һаҡсыларҙы ҡоралһыҙландырып, бығауҙарҙы уларға тағасаҡбыҙ.

- Эх, һин, йәш егет, - тине Кратий, көрһөнөп. - Һинең планың аҙағына тиклем уйланып бөтөлмәгән. Эйе, һаҡсыларҙы ҡоралһыҙландырып була. Әммә хаҡим иртәгә үк улар урынына яҡшыраҡ ҡоралланған яңы ҡәүем ебәрәсәк, баш күтәргән ҡолдарҙы ҡанға сумдырып язалаясаҡ.

- Юҡ, бабай, мин был турала яҡшылап уйлағанмын. Беҙ армия илдән ситтә булған ваҡытта һөжүм итәсәкбеҙ. Был ваҡыт етеп килә. Һиҙәһеңме, гәскәрҙе яңы походҡа әҙерләйҙәр, өс айлыҡ аҙыҡ запасы туплайҙар. Тимәк, өс айҙан гәскәр кәрәкле урынға барып етеп, һуғыш башлаясаҡ. Һөжүм ваҡытында ул хәлһеҙләнәсәк, әммә енәсәк, баҫып алынған халыҡ иҫәбенә ҡолдар һанын арттырасаҡ. Беҙгә нәҡ өс айҙан, һуғыш башланған көндә һөжүм итергә кәрәк. Бындағы боролош тураһындағы хәбәрҙе сапҡындар тик бер айҙан ғына алып барып етерәсәк. Хәлһеҙләнгән армия кире әйләнеп ҡайтҡансы тағы өс айҙан артыҡ ваҡыт үтәсәк. Дүрт ай эсендә гәскәрҙе ҡаршы алыуға беҙ әҙер буласаҡбыҙ - беҙҙең гәскәр хаким гәскәренән кәм булмаясаҡ. Ҡоллоҡҡа төшкәндәр ҙә беҙҙең яҡҡа сығасаҡ.

Мин барын да алдан уйланым, ҡарт.

- Дә, егет, һинең план буйынса, ысынлап та, һаҡсыларҙы ҡоралһыҙландырып, армияны ла еңергә була. Ә артабан ҡолдар ни эшләр ҙә, һаҡсылар, һалдаттар ни ҡылыратыр?

- Әлегә мин был турала төптән уйлағаным юҡ. Әммә ҡолдар ҡабат ҡол булыуҙан ҡотоласаҡ - быны мин яҡшы аңлайым. Элек ҡол булмағандар ҡолға әйләнер, моғайын, - тип, Нард уйының аҙағын ышаныслыһыҙ ғына тамамлай.

- Ә һин еңгәс, жрецтар кем буласаҡ, ҡолмо, әллә ирекмe?

- Жрецтармы? Мин был турала уйлағаным юҡ. Минеңсә, улар әлеге хәлендә ҡалырға тейеш, сөнки жрецтарҙы ҡолдар ҙа тыңлай, уларҙың һүҙенә хакимдар ҙа ҡолаҡ һала. Әлбиттә, уларҙы аңлауы ҡыйын, әммә уларҙан артыҡ зыян юҡ. Әйҙә, Аллалар тураһында һөйләһендәр, ә беҙ үҙ ғүмеребеҙҙе нисек матур итергә үҙебеҙ белербеҙ.

- Әлбиттә, матур тормошҡа бер ни ҙә етмәй, - тип яуаплай хәйләкәр жрец.

* * *

Әммә Кратий был төндә керпек тә ҡаҡмаған. Ул уйға батҡан. "Әлбиттә, егеттең планы тураһында фирғәүенгә хәбәр итеп, уны язаға тарттырырға була, - тип фекер йөрөткән ул. - Әммә был ғына хәлде үҙгәртмәйәсәк, ҡол һәр саҡта ла ҡоллоҡтан азат булыу тураһында хыялланасаҡ. Нард кеүектәр яңынан тыуасаҡ. Тимәк, дәүләт эсендәге хәүеф бер ваҡытта ла бөтмәйәсәк".

Кратийҙың төп бурысы: ерҙәге бар халыҡты буйһондороп, ҡол итеү. Әммә ҡурҡытып, көс менән генә кешене мәңге ҡоллоҡта тотоп булмай. Һәр айырым кешегә, бөтөн халыҡтарға ла йоғонто яһағандай психологик алым уйлап табырға кәрәк. Кешеләрҙең аңын томалап, ҡоллоҡтоң иң ҙур бәхет икәнен уларҙың күңеленә мәңгелеккә һеңдерергә кәрәк. Үҙенән-үҙе үсешкән яңы программа уйлап табып, халыҡтарҙың үсешен Кратий теләгәнсә генә хата юлдан ебәреп, ысынбарлыҡта аҙаштырыу зарур. Жрецтың фекерләү тиҙлеге арта барып, ул хатта ҡулдарындағы бығауҙарын да онота. Һәм ҡапыл, йәшен ялтлағандай, Кратийҙың аңында яңы программа хасил була. Әле ул уның асылына, фекеренең һәр өлөшөнә төшөнөп тә бөтмәй, әммә яңы программа шул хәтлем киң масштаблы булыуын, бөтөн Ер шарын солғап аласағын яҡшы төшөнә ул һәм үҙенең бөтөн ер йөҙөнә хужа буласағын асыҡтан-асыҡ тоя.

* * *

Аяҡ-ҡулы бығаулы килеш һәндерәлә ятҡан жрец үҙ аңының көсөнә үҙе һоҡлана. "Таң һарыһынан ҡолдарҙы эшкә ҡыуған ваҡытта мин һаҡсылар башлығына күҙ ҡыҫасаҡмын. Ул мине ситкә алып китәсәк һәм бығауҙарымды сисәсәктәр. Тыныс ҡына ултырып, мин яңы программаның һәр өлөшөн яңынан уйлап сығасаҡмын һәм кешелек донъяһы бөтөнләй икенсе юлдан китәсәк. Башҡа һыймаҫлыҡ уй бит был! Бары бер нисә һүҙ әйтәсәкмен... һәм бөтөн донъя миңә буйһонасаҡ, минең уйым алдында баш эйәсәк. Аллаһы Тәғәлә, ысынлап та, кешегә Йыһандағы иң гәйәртле көс биргән. Кеше уйынан да көслөрәк нәмә юҡ был донъяла. Тик уйҙы һүҙгә әйләндерә белергә кәрәк. Шул саҡта ғына ул тарих ағышын үҙгәртерлек көскә эйә. Һүҙҙе ваҡытында әйтә белергә лә кәрәк. Иртәгә әйтмәһәм, һуң буласаҡ, сөнки ҡолдар баш күтәрергә әҙерләнә. Ысынлап та, Нардтың планы тормошҡа ашырлыҡ итеп уйланылған. Әммә мин бер кәлимә фекерем менән генә уны ла, уның тоҡомдарын да меңәр йылға ҡол хәлендә ҡалдырасаҡмын". Шулай уйлай Кратий, үҙ фекеренән ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерә.

* * *

Иртәнсәк Кратийҙың ымы буйынса һаҡсылар башлығы уның бығауҙарын сисә. Икенсе көнөнә үк жрецтар башлығы үҙе янында ҡалған биш жрецты һәм фирғәүендә саҡыра. Телмәрен ул былай башлай:

- Хәҙер минең ауыҙымдан сыҡҡан һүҙҙәрҙе бер кем дә яҙып алырға ла, башҡаларға һөйләргә лә тейеш түгел. Һеҙҙән башҡа мин уны бер кемгә лә һөйләмәйәсәкмен. Мин ерҙә йәшәгән бөтөн кешеләрҙе фирғәүенебеҙҙең ҡолона әйләндерәсәк ысул уйлап таптым. Быны күп һанлы гәскәр менән дә, оҙайлы һуғыштар юлы менән дә эшләп булмай. Әммә мин уны бер кәлимә фекер менән тормошҡа ашырасаҡмын.

Артабан Кратий һәр һүҙенә баҫым яһап, телмәрен дауам итә:

- Минең һүҙҙәрҙән һуң ике көн дә үтмәҫ, был донъяның ҡырҡа үҙгәреүенә үҙегеҙ шаһит булырһығыҙ. Ҡарағыҙ, аяҡ-ҡулы бығаулы меңәрләгән ҡол көн һайын таш ташый. Уларҙы бихисап һаҡсы һаҡлай. Беҙ быға тиклем ҡолдар һаны ни тиклем күп булһа, дәүләт тә шул тиклем көслөрәк була, тип уйлай инек. Әммә ҡолдар һаны артҡан һайын дәүләт өсөн уларҙың баш күтәреү ихтималлығы ла арта бара. Көндән-көн беҙ яҡшыраҡ ҡоралланған һаҡсылар һанын арттырырға мәжбүрбеҙ. Ҡолдар файҙалыраҡ эшләһен өсөн уларҙы яҡшыраҡ туйындырырға кәрәк. Шуныһы улар ауыр физик эште башҡара алмаясаҡ. Әммә улар барыбер ялҡау, етмәһә, баш күтәреү тураһында хыялланалар. Хәҙер һаҡсылар ҙа ялҡаулана бара. Ҡарағыҙ, уларҙың ҡулындағы ҡамсылар элеккеүек шыйлап тормай. Әммә минең һүҙҙәрҙән һуң ҡолдар йүгереп йөрөп эшләйәсәк. Иң мөһиме - уларға һаҡсылар ҙа кәрәкмәйәсәк. Һаҡсылар иртәгәнән үҙҙәре ҡолға әйләнәсәк. Быны бер юл менән генә эшләп була. Бөгөн энер төшкән мәлдә һәр кемгә фирғәүендең указын уҡып ишеттерергә кәрәк. Ул былай яңғырай: "Иртәнән башлап бөтә ҡолдарға ла тулы ирек бирелә. Төҙөлөш урынына алып килгән һәр таш өсөн иреклe кешеләргә берәр һум аҡса түләнәсәк. Аҡсаны аҙыҡ-түлеккә, кейем-һалымға, торлаҡҡа, ҡиммәтле һарайҙарға, хатта ҡаланың үҙенә алмаштырырға мөмкин. Иртәнән башлап һеҙ барығыҙ ҙа азат кешеләр".

Кратийҙың телмәрен тыңлап бөткәс, жрецтарҙың иң олоһо былай ти:

- Кратий, һин иблис тоҡомонан. Һинең уйың ерҙә йәшәгән халыҡтарҙы булмышын ҡара һөрөм кеүек ҡаплаясаҡ.

- Ярай, мин демон булайым. Киләсәктә Кратий уйлап тапҡанды демократия тип атаясаҡтар.

* * *

Указдың йөкмәткеһен энер төшкәс, ҡолдарға уҡып ишеттерәләр. Улар үҙ ҡолаҡтарына үҙҙәре ышанмай, шаҡ ҡата. Күптәр төнө буйы йоҡламай, алдағы бәхетле тормош тураһында уйлана, яңы пландар ҡора.

Икенсе көнөнә жрецтар менән фирғәүен шымартылған таштарҙан өйөлгән яһалма тау башына менеп, ни булырын күҙәтә. Улар шаҡ ҡатырлыҡ күренештең шаһиты була. Ирек алған меңәрләгән ҡол бер-береһен тапай-тапай йүгереп йөрөп таш ташый. Хәлләрәктәре хатта икешәр таш күтәргән. Кисәге һаҡсылар ҙа, ҡолдар менән буталып, таш ташыуға күскән. Бығауҙарҙан ҡотолоп, үҙҙәрен ирекле тойған ҡолдар тиҙерәк күберәк аҡса туплап, бәхетле тормош ҡорорға тырыша.

Кратий ҙур ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереп, уй-хыялының нисек тормошҡа ашыуын тағы бер нисә ай күҙәтә. Уйлағаны юш килеүгә ҡыуана ул. Әммә үҙгәрештәр ул уйлағандан да артығыраҡ булып сыға. Йүнселерәктәр төркөмдәргә бүленеп, ташты арбаларға тейәп ташый башлай. Уларҙың хатта яйға туктарға, тамаҡ ялғарға ла ваҡыты юҡ. Шуға күрә аҡса хаҡына һыу ташып эсереүселәр, аш бешереүселәр барлыҡҡа килә. Табиптар ҙа хәҙер үҙ ярҙамын тик аҡса иҫәбенә башҡара, имгәнгәндәргә элеккеләй ярҙам ҡулы һуҙа. Юлдағы хәрәкәтте яйға һалыусы регулировщиктар барлыҡҡа килә. Тиҙҙән тәртип булһын тип, ирекле ҡолдар үҙҙәренә яңы түрәләр, судьялар һайлай башлай. Ирекле кешеләр өсөн был тормошта йәшәүҙең мәғәнәһе үҙгәрә. Йөкмәткеһе лә үҙгәрә, әммә асылы шул килеш ҡала.

Меңәр йылдар дауамында тиргә батып, элекке ҡолдар йүгерә-атлай таш ташый... Уларҙың тоҡомдары мәғәнәһеҙ йүгереүҙе һаман да дауам итә...

✓ *Даими рәүештә ҡурайҙы "башҡорт-татар музыка ҡоралы" тип яҙалар. Был бик ҙур хата һәм төптө ялған. Башҡорт ҡурайы менән татар һыбыҙғыһы - икеһе ике төрлө уйын ҡоралы.*



ИЖАДХАНА

**Үткән йыл аҙағында Баҡы ҡалаһында ТӨРКСОЙ ойошторған "Төрки халыҡтарҙың музыка ҡоралдары" Халыҡ-ара симпозиумы үтте. Унда ТӨРКСОЙ-ҙың ағза-илдәре, АҠШ, Канада, Япония һәм Европа вәкилдәре ҡатнашты. Форумда музыка ҡоралдарының барлыҡҡа килеү һәм уларҙың үҫеше тарихы, башҡарыу оҫталығы, төрки халыҡтары музыка ҡоралдарының оҡшашлығы һәм үҙенсәлеге, композитор ижадында традицион музыка ҡоралдарын ҡулланыу, онотолған музыка ҡоралдарын тергеҙеү һәм һаҡлап ҡалыу мәсьәләләре ҡаралды. Башҡортостандан унда Өфө дәүләт сәнғәт академияһының башҡорт музыкаһы кафедраһы деканы, композитор Айрат Ҡобағошов ҡатнашып, ҡурай буйынса сығыш яһаны. Түбәндә уның менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

# БАШҠОРТ ҠУРАЙЫН...

## һыбыҙғы менән бутау мөмкин түгел



**▸ Айрат Миңләәхмәт улы, былдай сарала беренсе тапҡыр ғына ҡатнашмайһығыҙҙыр, моғайын. Уның Башҡортостан өсөн әһәмиәтен ниҙәлә күрәһегеҙ?**

- Бөтә ғүмеремдә башҡорт халыҡ уйын ҡоралдарын - думбыраны, ҡыл-ҡумыҙҙы тергеҙеүгә һәм үҫтереүгә бағышлаған кеше булараҡ, миңә былдай саралар айырыуса ҡыҙыҡлы. Әлбиттә, төүгә ҡатнашмайым, беренсе тапҡыр 1991 йылда Алматыла уҙған симпозиумда булырға тура килде. Унан һуң ҡаҙаҡтар тәжрибәһе нигеҙендә үҙебеҙҙә күп нәмәләр эшләүгә өлгәштек. Шуға былдай сараларҙың баһаһы әйтеп бөткөһөҙ ҙур, тиер инем. Сөнки аралашып, берберенән нимәләр өйрәнеп кенә ҙур эштәр атҡарырға була. Был сәфәрем элеккегә байҡау, баһа биреү, ниндәй юлда барғанымды билдәләү өсөн яҡшы булды. Дөрөҫ юлда барабыҙ, тип ышанныслы әйтә алам. Симпозиумдың әһәмиәте тағы шунда - үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ғына ҡайнап йәшәргә тейеш түгелбеҙ.Төрки халыҡтарының уйын ҡоралдары бер-берећенә ауаздаш, туған. Мәҫәлән, әгәр беҙ ниндәйҙер уйын ҡоралын тергеҙәбеҙ икән, был инде дөйөм төрки халыҡтары өсөн яҡшы, сөнки ул тағы ниндәйҙер халыҡҡа хас. Әлбиттә, беҙ милли уйын ҡоралдарының ниндәйҙер өлөшөн юғалтҡанбыҙ. Шуға күрә башҡа халыҡтарҙың традицияларын белергә, өйрәнергә, шул нигеҙҙә үҙебеҙҙән боронғо музыка ҡоралдарын, мәҙәниәтте тергеҙергә тейешбеҙ. Тағы шуны әйтер инем, Төркиә менән ныҡыраҡ бәйләнеш урынлаштырырға кәрәк. Сөнки уларҙа музыка фәне Европа йүнәлешендә ныҡ үҫешкән. Беҙгә улар менән аралашыу музыка ҡоралдарын Европа кимәленә сығарырға мөмкинлек бирә, тип уйлайым. Төрөктәрҙе Башҡортостанға саҡырып, үҙебеҙ уларға барып, аралашып йәшәгәндә ҙур-ҙур эштәр атҡара аласаҡбыҙ.

Симпозиумда ҡатнашыусылар барыһы ла, бигерәк тә Төркиә вәкилдәре ҡурай менән бик ныҡ ҡыҙыҡһынды. Улар аша Европаға йүнәлеш алып, беҙ ҙә милли музыка ҡоралдарыбыҙҙы өйрәнеүҙе донъя кимәлендә алып бара аласаҡбыҙ. Уйын ҡоралдарын тәрән, төптән өйрәнгән саҡта уны ерлектән айырырға, ерлеген оноторға ла ярамай, әлбиттә, әммә шул уҡ ваҡытта уны фәнни яҡтан асырға теләйбеҙ икән, Европа кимәлегенән, донъя масштабында өйрәнеү зарур. Шул ваҡытта ғына милли уйын ҡоралдары фәнен юғары күтәрә аласаҡбыҙ.

**▸ Ҡурай ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы, тинегеҙ, ә бына һуңғы ваҡытта төрки халыҡтарҙың ҡайһы берҙәре башҡорт ҡурайын үҙенеке итеп күрһәтергә тырышыуын, үҙләштереүен нисек аңлатырһығыҙ? Ғөмүмән, ҡурайҙы ЮНЕСКО аша башҡорт халыҡ музыка ҡоралы тип донъя мәҙәни мирасы исемлегенә индереү кәрәкмәйме икән?**

- Ундай зарурлыҡ юҡ, тип уйлайым, сөнки ҡурай - башҡорттоң йөҙөн билдәләүсе уйын ҡоралы булараҡ, донъя кимәлендә танылыу юлағын донъя мираҫы. Ҡурай нигеҙендә башҡорттоң моңо быуаттар буйы барлыҡҡа килгән, формалашҡан. Шуға ла ҡурай бары тик башҡорттоҡо ғына, тип ышаныслы әйтә алабыҙ. Әлбиттә, ҡурай тибындағы уйын ҡоралдары башҡа төрки халыҡтарҙа ла бар. Мәҫәлән, төркмәндәрҙә ул - төйҙөк, ҡаҙаҡтарҙа - сыбызғы, абхаздарҙа - ачарпын, адыгейҙарҙа - ҡамыл. Татарҙар татар ҡурайы тип йөрөтә, әммә уларҙың ҡурайы атап үтелгән халыҡтарҙың уйын ҡоралы кеүек үк һыбыҙғы тибында. Ә фәнни телдә ҡурай оҙон асыҡ флейта тип атала. Бөтә был уйын ҡоралдарында ла уйнау тибы бер төрлө булһа ла, һәр ерлектә көйләү урындағы халыҡҡа ғына хас. Мәҫәлән, һыбыҙғы тибындағы уйын ҡоралында башҡорт халыҡ моңдарының аһәңе, драматизмы еренә етмәй, күңелдең иң нескә ҡылдарына барып ҡағылмай.

Үҙләштереү, тигәндән, матбуғат саралары ла, ҡурай тураһында яҙыусы башҡалар ҙа һәр һүҙенә иғтибарлы булһын ине. Сөнки даими рәүештә ҡурайҙы "башҡорт-татар музыка ҡоралы" тип яҙалар. Был бик ҙур хата һәм төптө ялған. Башҡорт ҡурайы менән татар һыбыҙғыһы - икеһе ике төрлө уйын ҡоралы. Был хаҡта оноторға, хаталарға юл ҡуйырға ярамай. Юҡһа, тарих беҙҙе ғәфү итмәҫ.

**▸ Ҡурай эшләү оҫтаһы Вәкил Шөғәйеповтың ҡурай тарихына яңылыҡ индереүенә - ағас шпондан ҡурай етештереүгә юл асыуына нисек ҡарайһығыҙ?**

- Вәкил ағай менән күптән танышбыҙ һәм берлектә эшләйбеҙ. Яңы ҡурай - ҡурай тарихында ҙур яңылыҡ булды. Әлбиттә, ҡурайҙы инкубатор себештәре кеүек ҡуйлап етештереү башланды, әммә мин быға ыңғай ҡарайым. Сөнки һәр кем Ғата Сөләймәнов кеүек, сәхнәгә үҫеп ултырған ҡурайҙы алып килеп, унан тиҙ генә ҡурай яһап уйнай алмай. Хатта йәштәрҙең күбеһе ҡурайҙы белмәй ҙә өлә. Шуға стандартлаштырыу һәйбәт, әммә тәбиғи ҡурай хаҡында ла оноторға ярамай, уны һаҡларға кәрәк.

**▸ Ғөмүмән, үҙегеҙҙең милли музыка ҡоралдары менән ҡыҙыҡһыныуығыҙ нисек тыуҙы?**

- 1970-се йылдарҙа сәнғәт институтында уҡығанда педагогтар, башҡорттоң ҡурайы менән ҡумыҙынан башҡа уйын ҡоралы юҡ, ти торғайны. 1971 йылда Ғата Сөләймәнов сәнғәт училищеһында ҡурай класы асҡайны, аҙаҡ ул сәнғәт институтында асылды. Ныҡ сәмемә тейҙе шул һүҙҙәр. Һуңынан экспедицияларҙа йөрөнөм, башҡа уйын ҡоралдарын таптым. 1989 йылда инде сәнғәт институтында кафедра барлыҡҡа килде. Өс йылдан һуң училищела милли музыка ҡоралдары оркестрын төҙөнөк, дүрт йылдан институтта ла оркестр барлыҡҡа килде. 2001 йылда шул нигеҙҙә үҙебеҙҙең милли музыка ҡоралдары оркестрын ойоштороҡ. 1995-1997 йылдарҙа Халыҡ музыка ҡоралдары үҙәге тигән предприятие ойоштороу концепцияһын төҙөгәйнек. Уға милли оркестр, башҡорт халыҡ уйын ҡоралдары музейы, оҫтахана, тауыш яҙҙырыу студияһы инергә тейеш ине. Әммә ул тормошҡа ашманы, бары тик оркестр ғына төҙөлдө.

**▸ Бөгөн, һеҙҙең ҡүҙлектән ҡарағанда, сәнғәт өлкәһендә ниндәй проблемалар бар?**

- Дөйөм сәнғәтте киң планда ҡарамай, милли музыкаға ҡағылышлыларына ғына туҡталайым. Беренсенән, уйын ҡоралдарын эшләргә оҫтаханалар юҡ. Сәнғәт академияһының оҫтаханаһы ғына ихтыяжды ҡәнәғәтләндерә алмай. Бөгөн бит беҙҙең ҡурай, ҡумыҙ ғына түгел, ҡыл-ҡумыҙ, думбыра һ.б. уйын ҡоралдарыбыҙ билдәле һәм улар эшләнергә, таралырға тейеш.

Икенсенән, уйын ҡоралдары булғас, республиканың барлыҡ сәнғәт училищеларында ҡыл-ҡумыҙ, думбыра кластары булдырылырға тейеш. Был эш бик ҙур ҡыйынлыҡ менән бара. Бынан инде икенсе проблема ҡалҡып сыға - кадрҙарға ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Сәнғәт өлкәһендә эшләүселәрҙең эш хаҡы бик түбән, шуға уларға стимул да юҡ, бары энтузиазм менән генә йөрөйҙәр. Элек сәнғәт әһелдәре юғары баһаланһа, хәҙер сәнғәттең абруйы төштө, хатта музыка мәктәптәренә, училищеларына уҡырға инеүселәрҙе йыйыу ҙур ауырлыҡ менән бара.

Бөгөн минең йөрәгемдә әрнеткән проблемаларҙың тағы береһе - милли оркестрыбыҙҙың башҡарыу оҫталығының бер урында ҡатып ҡалыуы. Үҫеш юҡ. Сағыштырып ҡараһаҡ, академияның милли уйын ҡоралдары оркестры уларҙан бер башҡа юғары тора. Ә бит республика милли оркестрында беҙҙең кисәге студенттар, үҙ эшенең оҫталары йыйылған.

Әммә проблемалар күп тип ҡул ҡаушырып ултырырға ярамай, сәнғәтебеҙҙе тағы ла бейеккәрәк күтәрергә, яңы милли уйын ҡоралдарыбыҙҙы тергеҙергә һәм донъя кимәленә алып сығырға кәрәк.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ
әңгәмәләште.

КИТАБЕННАС

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

Рауил БИКБАЕВ,
Башҡортостандың халыҡ шағиры.

13

Ғәйбәтте кем һөйләһә лә,
Ғәйбәтте кем тыңлаһа ла -
Гонаһтарын уртаҡ итәм.
Ғәйбәт һөйләгән табынды
Фәрештәләр урап үтә.

Тәүбә итһә, зинаның да
Гонаһтары сығыр юҡҡа.
Ғәйбәтсенең ғәйебе бөтмәҫ,
Ғәйбәтсегә юҡ ярлыҡау.

Анау кеше ғәҙел булды,
Эше сауап. Уйы һәйбәт.
Тик барыһын ҡырып һалды
Ауыҙынан сыҡҡан ғәйбәт.

14

Ысын иптәш гүйә һата хуш еҫле май,
Уның менән бер күрешкәс, кем хушһынмай!
Алмаһаң да унан бер ни, нуры балҡый,
Гүйә аңҡый уҫҡа яғылып хуш еҫле май!

15

Хәләл кейһә сепрәк кейем,
Харам кейһә ебәк күлдәк,
Ебәккә һин, һай, һай, алданма.
Ҡулың менән үрелеү түгел,
Күҙең менән үрелер булма
Харам ашҡа, харам малға.

16

Баҫып торған саҡта асыуың килһә,
Ултырып тор асыуың баҫылғансы.
Ултырып та асыуың баҫылмаһа,
Ятып торсо - сығып бөтһөн асыу.

17

Зина - гонаһ.
Бар ағзаңдың
Сафлығын той, һаулығын той.
Ҡул зинаһы - харам малдыр,
Харам малдан ҡулыңды тый.
Тел зинаһы - ғәйбәт һүҙҙер,
Зиһен зинаһы - боҙоҡ уй.

18

Эй көнсөллөк, һаранлыҡ вә тәкәбберлек,
Үндәйҙәрҙең йәне кәрлә, күңеле керле.
Күпме генә лаф орһа ла, ниндәй бәндә
Урап үткән үҙен көткән гүр-ҡәберҙе?
Белһен кеше үҙ самаһын, үҙ ҡәҙерен,
Тәкәбберлек саң-көл булыр хөкөм көндә.

19

Ысындыр: бар шундай ҡолдарым,
Фәҡирлек ныҒытыр иманын,
Уны тик фәҡирлек төҙәтер,
Бай ҡылһам, әйләнер кафырға.

Ысындыр: бар шундай ҡолдарым,
Тик зәхмәт нығытыр иманын.
Уны тик ауырыу төҙәтер,
Һау ҡылһам, әйләнер кафырға.

Ысындыр: бар шундай ҡолдарым,
Тик һаулыҡ нығытыр иманын.
Уны тик таҙалыҡ төҙәтер,
Зәхмәттән әйләнер кафырға.

20

Шәфҡәтленән шәфҡәт эстәгеҙ тим,
Тәрбиәле итһен һеҙҙе шәфҡәт.
Һаҡланығыҙ ҡаты йөрәктәрҙән,
Унда минең асыуым сәсер дәһшәт.
Шәфҡәтемде бирҙем шәфҡәтлегә,
Асыуым - таш бәгерҙә, дәһшәтлелә.

21

Ике тоғро иптәш араһында
Мин өсөнсө тоғро дуҫ булырмын.
Тик берәүһе тоғролоҡтан яҙһа,
Улар араһынан мин сығырмын.

(Дауамы бар).

✓ *Сәскә һутына бал ҡорто үҙенән фермент ҡуша, шуға ла унда химик үҙгәрештәр башлана. Бары тик ошоноң арҡаһында ғына күҙәнәктәрҙә сәскә һуты яйлап балға, ә һеркә һитәгә әйләнә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ХӘТЕРҘЕ...

## сәйәхәт тә яҡшырта

■ Арыған көйө руль артында ултырыу эскән килеш машина йөрөтөүгә тиң, тип белдерә ғалимдар. 3 сәғәт буйы руль артынан тормай елгән водитель юлда оло хәүеф тыуҙыра, сөнки руль артында йоҡлап китеүсе менән иҫерек водитель араһында айырма юҡ. Статистика буйынса юл-транспорт ваҡиғаларының 40 процентында алкоголле эсемлек эскән водителдәр ғәйепле. Әммә үтә ныҡ арыу һөҙөмтәһендә аварияға эләккәндәр араһында иҫәпләү алып барылмау сәбәпле, уларҙың аныҡ ҡына һанын әйтеүе ҡыйын. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр әйтеүенсә, бындай ваҡиғаларҙың һаны 50 процент тирәһен алып тора. Яңы ғына водитель таныҡлығы алыусыларға Британияның Кардифф университеты белгестәре төндә юлға сыҡмаҫҡа кәңәш итә. Ғалимдар фекеренсә, Британияла ғына ошо юл менән йөҙләгән кешенең ғүмерен һаҡлап ҡалырға мөмкин. Иң ҡыҙығы, һәр өсөнсө водитель үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла руль артында йоҡлап китеүе тураһында белдергән. Әгәр ҙә арыу тоя башлаһағыҙ, машинағыҙҙы хәүефһеҙ урынға ҡуйып, 10-15 минут йоҡлап алығыҙ, тип кәңәш итә белгестәр.

■ Донъялағы сифатһыҙ уйынсыҡтарҙың 90 процент тирәһе Ҡытайҙа етештерелә. Уларҙың йә сифатын һәм хәүефһеҙлеген билдәләүсе документтары юҡ, йә санитар-химик, токсикологик күрһәткестәре тап килмәй, йә маркировкаһы дөрөҫ түгел. Шулай уҡ "дөрөҫ булмаған" уйынсыҡтарҙың тауышы ла ҡолаҡты ярып алып бара, ти белгестәр. Магазин кәштәләрендә составында фенолформальдегид кеүек ағыулы матдә табылған уйынсыҡтар ҙа осрай. Бындай уйынсыҡтар балаларҙың тын юлына насар тәьҫир итә, аллергия тыуҙыра.

■ Үҫешкән илдәрҙә йылдан-йыл арта барған сир - артыҡ ауырлыҡтың һалҡын миҙгелдә торлаҡ йорттарҙы артыҡ йылытыуға бәйле булыуы бар, тип белдерә Британия ғалимдары. Лондон университеты хеҙмәткәрҙәре Фиона Джонсон һәм уның коллегелары һуңғы ун йыл дауамында Америка һәм Британия йорттарында йылытыу миҙгеле буйына өй температураһының яйлап күтәрелә барыуын күҙәткән. Һөҙөмтәлә, кешеләр йылы өйҙә үҙҙәрен уңайлыраҡ тоя башлаған, белгестәр әйтеүенсә, тап ошо уларҙың артыҡ ауырлыҡ йыйыуына килтерә лә инде. Баҡтиһәң, өйҙә йәки эштә һалҡынсараҡ булһа, организм йылыныр өсөн артыҡ майҙарҙы тотона, ә йылы бүлмәлә бындай процесс бөтөнләй туҡтап ҡала.

■ Төрлө башватҡыстар сисеү кеше мейеһендә барған ҡартайыу процесын туҡтата ала, тип белдерә Австралия ғалимдары. Өс йыл дауамында 60 йәштән уҙған 70 кешене тикшереп, белгестәр кроссворд яратыусыларҙың Альцгеймер ауырыуы кеүек сирҙәрҙән дә йыраҡ тороуын асыҡлаған. Аҡыл һәләтен һәм әүҙемлеген үҫтермәгән, яңы нәмәләр белергә ынтылмаған кешеләр баш мейеһенең хәтер өсөн яуаплы булған өлөшөнөң 50 процент тирәһен юғалта. Хатта сәйәхәт итеү ҙә ҡартлыҡ сирҙәренән ҡотолорға ярҙам итә, ти ғалимдар. Сит тел өйрәнеү, шиғыр ятлау ҙа яҡшы һөҙөмтәләр бирә.

■ Һауыт-һаба йыуыу саралары кеше сәләмәтлегенә лә, тирә-яҡ мөхиткә лә зыян килтереүен беләбеҙ. Етмәһә, асыҡ көйө оҙаҡ ултырған был матдәләрҙең таҙартыу һәм бактерияларҙы юҡҡа сығарыу тәьҫире лә түбәнәйә икән. Шуға ла Американың Ойаго штаты ғалимдары һауыт-һаба йыуыу сараһының яңы формулаһын уйлап тапҡан. Ул кеше өсөн дә хәүефһеҙ, эсәк инфекцияларын булдырыусы бактерияларҙы ла үлтерә.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...

**Һуңғы ваҡыт солоҡ балының бәһәһы ҡырҡа күтәрелеп китте. Интернетта ла ҡолап китмәле мәғлүмәттәр бар. Кемдәр генә тәҡдим итмәй солоҡ балын. Хатта тонналап һатырлыҡ фирмалар бар. Әммә шуныһы: ҡортсолоҡ үҫешендә солоҡсолоҡ шөғөлө Рәсәйҙә лә, Европала ла тарихта тороп ҡалған баҫҡыс булып иҫәпләнә. Был шөғөлдө бал ҡорттарын умарталарҙа тотоу кеүек күп яҡтан отошло ысул алыштырған. Шуныһы ҡыуаныслы - башҡорт халҡының тырышлығы арҡаһында солоҡсолоҡ шөғөлө тарих биттәрендә бөтөнләй юғалып ҡалманы. Ул бары тик бер генә төбәктә, атап әйткәндә, Башҡортостан Республикаһының Бөрйән районында ғына һаҡланып ҡалған. Әлбиттә, башҡорт халҡы, бигерәк тә Бөрйән башҡорттары, ата-бабаларыбыҙҙың боронғо шөғөлөн һәм солоҡ ҡорттарын һаҡлап алып ҡалыуы менән хаҡлы рәүештә ғорурлана ала. Шуға күрә башҡаларҙың солоҡ балы һатып ятыуы "килделәр ағайҙар аяҡһыҙ, һалдылар күперҙе балтаһыҙ" тигән йомаҡ һымағыраҡ килеп сыға инде.**

# СОЛОҠСОЛОҠ ШӨҒӨЛӨ ТАРИХТА ҺӘМ...

## Бөрйәндә генә тороп ҡалған

Элек күптәр солоҡ тураһында, бигерәк тә солоҡ балы тураһында артыҡ белмәй ине. Бындай бал һатыуҙа ла булманы. Заман башҡа, заң башҡа, тигәндәй, реклама үҙ эшен эшләйҙер инде. Солоҡ балының төп үҙенсәлеге нимәлә, умарта балынан ул нимәһе менән айырыла - хәҙер был һорауҙы күптәр бирә. Өмөт менән төбәлгән күҙҙәр иҫ китмәле яуап, мөғжизә көтә. Һорау ябай, ләкин ҡапыл ғына, бер һүҙ менән генә, яуапты биреп тә булмай. Шулай ҙа эштең айышына төшөнөп ҡуяйыҡ.

Тәүтормош кешеһе был нәҙекәйбилдәрҙе бал (мед) ташый тип уйлай. Шуға күрә исеме есеменә тура килһен тип уны бал ҡорто (пчела медоносная) тип атай. Әммә бал ҡорттары бал йыймай шул. Сәскәләрҙән улар уның һутын (нектар) һәм һеркәһен (пыльца) йыя. Һутты томшоҡҡа (хоботок), ә инде һеркәне аяҡ быуынындағы кәрзингә ("корзиночка") йыйып ояға ташыйҙар. Сәскә һуты һәм һеркә үҫемлектән кәрәҙҙәге (соты) күҙәнәктәргә (ячейка) күсеүҙән генә үҙенән үҙе балға йә һитәгә әйләнмәй. Уны тәмле аҙыҡҡа бал ҡорттары әйләндерә. Был эш ошолай башҡарыла. Аҙыҡ ташыусы бал ҡорттары "тауарҙарын" кейәлә (леток) тапшырып, сираттағы "рейсҡа" осалар. Сәскә һутын оя эсендә эшләүсе ҡорттар ҡабул итеп ала һәм күҙәнәктәргә тултыра. Бындай эш бүленеше ҡорт ғаиләһе өсөн отошло - ҡырҙа эшләгән эшсе ҡорттар (летные пчелы) ҡайһы күҙәнәк буш икәнен ҡайҙан белһен дә, үҙ сиратында, ояла эшләүсе йәш ҡорттар (нелетные пчелы) ҡырҙа ниндәй үлән сәскә атҡанын ҡайҙан белһен? Сәскә һутына бал ҡорто үҙенән фермент ҡуша, шуға ла унда химик үҙгәрештәр башлана. Бары тик ошоноң арҡаһында ғына күҙәнәктәрҙә сәскә һуты яйлап балға, ә һеркә һитәгә әйләнә. Шуныһы айырым иғтибарға лайыҡ: балдың өлгөрөп етеүен бал ҡорттары һәр ваҡыт тикшереп тора. Балдың тамам өлгөрөүенә ҡарап һәр күҙәнәк айырым көпләнеп бара. Башҡа тоҡом ҡорттарынан айырмалы рәүештә беҙҙең ҡорттар көпләгән ваҡытта бал менән "ҡапҡас" араһында бушлыҡ ҡалдыра. Шуға күрә тулы баллы кәрәҙ ситтән ҡарағанда аҡ булып күренә (белая печатка меда). Һеркә бал менән көпләнә.

Көпләнгән бал һәм һитә тамам өлгөрөп еткәнсе кәрәҙҙәрҙә һаҡлана. Ул тамам өлгөрөп еткәс, көҙгө тикшереү ваҡытында, солоҡсо был тәмле аҙыҡты ағас бысаҡ менән ҡырҡып ала. Ҡорт ғаиләһенең көсөнә ҡарап, иң тәүҙә уға етерлек аҙыҡ ҡалдыра, ә инде артҡанын үҙенә ала. Солоҡ балы күп булмай, яҡынса уртаса бер ғаилә 10 кг-ға тиклем бал биреүе мөмкин.

**Тәүге һығымта:** солоҡ балы йылына бер тапҡыр ғына алына, ул иң өлгөргән бал булып иҫәпләнә.

* * *

Балды ҡасан кеше тәмләп ҡарағандыр инде, билдәһеҙ. Әммә ул бал хәҙерге беҙ ҡулланған балдан бөтөнләй айырыла. Бөгөн солоҡсо оянан кәрәҙҙе балауыҙы, балы һәм һитәһе менән бергә ҡалаҡ-бысаҡ (кленовая палка для отбора бортевого меда) менән ҡырҡып ала. Ҡырҡып ала бара, уны күнәсеккә (посуда из липы, применяемая при отборе бортевого меда) һала бара. Күнәсекте ергә төшөргәс, уны батманға (посуда из липы для перевозки меда) күсерә. Батманда бешкәк (кленовая палка для уплотнения меда) менән ныҡ итеп бутап тығыҙлай - ошондай кәрәҙле-баллы-һитәле бал солоҡ балы тип атала ла инде. Өйгә алып ҡайтҡас, солоҡ балын батмандан көбөгә (посуда из липы для хранения меда) күсерә. Байрамдар яҡынлашыу менән (ҡайһы ваҡыт уға ла ҡарап тормай) солоҡ балының күмпелер өлөшө тәпәнгә (посуда из липы для приготовления медовухи) күсеп китеүе лә бик ихтимал. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: бар бал һауыттары йүкәнән эшләнә, улар бары күләме менән айырыла.

**Икенсе һығымта:** солоҡ балы ул кәрәҙле-баллы-һитәле бал, солоҡсо үҙ эшендә ағастан эшләнгән ҡорамалдар ҡуллана.

* * *

Тәү тапҡыр кеше, бәлки, айыу туҙҙырып киткән күстең балын тәмләп

КҮРКӘМ ҒӘҘӘТТӘР

# МАҠТАРҒА ӨЙРӘН ҺӘМ...

## маҡтағанды тыңлай бел

**Кешене маҡтау күңелле лә, файҙалы ла. Һин быны эшләй алаһыңмы? Юҡ? Улайһа өйрән! Кемдең генә үҙе тураһында йылы һүҙ ишеткеһе килмәй икән. Үкенескә күрә, беҙҙең барыбыҙ ҙа комплимент әйтә белмәйбеҙ шул. Ә күптәр уны бөтөнләй артыҡ тип һанай һәм ярамһаҡланыу менән бутай. Был дөрөҫ түгел...**

■ Комплиментһыҙ аралашыу - һөйөүеңде белдермәйсә яратыуға тиң. Йылылыҡ һәм сағыулыҡ етмәй.

■ Үҙенең ниндәйҙер ыңғай сифаттары йәки һәләте, йә булмаһа яңы сәс үреме йәки күлдәге тураһында маҡтау һүҙҙәре ишетеү һәр кемдең күңеленә май булып яғыла. Ошондай күркәм үҙгәрештәргә иғтибар итмәй ҡалыуҙан да ҡурҡынысыраҒы юҡ. Ә комплимент - һиңә иғтибар бүлгәндәренең, һинең улар араһында булыуың һәм лайыҡлы баһаланыуыңды белдергән билдә.

■ Йылы һүҙҙәр - яҡшы мөнәсәбәт күрһәткесе. Был комплиментты ялағайланыуҙан айыра: уның нигеҙендә кешегә яҡшылыҡ эшләү теләге ята, ә хәйлә ҡорорға тырышыу түгел.

■ Комплимент әйткән кешегә был әңгәмәне ялғап алып китеү йәки үҙенең яҡшы эмоциялары менән бүлешеү мөмкинлеге бирә.

■ Үҙеңдең башҡалар менән һоҡланыуыңды белдерергә өйрәнеп, һин үҙ-үҙеңә ышанысты арттыраһың. Юҡҡа ғына комплимент эшләй белеүсе кеше уларҙы ҡабул итә лә белә бит.

### Кәйеф сере

Кемгәлер матур һүҙ әйтеп, һин әңгәмәсеңә лә яҡшылыҡ эшләйһең, шулай уҡ үҙеңдең күңелеңде күтәрәһең. Комплименттар яһау сәңғәтенә нисек өйрәнергә?

**Комплимент яһауҙың беренсе шарты - ихласлыҡ!** Әгәр кешене маҡтарға теләһәң, был сәбәп һиңә ысынлап та оҡшарға тейеш. Ҡайһы бер арттырып ебәреүҙәр килешмәй, шулай уҡ алдашырға ла ярамай. Ярҙамсыл кешегә "Һин фәрештә!" тип әйтергә мөмкин, ләкин изгелегенә шикләнгән кешегә был һүҙҙәрҙе әйтмәүең яҡшыраҡ.

**Икенсе шарт - комплименттарҙы урынлы ҡулланыу.** Урынһыҙ ҡулланылған һоҡланыуҙың шатлыҡ алып килеүе

ҡарағандыр, бәлки, үҙе тапҡандыр. Был асылмаған сер булып ҡалыр. Әммә уның күнеләнә бал төменең хуш килеүе бәхәсһеҙ. Минең уйымса, мөгжизә, бәлки, шул мәлдән башланғандыр - кеше ҡорт ғаиләһенән мөмкин тиклем күберәк бал алыу теләге менән яна башлай. Бал ҡортонан тәмле аҙыҡ алыу өсөн нимә генә уйлап сығармай ул. Тәү осорҙа кеше ағас ҡыуышлығында (естественное дупло) йәшәп ятҡан ҡыр ҡорттарын (дички) туҙҙырып, күсте үлемгә дусар итеп, балын тартып ала. Әммә эҙләп табылған күстәрҙән бал алыу (примитивное бортничество) кешенең ихтыяжын тулыһынса ҡәнәғәтләндермәй, сөнки был исул ышанысһыҙ булып иҫәпләнмәй. Тора-бара ул күсте нисек тә булһа һаҡлап алыу яғын уйлай башлай. Тере күстәр уға күберәк файҙа килтереүен аңлап эш итә кеше. Бал ҡорттары ағас ҡыуышында йәшәүен иҫәпкә алып, үҙе ағасҡа соҡоп оя (борть - искусственное дупло) эшләп ҡарай. Бал ҡорттары бындай ҡыуышты үҙ итә, күстәр уға ҡуна башлай. Ошолай солоҡсолоҡ (бортевое пчеловодство) шөғөлө барлыҡҡа килә. Яйлап солоҡсолар бал ҡортоноң йәшәү серҙәренә төшөнә бара. Һөҙөмтәлә күстәрҙе урмандан өй эргәһенә күсереү мөмкин икәнен аңлайҙар. Тәү осоро, бәлки, кеше йығылған солоҡ ағасын түмәр һымаҡ бысып уны урманда күтәреп ҡуйғандыр. Ошондай ояла ла бал ҡортоноң йәшәүен күреп, түмәр-ояларҙы үҙенең өйө эргәһенә күсергәндер. Ошолайтып солоҡсолоҡҡа алмашҡа бал ҡорттарын түмәр умарталарҙа тотоу ысулы (колодное пчеловодство) килә. Ә хәҙер инде барлыҡ ерҙә бал ҡорттары умарталарҙа (пасечное пчеловодство) йәшәй. Әммә заман умарталығында "мөгжизә" бар - хәҙер балға кеше хужа. Кеше ҡасан бал кәрәк булһа, шул ваҡытта уны тартып ала ла ҡуя. Сәскә һуты балға әйләнгәнме, әйләнгәне өлгөрөп еткәнме - унда кешенең эше юҡ. Ни тиклем "бал" күберәк, шул хәтлем килем дә күберәк. Етмәһә, был балға һитә лә йүнләп эләкмәй.

**Өсөнсө һығымта:** бал ҡорто тотоу ысулдары үҫешкән һайын балдың сифаты ҡырҡа үҙгәрә.

* * *

Ә хәҙер солоҡ балы менән умарта балының сифатына һәм составына иғтибар итәйек. Бында солоҡ ҡорттары өҫтөнлөктө бирмәй. Йәйрәп ятҡан урман киңлегендә улар рәхәтләнеп йөрөп, үҙҙәре теләгән үҫемлектән һеркә һәм сәскә һуты йыя. Бал ҡорттарының иғтибарын йәлеп итер өсөн үҫемлектәр араһында ярыш (конкуренция) бара - төрлө төҫтәр, матур таждар, бейегерәк үҫеү, төрлө ваҡытта сәскә атыу, һ.б. Тәбиғәттә барыһы ла уйланылған, иҫәпкә алынған. Иғтибар итегеҙ: беҙҙең өйрәнеүҙәр буйынса, Бөрйән солоҡ ҡорто 98(!) төрлө үҫемлектән аҙыҡ йыя.

Умарталыҡта эш күпкә мөшкөл - бал ҡорттары кеше алып килеп ултыртҡан ғына ерҙән, күп осраҡта культуралы үҫемлектәрҙән генә (ҡарабойҙай, көнбағыш, донник, һ.б.), аҙыҡ тупларға мәжбүр. Етмәһә, бер урынға тупланған йөҙәр баш күс бер-береһенә ҡамасаулай-ҡамасаулай эшләй. Күстәр араһында урлашыу көслө. Ауырыуҙар тиҙ тарала. Уларға ҡаршы төрлө химик дарыуҙар ҡулланыла. Өлгөрөп етмәгән бал ағыҙып алына. Һанай китһәң, хатта ҡурҡыныс булып китә. Әммә заман кешеһе ошо аҙыҡты бал тип ҡабул итеп өйрәнгән.

**Дүртенсе һығымта:** боронғо солоҡ балы менән хәҙерге умарта балы араһында айырма шул хәтлем ҙур, хатта уларҙы сағыштырып та булмай. Минеңсә, солоҡ балы юғары сифатлы һәм составлы, ә умарта балы өлгөрөп етмәгән аҙыҡ булып ҡаласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйткем килә: ысынлап та, тотош Рәсәй буйынса бары беҙҙә генә һаҡланып ҡалған Бөрйән солоҡ ҡорто һәм балы оло хөрмәткә лайыҡ. Беҙ уны һаҡларға бурыслыбыҙ. Әммә бөгөн борсолорға урын бар. Был борсолоуҙар урынлымы, әллә уйҙырмалар күберәкме - был турала айырым һөйләшергә кәрәктер.**

**Әғләм ШӘРИПОВ,
биология фәндәре
кандидаты.
Бөрйән районы
"Шүлгән-Таш" ҡурсаулығы.**



икеле, киреһенсә, был кешене ярһытырға мөмкин. Күҙ алдына килтереп ҡара: һинең эшең күп, башыңды ла ҡалҡыта алмай, ҡағыҙ эштәре менән булышаһың. Шул ваҡыт янына ахирәтең килеп, һинең прическаңдың иҫ киткес матур булыуы тураһында әйтә. Был комплимент һине шул тиклем ҡыуандырыр инеме?

**Өсөнсө шарты - комплименттың үҙенсәлекле булыуы.** Тәжрибәле күңел әүрәтеүселәрҙең шундай ҡағиҙәһе бар: матур ҡыҙҙы аҡылы, ә аҡыллы ҡыҙҙы матурлығы өсөн маҡта.

Бер төрлө комплименттар туйҙыра. Тауышының иҫ киткес матур булыуы тураһында көн һайын ишетеп тороусы йырсыға үҙенең бешеренеү һәләтлектәре тураһында ишетеү нығыраҡ күңеленә ятыр ине. Ә кем дә булһа оҫта тегенселә шиғри һәләттәр барлығына иғтибар итһә, уға шул тиклем ҡыуаныс буласаҡ.

**Дүртенсе мөһим һыҙат - ҡыҫҡалыҡ.** Уҙған быуаттағы аристократтарҙың ҡабарынҡы маҡтау телмәрҙәрен ҡалдыр - улар был сәнғәткә бала саҡтан өйрәнгән. Бигерәк оҙон комплимент яһағанда һинең фекерҙәрең таралыуы, уйҙарың сыуалыуы ихтимал.

**Бишенсеһе - бер мәғәнәгә эйә булһын.** Ишеткәс тә бының маҡтау һүҙеме, әллә кәмһетеү һүҙе булдымы икәнлеген айырып булмаған ике мәғәнәгә эйә лаҡаптар бар. Һәм хатта бер ҡалыпҡа һалынған: "Калай һин бөгөн матур күренәһең!" комплименты ла, "Бөгөн генә шулай күренәмме икән?" тигән һорауҙы тыуҙырырға сәбәп булыуы ихтимал. Шуға күрә, "Матурһың!" тигән кеүек һүҙҙәрҙе ҡулланыу күпкә уңайлыраҡ булыр. Бәйләнергә урын ҡалмай.

## Шаяртып һәм етди

Үҙенең һоҡланыуын кеше туранан-тура белдерергә мөмкин. Йәғни, һин үҙенә оҡшағанды нисек бар, шулай әйтәһең. Шулай ҙа бындай комплименттар, әгәр һин әңгәмәсеңде насар беләһең икән, урынһыҙ булыр, ул һинең һүҙҙәреңде ялағайланыу тип ҡабул итеүе ихтимал. Ә һоҡланыуҙы ситләтеп әйтеү кешенең үҙе тураһында түгел, ә һинең уға ҡарата мөнәсәбәтеңде белдерә. Үҙеңдең етәксеңде иң яҡшы етәксе тип әйтергә уңайһыҙланаһыңмы? Улайһа, уның ҡулы аҫтында эшләүе нисек еңел икәнлеген әйт. Шаян комплименттарҙы хатта иң оялсан кешеләр ҙә еңел ҡабул итә. Йылмайып ҡына: "Ниндәй ҡош шулай матур һайрай? Ә был беҙҙең Гөлкәй моңлана икән!" - тип әйт, шунда уҡ ахирәтеңдең күңеле күтәрелер. Һөйләмеңә бер аҙ хупламау ҙа ҡушып ебәр, киҫкен ҡапма-ҡаршылыҡта һинең маҡтау һүҙҙәрең тағы ла сағыуыраҡ яңғыраясаҡ: "Бөгөн һин гәҙәттәгесә түгел, ә күпкә яҡшыраҡ күренәһең!"

Комплимент эшләй белеү генә түгел, уларҙы ҡабул итә белеү ҙә мөһим. Һин кемдәрҙе маҡтағанда ул аяуп итеп уңайһыҙлана йәки аҡлана башлаһа, һиңә рәхәт булыр инеме? Улай итергә ярамай. Рәхмәт белдер. Комплименттарҙы йылмайыу менән яуап биреүселәргә әйтеү күңеллерәк бит.

УҢЫШ ҠАҘАН

# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Тормошоғоҙға яҡтылыҡ индерегеҙ

**Көндәлек тормошоғоҙҙа тойған үҙгәреш шунан ғибәрәт: һеҙ кешеләргә, хайуандарға йылыраҡ мөнәсәбәттә буласаҡһығыҙ. Әгәр быға тиклем үрмәкселәргә ҡарата ерәнеү тойғоһо кисерһәгеҙ, ҡапыл был хистең кәмеүен һиҙерһегеҙ. Әгәр әлегәсә эттәрҙән ҡурҡһағыҙ, уларға ығымлыраҡ була башлаһығыҙ. Хатта быға саҡлы башҡалар һыу ҡойған гөлдәрҙе тәрбиәләргә тотоноуығыҙ ҙа ихтимал. Быларҙың барыһы ла һеҙҙең Илаһҡа яҡынайыуығыҙҙы, тормоштоң берлеген яҡшыраҡ аңлай башлауығыҙҙы раҫлай.**

Бынан бик күп йылдар элек хайуандарҙы өйрәтеүсе Дж. Аллан Бун Голливуд өсөн дрессировкаланған йәнлектәр әҙерләүен үҙенең китабында бәйән итә. Стронгхарт атамалы эттән ул үҙе теләгән һөҙөмтәне бер нисек тә ала алмай. Эт бер нәмә лә өйрәнергә теләмәй. Бында уның насар уҡыусы булыуы роль уйнамай, ул бары тик өйрәнергә теләмәй, үҙенә күрә бойондороҡһоҙ була. Бер ваҡыт кисен Бун үләнле түбәләскә ултырып, ҡояш байығанын күҙәтә. Эргәһендә бәйле торған Стронгхарт та була. Ҡапыл ул эттең дә ҡояш байыуына иҫе китеп ҡарағанын күрә. Уның эткә ҡарата булған асыуы бер аҙ һүрелә. Матурлыҡты күрә белгән эт насар була алмай, тип уйлай ул. Икенсе көнөнә Стронгхартты алыштырып ҡуяларымы ни! Ул нимә ҡушалар, шуны үтәй. Йүнһеҙ эттән ул иң яҡшы уҡыусыға әүерелә. Бун аптырашта ҡала. Эткә нимә булған һуң? Уйлай торғас, ул шундай фекергә килә: эт менән бергә ҡояш байыуын күҙәтеп, ул хайуанды ғәфү итә, уның менән берҙәмлек тойғоһо уяна.

Күпмелер ваҡыт үткәс, Бун тауҙарға - индеецтар эргәһенә бара. Улар ҡырағай аттарҙы менгегә өйрәтә белгән була. Бун бер индеецтың нисек итеп башын эйеп, ат эргәһенә барыуын күҙәтә. Уның аптырауына күрә, ат индеецҡа һыртына ултырырға һәм менеп йөрөргә рөхсәт итә. Индеец кире килгәс, Бун унан баш эйеүҙең нимә аңлатҡанын һорай. "Мин атты күҙ алдыма килтерҙем, уны бер туған ағайымды яратҡан кеүек яраттым, унан менеп йөрөргә рөхсәт һораным", - ти. Тиҙҙән Бун үҙе лә был тәжрибәне ҡабатлай.

Артабан Бун йыландарға осрай, әммә уларға ерәнеп, ҡурҡып түгел, ә мөхәббәтле күҙҙәре менән ҡарай һәм улар уға юл бирә.

Өйҙә, ҡырынған ваҡытта бер себен маҙаһына тейә, һәм Бун унан тәҙрә тупһаһына ултырыуын һорай. Себен уның ҡушыуын үтәй. Хәҙер инде ул себен менән дә уртаҡ тел таба. Ул уны тотоп ҡарай ала һәм уға Фредди тип исем ҡуша. Себен йорттоң бер ағзаһына әүерелә.

Бун: "Үҙемде Йыһан Аңы тип тойоу еңелләште... Беҙ - ҙур йыһан оркестрының ағзалары. Ә унда көй матур яңғыраһын өсөн һәр инструменттың булыуы һәм гармониялы яңғырауы кәрәк", - тип яҙа.

Быларҙан һуң Бун ҡараңғылыҡтағы кешегә оҡшағанмы? Стронгхарт менән булған осраҡтан һуң ул оло асышҡа юлыға. Ә тиҙҙән эт Голливуд йондоҙона әүерелә.

**Роберт СТОУН.**



## 7 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Талисмания. Сочи-2014. Начало"
21.40 "Доктор Тырса", 21-я серия
22.40 "Спецрасследование"
23.40 "Ночные новости"
00.00 "Следствие по телу", 1-я серия
00.50 "Аквамарин"
02.50, 03.05 "Патруль времени: Берлинское решение"
03.00 Новости
04.20 "Хочу знать"

## РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Гибель адмиралов. Тайна одной авиакатастрофы"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Русский шоколад". Сериал
12.50 "Маршрут милосердия". Сериал
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 246-я серия
17.55 "Все к лучшему", 16-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 87-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вкус граната", 1-я, 2-я и 3-я серии
23.45 "Дежурный по стране"
00.50 "Вести+"
01.10 "Честный детектив"
01.45 "Уайатт Эрп". Драма

## НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Ментовские войны". "Образ врага". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Прощай, "Макаров"! "Золотая фишка", "Испорченный отпуск". Криминальный сериал
21.30 "Зверобой-2". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.45 "До суда"
02.45 "Суд присяжных"
04.00 "Детектив Раш". Сериал

## БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр. "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Царь горы"**
**15.30 "Миллион лет до нашей эры"**
**16.00 "Мистер и миссис Смит"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать!"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 "Мистер и миссис Смит"**
**01.15 "Прогноз погоды"**

## 8 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Доктор Тырса", 22-я серия
22.20 "Чудеса исцеления"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь глядя". Ток-шоу
00.50 "Омен". Триллер
02.50, 03.05 "Декамерон"
03.00 Новости

## РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Русский шоколад"
12.50 "Маршрут милосердия"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 247-я серия
17.55 "Все к лучшему", 17-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 88-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вкус граната", 4-я, 5-я и 6-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Флаги наших отцов".
02.45 "Закон и порядок"
03.45 "Большая любовь-3"

## НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Ментовские войны". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Прощай, "Макаров"!" "Ночной странник", "Конкурс красоты". Сериал
21.30 "Зверобой-2". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Следопыт". "По следам человека". Детектив
01.35 "Кулинарный поединок"
02.35 "Суд присяжных"
04.00 "Детектив Раш"

## БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр. "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Шэп арба"**
**15.30 "Миллион лет до нашей эры"**
**16.00 "Пятеро детей и волшебство"**
**17.30 "Тэмле"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.30 Новости (на русс. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать!"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Деньги к деньгам"**
**21.30 Новости (на русс. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Криминальный спектр"**
**23.15 "Пятеро детей и волшебство"**
**00.45 "Прогноз погоды"**

## 9 ФЕВРАЛЯ СРЕДА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.10 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
20.30 "Время"
21.00 Футбол. Товарищеский матч. Сборная России - сборная Ирана. Прямой эфир из Абу-Даби (ОАЭ)
23.00 "Доктор Тырса", 23-я серия
23.50 "Ночные новости"
00.10 "Среда обитания"
01.20 "Игры разума". Биографическая драма
03.50 "Жизнь на Марсе"

## РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Последняя гастроль Джо Дассена"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Русский шоколад"
12.50 "Маршрут милосердия"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 248-я серия
17.55 "Все к лучшему",18-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 89-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вкус граната", 7-я, 8-я и 9-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "АРН: королевство в конце пути". Приключения
02.40 "Закон и порядок"
03.35 "Большая любовь-3"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

## НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Профессия - репортер"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Ментовские войны". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Прощай, "Макаров"!". Сериал
21.30 "Зверобой. Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Следопыт". "По следам человека", 3-я и 4-я серии
01.35 "Квартирный вопрос"
02.40 "Суд присяжных"
04.05 "Детектив Раш". Сериал

## БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр. "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15, 19.00 "Истории"**
**12.30, 20.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Зеркальце"**
**15.30 "Миллион лет до нашей эры"**
**16.00 "Девушка с жемчужной сережкой"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать!"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 "Девушка с жемчужной сережкой"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 10 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Доктор Тырса", 24-я, закл. серия
22.20 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Судите сами" с Максимом Шевченко"
00.50 "Сыщик". Триллер
02.30, 03.05 "Мыс страха". Триллер
03.00 Новости

## РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Русский шоколад"
12.50 "Маршрут милосердия"
13.45, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 249-я серия
17.55 "Все к лучшему", 19-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 90-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вкус граната", 10-я и 11-я серии
22.50 "Поединок"
23.50 "Вести+"
00.10 "Мужская интуиция"
02.20 "Закон и порядок"
03.15 "Тайна дипломата № 1. Андрей Громыко"
04.15 "Городок"

## НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайные происшествия"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Особо опасен!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Ментовские войны". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Прощай, "Макаров"!"
21.30 "Зверобой. Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Следопыт". "По следам золотого коня", 1-я и 2-я серии
01.35 "Дачный ответ"
02.40 "Суд присяжных"
04.00 "Детектив Раш"

## БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр. "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Секунда до…"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Экиэт китабы"**
**15.30 "Миллион лет до нашей эры"**
**16.00 "Домовой"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать!"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 "Домовой"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 11 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.15 "Женский журнал"
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо"
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "ДОстояние РЕспублики"
23.30 "Дом солнца". Мелодрама
01.20 "Елизавета". Историческая драма
03.40 "Всю ночь напролет"

## РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15, 04.05 "Мой серебряный шар"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Русский шоколад"
12.50 "Маршрут милосердия". Сериал
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 250-я серия
17.55 "Все к лучшему", 20-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 91-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вкус граната", 12-я и 13-я серии
22.50 "Девчата"
23.45 "Юбилейный концерт Хора Турецкого"
00.55 "Однажды в Голливуде"
03.00 "Горячая десятка"

## НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Суд присяжных: главное дело"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.50 "Ген всевластия"
22.10 "НТВшники"
23.10 "Москва. Осень. 41-й
00.40 "Женский взгляд"
01.25 "Ой, мамочки". Комедия
03.25 "Суд присяжных"
04.25 "Детектив Раш". Сериал

## БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Сеунда до…"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр", "Гора новостей" и другие"**
**11.30 "Йома"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Секунда до…"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Цирк"**
**15.30 "Миллион лет до нашей эры"**
**16.00 "Свадьба"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.30 Новости (на русск. яз.**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать!"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Деньги к деньгам"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Криминальный спектр"**
**23.15 "Свадьба"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 12 ФЕВРАЛЯ СУББОТА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.20, 06.10 "Москва - генуя"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.15 "Смак"
10.50 "Вкус жизни"
12.20 "Среда обитания"
13.20 "Моя родословная"
14.10 "Посвящается Стелле". Драма
15.50 "Россия от края до края"
16.40 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
17.50 "Белая ночь, нежная ночь..." 2 серии. Мелодрама
19.50 "Минута славы"
21.00 "Время"
21.15 "Минута славы. Продолжение"
21.50 "Прожекторперисхилтон"
22.30 "Детектор лжи"
23.30 "Воображариум доктора Парнаса". Приключения
01.40 "На краю рая"
04.00 "Жизнь на Марсе"

## РОССИЯ 1
05.00 "Молодая жена"
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок"
10.05 "Дела и люди"
10.30 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Честный детектив"
12.20 "Судьбы загадочное завтра"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Судьбы загадочное завтра"
16.10 "Субботний вечер"
18.10 "Шоу "Десять миллионов"
19.10 "Наследница". Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Наследница". Продолжение
23.45 "Малахольная". Мелодрама
01.45 "Расплата"
03.50 "Венок из ромашек"

## НТВ
05.10 "Место под солнцем"
07.05 "Шайбу, шайбу". Мультфильм
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Их нравы"
09.25 "Живут же люди!"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.20 "Особо опасен!"
14.00 "Таинственная Россия"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Последнее слово"
17.30 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа "Максимум". Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.55 "Музыкальный ринг НТВ". Супербитва
00.15 "От заката до рассвета". Триллер
02.20 "Наказание. Русская тюрьма вчера и сегодня"
03.25 "Приключения двух итальянцев в России"
04.30 "Детектив Раш". Сериал

## БСТ
**07.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**07.15 "Салям"**
**08.00 "Дарю песню"**
**10.00 "Легенда о Хуа Мулан"**
**11.30 "Тамыр" представляет"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Надо знать!"**
**14.00 "Одиноким предоставляется общежитие"**
**15.30 "Орнамент"**
**16.30 "Народная музыка"**
**16.40 "Суперматч за Кубок Вызова-2011"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Следопыт"**
**22.30 "Нескучное кино**
**00.15 "Свидание с джазом"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 13 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.50, 06.10 "Эрагон"
06.00 Новости
07.50 "Армейский магазин"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.15 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.20 "Фазенда"
12.15 "КВН. 50 виртуальных игр"
13.10 "Апостол", 5-8 серии. Военная драма
16.50 "Анна Герман. Эхо любви"
19.00 "V центурия. В поисках зачарованных сокровищ". Приключения
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Какие наши годы"
23.30 "Познер"
00.40 "Вавилон нашей эры"
02.30 "Фотограф"
04.20 "Хочу знать"

## РОССИЯ 1
05.35 "Испытательный срок"
07.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.00 "Сам себе режиссер"
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Местное время. Вести-Башкортостан". События недели"
10.40 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Судьбы загадочное завтра"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Судьбы загадочное завтра"
15.10 "Смеяться разрешается"
17.10 "Танцы со Звездами". Сезон-2011"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Обет молчания". Мелодрама
23.00 "Специальный корреспондент"
00.00 "Два веселых гуся"
00.30 "Центурион". Приключения
02.30 Сыновья". Драма

## НТВ
05.25 "Место под солнцем"
07.20 Мультфильмы
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
11.00 "Дело темное"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Бомжиха". Мелодрама
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "Хозяин". Криминальная драма
23.55 "Нереальная политика"
00.25 "Авиаторы"
01.00 "Дюплекс". Комедия
02.45 "Наказание. Русская тюрьма вчера и сегодня"
04.00 "Детектив Раш". Сериал

## БСТ
**07.00 Новости (на русск. яз.)**
**07.15 "Салям"**
**08.00 "Дарю песню"**
**10.00 "Тамыр представляет…"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Истории"**
**14.00 "Горец-2"**
**16.00 "Дорога к храму"**
**16.30 "Народная музыка"**
**17.00 "Невеста и предрассудки". Комедия**
**19.00 И. Валеев. "Пусть голос мой всегда сердца тревожит…"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Весело живем"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.15 "Вечер.com"**
**23.00 "Горец-2"**
**01.00 Прогноз погоды**

✓ *Хәҙер ике тарифлы (көндөҙгө, төнгө) иҫәпләү приборҙары сығарыла башланы, улар электр энергияһы өсөн түләүҙә экономиялауға булышлыҡ итә.*



КӨНИТМЕШ



# ҒӘМӘЛЕНӘ КҮРӘ...

## әмәлен тап!

**Быйыл 1 ғинуарҙан торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә яңы хаҡтар ғәмәлгә инде. Республиканың тарифтар буйынса дәүләт комитеты 2011 йылда коммуналь түләүҙәргә хаҡтарҙың 15 проценттан да артмаясағын билдәләне (сағыштырыу өсөн - 2010 йылда иң юғары үсеш 25 процент тәшкил иткәйне). Хаҡтар артынан ҡыуып етеп булмай. Хөкүмәтебеҙҙең бер ҡулы менән биргәнде икенсе ҡулы менән тартып алыу ғәҙәтен яҡшы беләбеҙ. Шуға күрә, бер аҙ аҡса янда ҡалһын өсөн, кемгә, ни өсөн, күпме түләүебеҙҙе тикшереп, тиненә тиклем иҫәпләп тороу кәрәк. Ә инде, мәғлүм булыуынса, тиндәрҙән һумдар йыйыла.**

### Аҡса янда ҡалһын өсөн

Иң яҡшыһы, әлбиттә, өйҙә иҫәпләү приборҙары ҡуйҙыртыу. Юғиһә, иҫәпләү приборҙары булмау сәбәпле, нормативтар буйынса түләүселәр өсөн дәүләт тарифтарҙы күтәрергә итә.

**Һыу.** Миҫал өсөн шундай һандарҙы алып ҡарайыҡ. Эҫе һыу ҡулланыу нормативы әле айына бер кешегә 4,7 куб. тәшкил итә, ә иҫәпләү приборы булған фатирҙа уртаса ҡулланыу 2,4 куб. күрһәтә. Айырманы һиҙәһегеҙҙер.

Фатирҙа унда теркәлгәндәр һанынан кәмерәк кеше йәшәгән осраҡта иҫәпләү приборы ҡуйыу айырыуса мөһим. Ә инде киреһенсә икән - ул саҡта норматив буйынса түләү яҡшыраҡтыр ҙа.

Һыу ҡулланыуҙы иҫәпләү приборы үҙе 400 һумға яҡын тора, ләкин уны ҡуйҙыртыу һәм пломбалау өсөн тағы ла 1000-дән алып 1300-гә тиклем сығарып һалырға тура килә. Һөҙөмтәлә эҫе һәм һалҡын һыу өсөн ике прибор ҡуйҙыртыу 1400-ҙән 2700-гә тиклем барып баҫасаҡ. Ләкин был ярты йыл эсендә үҙ хаҡын ҡайтара, ә экономиялау 50 процентҡа тиклем тәшкил итәсәк. Шуны ла онотмағыҙ: был приборҙарҙы 4-6 йыл һайын алыштырып торорға кәрәк.

### Электр энергияһы

Күпселек фатирҙарҙа электр энергияһын иҫәпләүсе бер тарифлы приборҙар тора, улар энергия сығымдарын бер ставкалағы тариф буйынса иҫәпләй. Хәҙер ике тарифлы (көндөҙгө, төнгө) иҫәпләү приборҙары сығарыла башланы, улар электр энергияһы өсөн түләүҙә экономиялауға булышлыҡ итә: билдәләнгән ваҡытта улар автоматик рәүештә төнгө тарифҡа йүнәлешен үҙгәртә ала. Ә ул көндөҙгөгә ҡарағанда ике тапҡырға кәмерәк була.

Әгәр газ плитәһе ҡулланылған фатирҙа ике тарифлы иҫәпләү приборы алып ҡуйғанда, иртәнге сәғәт 7-нән 23.00 сәғәткә тиклем ҡулланылған энергияның киловатт -сәғәтенә хаҡ 1,91 һум булһа, 23.00 сәғәттән иртәнге 17-гә тиклем иһә 1,18 һум тәшкил итәсәк. Ә инде электр плитәһе менән файҙаланған фатирҙа ике тарифлы прибор ҡуйыу һөҙөмтәһендә көндөҙ электр энергияһының киловатт-сәғәте - 1,33 һум, ә төндә 0,83 һум күрһәтәсәк. Шуға күрә, әгәр һеҙ йорт-хужалыҡ эштәрегеҙҙе төндә башҡарырға ғәҙәтләнгән булһағыҙ, ике тарифлы иҫәп приборы ярҙамында байтаҡ аҡсаны янда ҡалдыра алаһығыҙ. Мәҫәлән, кер йыуыусы автомат-машинканың электр энергияһын бик күп "һөйрәүе" бер кем өсөн дә сер түгел. Ә бына уны киске 23.00 сәғәттән һуң эшкә ҡушһағыҙ, көндөҙгө кер йыуыуға ҡарағанда ике тапҡырға күберәк экономиялай алаһығыҙ.

Бынан тыш, ҡәҙимгеләре урынына хәҙер энергияны экономиялаусы лампочкалар күпләп һатыуға сығарыла башланы. Улар ҡәҙимге лампочкаларҙан ҡиммәтерәк торһа ла, үҙ хаҡын күпкә аҡлай һәм ун тапҡырға оҙағыраҡ хеҙмәт итә.

### Газ

Газ иҫәпләү приборы өс меңгә яҡын тора. Уны ҡуйҙыртыу хаҡын иһә газ хеҙмәте билдәләй, ғәҙәттә ул меңгә яҡын һум тәшкил итә. Газ иҫәпләү приборы 12 йыллап хеҙмәт итеүгә яраҡлы.

Һөҙөмтәлә газ иҫәпләү приборы һатып алыу, ҡуйҙыртыу бөтәһе 3-4 меңгә барып баҫа. Был сығымдарҙы ҡаплау ваҡыты ғаиләлә йәшәгән кешеләр һанына бәйле. Әгәр фатирҙа өсәүҙән артыҡ кеше йәшәһә, прибор ҡуйҙырыу урынлы булыр, ә бер генә кеше икән - уны ҡуйҙыртмаҫҡа ла була.

### Йылылыҡ

Йылылыҡ иҫәпләүсе дөйөм йорт приборы ярҙам итәсәк. Уның хаҡы 150 мең һум тирәһе. Был техника мөғжизәһе ҡуйылған хәлдә йортта йәшәүселәр хеҙмәттәр өсөн тик йылылыҡ биреү сезоны мәлендә генә түләй аласаҡтар. Был ғәҙәттә уларға 10-30 процент экономия бирә. Ә инде йылылыҡ өсөн хаҡтарҙың иң ҙур дәүмәл булыуын иҫәпкә алғанда, был иҫәпләү приборы менән йылына бер нисә мең һумды кеҫәлә ҡалдырырға мөмкин.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 февраль** Ғашиҡтар көнөнә арналған **"Мөхәббәткә 365 көн"** юмористик программаһында Рәсүл Ҡарабулатов, Айгөл Һағынбаева, Фәдис Ғәниев һәм Лилиә Биктимерова, Лилиә һәм Хәлит Фәтиховтар, Азамат һәм Нәсимә Тимеровтар, Миңзифа Иҫҡужина һәм Артур Туҡтағолов, Венера Рәхмәтуллина һәм Рушан Биктимеров, Лилиә Ишемйәрова һәм Урал Мортазин, Әлфиә Заһиҙуллина һәм Марсель Ҡотоев, Әлфиә Ғәлләмова һәм Рөстәм Шәрипов һәм башҡа билдәле башҡарыусылар ҡатнаша.

**Башлана 19.00. Билеттар 100-500 һум.**

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 февраль "Хыялый"** (С Әбүзәр), лирик комедия

**6 февраль "Их, кәләше лә кәләше!"** (Х. Зарипов), музыкаль комедия

**8 февраль "Алтын аҫҡыс"** (А. Толстой), музыкаль мажара. Башлана 14.00

**8 февраль "Мөхәббәт ҡарағы"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедия

**9 февраль "Гипнотизер"** (В. Сигарев), комедия

**10 февраль "Минең ғаиләм"** (Т. Дәүләтбирҙина), мелодрама

**11 февраль "Әй әттәгенәһе, ирем ҡайтты!"** (Н. Ғәйетбай), комедия

**12 февраль "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**5 февраль "Люстра"** (И Зәйниев), трагикомедия. Башлана 18.00

**8 февраль "Ташлама утты, Прометей!"** (М. Кәрим), трагедия

**9 февраль "Йәйәүле Мәхмүт"** (М. Кәрим), хикмәт

**10 февраль "Сыңҡылдаҡ себен"** (Р. Ураҡсина), әкиәт. Башлана 11.00

**10 февраль "Париж егете Әлфәнис"** (Л. Вәлиев), комедия

**11 февраль "Ромео һәм Джульетта"** (У. Шекспир), трагедия

**13 февраль "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миннулин), музыкаль комедия. Башлана 18.00.

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# РИШҮӘТСЕЛӘРҘЕ - ҠАТЫ ЯЗАҒА

**"Йәмәғәтселек фекере" фонды ришүәтселеккә ҡаршы көрәш темаһына арналған социологик тикшеренеүҙәр мәғлүмәттәрен халыҡҡа еткерҙе.**

Яуап биреүселәрҙең күпселеге (83 процент) - Рәсәйҙә коррупция кимәле юғары, ә 46 проценты - коррупция көндән-көн сәскә ата, тип иҫәпләй. Бер йыл элек был күрһәткестәр түбәнерәк булған. Респонденттарҙың 34 проценты хәл әле генә үҙгәрмәйәсәк, тип белдерә.

Ришүәтселеккә ҡаршы көрәш буйынса халыҡ түбәндәге алымдарҙы тәҡдим итә. Коррупционерҙарҙың милкен конфискациялауҙы 84 процент яуап биреүсе яҡлай. 80 проценты ришүәт биреүҙә ҡатнашыусыларҙы яуаплылыҡҡа тарттырырға кәрәк, тип иҫәпләй. Ҙур күләмдәге штрафтар өсөн 77 процент респондент һынғай яуап бирә.

Рәсәй Юстиция министрлығының Башҡортостан идаралығы етәксеһе ярҙамсыһы Андрей Игнатенко ла был мәсьәлә буйынса үҙ фекерен белдерҙе:

-Милекте конфискациялау сараһын күпселек яҡлаһа ла, бөгөнгө шарттарҙа уның һөҙөмтәһе самалы буласаҡ. Беренсенән, һүҙ тотош милек түгел, ә уның енәйәти юл менән табылған өлөшө тураһында бара. Хоҡуҡи дәүләттә милектең бындай юл менән тупланыуын тәүҙә иҫбатларға, шунан ҡулға алырға мөмкин. Тап ошоноһо ауырлыҡтар тыуҙырасаҡ та инде. Икенсенән, әгәр ҙә респондент-тар коррупционерҙың бар милкен ҡулға алырға кәрәк, тип иҫәпләй икән, ошоға ярашлы Рәсәйҙә кемде ришүәт алыуҙа тоталар икәнен дә уйлап ҡарарға кәрәк. Был осраҡта кем 500 һум ришүәт алып, бар милкенән яҙырға тейеш? Дөрөҫ, уҡытыусылар һәм табиптар. Йәғни, күләм һәм сумма йәһәтенән был тургайҙарға туптан атыу менән тиң буласаҡ. Өсөнсөнән, иң ҙур ришүәтсене -коррупционерҙы ҡулынан тотоу ауыр, ул үҙенең законһыҙ килемен башҡаларға рәсмиләштерергә тырыша.

2011 йылдың 11 ғинуарында Рәсәй Президенты Хакимиәтенең хоҡуҡи идаралыҡ башлығы Лариса Брычева коррупцияға ҡаршы тәҙәтмәләр пакеты тәҡдим итте. Уның буйынса, 25 меңгә тиклем ришүәт алыусы 25-50 тапҡырға, 25-тән 150 меңгә тиклемге ришүәт өсөн 30-60 тапҡырға, 150 меңдән 1 млн. һумға тиклемге ришүәт өсөн 40-70 тапҡырға, унан да күберәк сумма өсөн 80-100 тапҡырға арттырып штраф түләргә тейеш. Етмәһә, штраф күләме иректе сикләү кеүек яуаплылыҡтан ҡотҡармай. 1 млн. һумдан артыҡ ришүәт өсөн кеше 8-15 йылға иркенән мәхрүм ителергә һәм сумманы 70 тапҡырға арттырып түләргә тейеш була. Тәҡдим ителгән пакетҡа коррупцион енәйәттәрҙең яңы составы ла индерелгән. Ришүәт биреүгә ярҙам итеүселәргә 20-40 тапҡырға ҙурыраҡ штраф, йәки 5 йыл төрмә һәм 20 тапҡырға ҙурыраҡ штраф, ә ришүәт биреү юлы менән "мәсьәләләрҙе хәл итешергә" тәҡдим итеүсегә 15-70 тапҡырға ҙурыраҡ күләмдә штраф ҡаралған.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ришүәтселек тураһында гәзит уҡыусылар ни уйлай? Кем үҙ ғүмерендә күпме ришүәт биргәне һәм ниндәйҙер һорауын хәл иткәне булды? Бәлки, ошолар тураһында исем-фамилияғыҙҙы әйтмәйенсә генә булһа ла фекерегеҙ менән уртаҡлашырһығыҙ?**

ИҒЛАНДАР

**"АФАРИН"** иждад студияһы башҡорт телендә туйҙар, юбилейҙар, реклама акциялары, балаларҙың тыуған көндәрен ойоштора. Байрам залын шарҙар һәм туҡымалар менән биҙәйбеҙ. Шулай уҡ бәләкәстәрҙе байрамға әҙерләйбеҙ - бейергә, йырларға, ҡурайҙа уйнарға, шарҙан төрлө уйынсыҡтар яһарға өйрәтәбеҙ.

**Телефондар: 251-14-76, 8-937-335-52-35, 8-917-400-68-94. www.afarin-ufa.ru**

* * *

**"ТВОЙ АЛЬБИОН"** **үҙәгендә инглиз телендә иркен аралашыуға өйрәтәбеҙ.** Уҡытыуҙың 80 проценты практика аша ғәмәлгә ашырыла. Телефон: **266-13-43. www.youralbion.ru.**

* * *

**Редакцияға башҡорт телен белгән тәжрибәле бухгалтер кәрәк.**

ӘЙТӘГҮР!

**Бынан тап бер йыл элек республикабыҙҙың төп радиоканалы "Юлдаш"тың эшен тағы ла киңәйтеү, республикабыҙҙың мәҙәни тормошон тулыраҡ сағылдырыу маҡсатында башҡорт телендәге "Ашҡаҙар" радиоканалы ойошторолғайны. "Ашҡаҙар"ҙың тәүге аҙымдары ышаныслы булды. Ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә үҙенең бихисап тыңлаусыларын да табып өлгөрҙө. "Ашҡаҙар"ҙың даими тыңлаусылары бына ни ти радио тураһында:**

# ҮТКӘНДӘРГӘ ҺАЛЫНҒАН КҮПЕР,

## йәғни "Ашҡаҙар" танһыҡты ҡандырыусы канал




**Сәүиә СИРАЕВА, Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ артисы:** "Ашҡаҙар" радиоһы халҡым күңеленә йәшен уты кеүек килеп инде лә, үҙенең лайыҡлы урынын алды. Мин уның тураһында тәүҙә дуҫтарымдан ишетеп ҡыҙыҡһындым. Үҙемдең радиоалғыстан каналды оҙаҡ эҙләнем. Уны 66,68 МГц йышлыҡтарында табып алдым. Хәҙер рәхәтләнеп, кинәнеп тыңлайым. Радионың алтын фондында һаҡланған яҙмаларҙы ишетер өсөн "Ашҡаҙар" радиоһының аҙналыҡ программаһын көтөп алам. Яҙмала һаҡланып ҡалған бик күп шәхестәребеҙҙең тауышы, һәр ҡайһыһы тиерлек миңә таныш. "Уҙған ғүмеремдә ниндәй генә шәхестәребеҙ менән аралашып йәшәмәгәнмен!"- тим. Уларҙы ишетеп, күңелем тулыша. Һағындыра, юҡһынам үҙҙәрен. "Ашҡаҙар" радиоһы мине йәшлегемә алып ҡайта, үткәндәр менән бәйләй. Тарихыңды онотһаң - бөгөнгөң юҡ, тигән төшөнсәне нығытҡан каналға унышлар теләйем.

**Флүрә НОҒОМАНОВА, Башҡортостандың халыҡ артисы:** "Ашҡаҙар" радиоканалы эфир тулҡындарына сыҡҡандан алып мин башҡа каналдарҙы ҡабыҙып та ҡарағаным юҡ. Был каналдағы бөтә тапшырыуҙар ҙа күңелемә ята. Бигерәк тә Башҡортостан радиоһының алтын фондынан алынған элекке тапшырыуҙарҙы ҡабатлауҙары оҡшай. Был тапшырыуҙарҙы мин түҙемһеҙләнеп көтөп алам. Улар "Ашҡаҙар"ҙың ҙур ҡаҙанышы. Гел таҡмаҡ, енел йырҙар ғына түгел, ә халыҡ йырҙарын йыш биреүҙәре, быға тиклем радиола яңғырамаған тауыштарҙы сығарыуҙары ҡыуандыра. Йөкмәтке төрлө диалогтар, монологтар менән байытыла. Киләсәктә балалар, үсмерҙәр өсөн тәрбиәүи юсыкта тапшырыуҙар сығарылһа, йөкмәтке тағы ла мауыҡтырғыс булыр ине.

**Илгиз ЮЛАМАНОВ, эшҡыуар:** Радио - эш менән булышҡанда ла, юлда йөрөгәндә лә, аш ашағанда ла йырмон, яңылыҡтар тыңлау өсөн иң унайлы сара һәм уның кәрәге бер ваҡытта ла бөтмәйәсәк. Мин һәр ваҡыт "Юлдаш" радиоһын тыңланым. Былтыр яңылыҡтарҙан башҡортса тағы ла бер канал - "Ашҡаҙар" радиоһының эфир тулҡындарына сығыуы тураһында ишетеп ҡыуанғайным, тимәк, "Юлдаш"ҡа тағы ла иш булды! Башта "Ашҡаҙар"ҙы йышлыҡтарҙа таба алмай аптырап бөттөм. Теләгән - моратына ирешкән тигәндәй, таптым барыбер. Хәҙер мин үҙебеҙҙең ике радиоканалды ла алмашлап тыңлайым. "Ашҡаҙар"ҙа үҙебеҙҙең халыҡ йырҙары, классик йырҙар йыш яңғырай - шуныһы яҡшы. Билдәле шәхестәребеҙ менән үҙгарылған әңгәмәләрҙе, радиоспектаклдәрҙе яратып тыңлайым. Шулай уҡ дини тапшырыуҙар ҙа бик оҡшай. "Ашҡаҙар" беҙҙең мәҙәниәтебеҙҙе, сәнғәтебеҙҙе, рухи ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлап ҡалыуға баһалап бөткөһөҙ өлөш индерә.

**Миләүшә ҠАСИМОВА, журналист:** Юғары тиҙлек, реклама, PR-ға ҡулайлаштырылған каналдарҙа хәҙер рухты байытырлыҡ мәғлүмәт табыуы бик ауыр. Ә "Ашҡаҙар"ҙы мин кинәнеп тыңлайым, сөнки ул күңелде үҫтерә, зауыҡты камиллаштыра. Әлеге лә баяғы замандан артта ҡалмайым тип сапҡан милләттәштәребеҙгә халҡыбыҙҙың әҙәбиәтен, тарихын бәйән итеүе менән бик әһәмиәтле ул. Сифатлы музыка, юғары мәҙәниәтле профессионалдар уның баһаһын күтәрә. Донъяны баҫып алған енелелпелек ҡағылмаған үҙ каналыбыҙ булыуы - оло шатлыҡ. Бер йәшлек кенә булһа ла, киләсәге өмөтлө уның. Георграфияны киңәйеп, төпкөл райондарҙа ла тыңлау мөмкинлеге асылһа, йәнә лә шәп булыр ине!

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ҠАР ҠАТЫШ ЯМҒЫР...

## әшкәтәү була

**Ҡалала йәшәгәндә, нисектер, һөйләш бер төрлөгә әйләнеп китә кеүек, йәғни бөтәһе лә аңлаған әҙәби телдә һөйләшә башлайһың. Һине бүтәндәр аңлаһын өсөн һүҙҙәрҙе һайлап ҡына ҡулланаһың, шул рәүешле ҡайһы бер әйберҙәрҙең мәғәнәһен киңерәк һәм тапҡырыраҡ асып биргән бик матур һәм һирәк яңғыраған һүҙҙәр һөйләшеңдән төшөп ҡалып, онотола бара. Быны мин ауылға ҡайтып йәшәй башлағас һиҙә төштөм. Тәүҙә ҡайһы бер һүҙҙәр минең өсөн сәйерерәк яңғыраһа ла, тора-бара үҙем дә уларҙы ҡушып һөйләй башланым, сөнки ҡайһы саҡта ниндәйҙер хәл-ваҡиғаға йәки әйбергә ҡылыҡһырлама бирә алмай аҙаплангандa, тап урындағы халыҡтың һүҙлек хазинаһы ярҙамға килә лә инде. Әле мин тыуған яҡтарым Ейәнсура һәм килен булып төшкән Бөрйәндә ишеткән-белгән һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрәм.**

**Әшкәтәү** - өҫтән ҡарлы ҡатыш ямғыр яуып, аҫта лысҡылдап ятҡан еүеш миҙгелгә әйтәләр.

**Сипатай** - кәрсәйем беҙҙе шулай тип әйтеп, арҡабыҙҙан һөйә. Үҙенә күрә яратыу һүҙелер инде.

**Йәмкә** - күмер ҡыҫҡыс

**Йәпәтник** - кемгәлер ярамһаҡланып, ярарға тырышыу

**Бөләхәт** - тикторма҇ балаға әйтәләр.

**Һере** - ныҡ һәм бирешмәүсән кеше.

**Тибәрәс** - "бына һин уны" тигән мәғәнәлә.

**Текемнәү** - бер туҡтауһыҙ бер кешегә нимәнәлер тызыу, ныҡышыу.

**Кәшкелдәү** - йүткереү.

**Ҡурпыш, ҡупыҡ** - ҡупайырға яратҡан кеше.

**Сөркәш** - әсе телле кеше. Сөрәгәй һүҙенәндер инде.

**Сабаҡай** - "сабаҡы" малай, әрләү һүҙенән.

**Шешкә тулыу** - кемгәлер ҡарата йыйылған асыу.

**Һауһаҡ** - сәләмәт кеше.

**Шимдәү** - ваҡыты-ваҡыты нимәнәлер әҙләп эсеп йөрөү.

**Динара ҠОТЛОБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# СӘХНӘНӘН ТӨШКӘС...

## битлегенде һалырға онотма

Донъялағы иң яҡшы реформа - үҙ-үҙеңдән башланғаны.

**(Ману).**

Һынауҙар йоғонтоһонда ла үҙгәрмәгән холоҡ бер тин дә тормай.

**(Генри Джеймс).**

Ҡайһы берәүҙәр сәхнәнән төшһә лә битлеген һалырға онота.

**(Станислав Лец).**

Ғүмер ул тиклем дә ҡыҫҡа түгел, һәр хәлдә, изгелекле булырға өйрәнеүгә генә етә.

**(Ралф Эмерсон).**

Картлыкта ла бәхетле булып була. Кем дә кем матурлыкты күреү һәләтен ғүмер ахырына тиклем һаҡлай ала, ул бәхетле.

**(Франц Кафка).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер бай кешенең бәләкәй яҫы танаулы ҡыҙы була. Атаһы уны кейәүгә бирергә теләй. Байлығына ҡыҙып, өйгә төрлө яҡтан кейәүҙәр ағыла, әммә улар ҡыҙҙың йәмһеҙ танауын күрәләр ҙә, кире китәләр. Атай кеше сығырынан сыға, шунан ҡыҙына өйләнгән кешегә бик ҙур байлыҡ вәғәҙә итә. Ҡоскә бер егетте табып, ҡыҙға өйләндерәләр. Ҡыҙ ҙа, уның кейәүе лә дини кеше була, шуға ла улар туйҙан һуң хажға барырға булалар. Йәштәр нисек кенә бай булмаһын, үҙҙәрен бәхетле итеп тоймайҙар. Йәш ҡатын барыһының да уның танауынан көлгәнен һиҙеп тора. Уның ғазапланғанын күреп, бер дин әһеле уга:"Һинең танауыңды бары тик һине яралтҡан ғына төҙәтә ала, Уға доға ҡыл", - ти. Ҡатын ирен тауҙарға китеп, Хоҙайға ялбарайыҡ, доғалар ҡылайыҡ, тип тәҡдим итә. Ире ризалаша. Бына улар икәүҙәникәү генә тауҙар араһын килеп урынлашалар. Ҡатын көн-төн доғалар уҡый, Хоҙайҙан уны тыңлауын ялбара. Хоҙай, ысынлап та, ҡатын эргәһенә килә һәм уның ни теләүен һорай. "Миңә бүләк итеп ҙур танау бир", ти ҡатын. "Ярай, шулай булһын", ти Хоҙай һәм ҡатындың үтенесен үтәй. Ҡатын көҙгөгә ҡараһа, танауының элеккегә ҡарағанда ла йәмһеҙерәк һәм бик ҙур булыуын күрә.Ул тағы ла доғалар уҡый һәм Хоҙайға ялбара башлай. Хоҙай тағы килә һәм нимә кәрәклеген һорай. "Был тиклем ҙур танау кәрәкмәй миңә", ти ҡатын. "Ярай, һинеңсә булыр", ти Хоҙай һәм уның үтенесен ҡәнәғәтләндерә. Ҡатын көҙгөгә ҡараһа, уның танауы бөтөнләй юҡҡа сыҡҡан...**

**Булғаны менән ҡәнәғәтләнә белергә кәрәк шул".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.

Мөхәрририәт: Әхмәр ҮТӘБАЙ, Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Таһир ИШКИНИН, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6206
Заказ 394